ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11-17 апрель (алағарай) 2025

№ 14 (1158)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Өлкәндәрҙең...**
оҙон ғүмерлелек серҙәре



2-3

**Артыҡ шатлыҡ...**
һағыш килтерә



6

**Балалы кеше - бай кеше**



8

**Нимә ул һурнаҡ,**
ул ялҡау ҡорттар күсе генәме?



12-13

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

*Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2 апрелдән 13-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 872 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ошо ун көнлөктә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

*БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ*

# БАЛА ЭШ МЕНӘН ҮҪҺӘ...

## бәхеткә юл асыла




**Хәйбулла районы Степной ауылынан ете бала тәрбиәләгән Ҡоҙашевтар ғаиләһе өсөн быйылғы йыл матур мәшәҡәттәрҙән башланып китте. "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе - 2025" республика конкурсында ҡатнашып, Гран-при яуланы улар.**

**(Дауамы 9-сы биттә).**

*БАШ ҠАЛАМ*

**Һәр яҙ тотош илдә, шул иҫәптән беҙҙең баш ҡалабыҙҙа ла йыйыштырыу-таҙалау өмәләре ойошторола. Өфө халҡы берҙәм булыуы менән айырылып тора. Быға тиклем үткән өмәләрҙә мәктәп уҡыусылары, студенттар, төрлө ойошма хеҙмәткәрҙәре ихлас ҡатнашты. Эштәр ҙә гөрләне, музыка яңғыраны, йәнле аралашыу ҙа барҙы, хатта элекке замандарҙағы кеүек тукланыу нөктәләре ойоштороп ебәрелде.**

# ТАҘАРҘЫ. ТАҘАРТЫЛМАНЫ.



Ҡала бермә-бер таҙарып ҡалды. Шулай ҙа өмәгә лә, ҡаланың таҙалығына ла төкөрөп ҡараусы шәхси ойошмаларҙың булыуы күңелде ҡыра. Мәҫәлән, Аксаков паркына ҡаршы бейек йорттоң беренсе ҡатында урынлашҡан төрлө шәхси ойошмалар алдындағы ҡыш буйына йыйылған сүп-сар шул килеш ятып ҡалды. Бындай тәртипһеҙлеккә юл ҡуйырға ярамай - әгәр ҙә шунда эшләйһең, ниндәйҙер хеҙмәттәр күрһәтәһең икән, тимәк, ул тирәне ялтыратып тоторға тейешһең.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТҮЛӘҮЛЕ БУЛА...

**Өфө власы ҡала биләмәһен төҙөкләндереү ҡағиҙәләренә тарихи үҙәктә түләүле парковка индереү буйынса йәмәғәт фекер алышыуҙарын ойоштора. Тейешле документтар ҡала Советы һәм ҡала хакимиәте сайтында баҫылған.**




Фекер алышыуҙар 14 апрелгә тиклем бара. Төҙөкләндереү ҡағиҙәләренә тәҡдим ителгән үҙгәрештәргә ярашлы, муниципаль парковкаларҙы (парковка урындарын) файҙаланыусылар муниципаль хоҡуҡи акттарҙың талаптарын иҫәпкә алып түләргә бурыслы. Тикшерелгән проектҡа Пушкин, Аксаков, Чернышевский, Карл Маркс, Достоевский, Мостай Кәрим, Революция һәм Цюрупа урамдары менән сикләнгән участкала урынлашҡан 1188 автомобилгә иҫәпләнгән муниципаль парковка схемаһы бирелә.

Алдан баҫылған мәғлүмәттәр буйынса, проектты тормошҡа ашырыу ваҡытында парковка сәғәте хаҡы Өфөлә 40 һум тәшкил итәсәк. Был сумма, РФ Транспорт министрлығы тәҡдимдәренә ярашлы, ҡала буйынса уртаса эш хаҡы һәм йәмәғәт транспортында йөрөүгә тарифты иҫәпкә алып билдәләнгән. Парковка өсөн мобиль ҡушымта, смс-хәбәр, банк терминалдары һәм QR-кодтар ярҙамында түләргә мөмкин. Түләүле парковкалар эшләй башлауҙың аныҡ датаһы әлегә билдәләнмәгән, әммә тарихи үҙәктәге урам участкаларында зәңгәр билдәләр барлыҡҡа килгән. Ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы, мэрия алдан үҙенең рәсми сайтында түләүле парковкаларҙы ҡулланыу датаһы, ҡабул ителгән тарифтар һәм водителдәргә кәрәкле башҡа мәлдәр тураһында мәғлүмәт урынлаштырасаҡ.

12+

✓ *Иҫеңдә тот һәм ниндәй генә хәлдә лә ғүмереңдең һәр сәғәте, һәр минутында ла тыныслыҡ һаҡлап ҡала бел, бына шунда ла инде оҙон ғүмерлелек сере. Ығы-зығы, буш һүҙлелек, ҡыҫыр хыялдар - һаулыҡты ҡаҡшатыусы дошмандар.*



*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ТУҒАНЛЫҠТЫ ҺАНЛАМАҒАН...

## ожмахҡа инмәҫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Мотал РӘМОВ, РФ һәм БР журналистар союзы ағзаһы:*** Динебеҙҙә туғандарға ҡарата яҡшы мөнәсәбәттең ни ҡәҙәр ҙур әһәмиәткә эйәлеген раҫлаған хәҙистәр бихисап. "Туғандары менән бәйләнеште өҙгән кеше ожмахҡа инмәҫ..." тигән һүҙҙәр шуларҙың тик береһе генә.

Тәбиғәтем шулаймы, әллә юғарынан бирелгән халәтемме - минең өсөн туғанлыҡ хисе иң юғары һәм ҡәҙерле ҡиммәт, байлыҡ. Шуғалыр ҙа, туғандарымдың барыһын да яҡын һәм тигеҙ күрәм. "Туғандарың шулай күпме, әллә юҡтан туған яһап тик йөрөйһөңмө?"- тиер кемдер. Журналист булып эшләгәнемдә ҡайҙа ғына барһаҡ та: "У-у-у, туғаным килгән бит! Әйҙә беҙгә, сәй булһа ла эсеп китерһегеҙ, юлдаштарыңды ла эйәрт", - тип әйҙүкләп, өтәләнеп тороуҙары, бара ҡалһаҡ, йүгереп йөрөп һыйхөрмәт күрһәтеүҙәре үҙем өсөн оло бер мәртәбә, ғорурлыҡ була торғайны. Кемдең туғаны - шуның туғаны бит! Һүҙҙәрем алдыҡ булһа, шул замандарҙа бергә эшләгән хеҙмәттәштәрем алдарға бирмәҫ. Әйткәндәй, ауыл һайын туғандарымдың күплеген, ихласлығын Сибай филармонияһында эшләгән йылдарымда "Йырлар йырыбыҙ һин, Йылайыр!" исемле концерт менән йөрөгәнебеҙҙә филармония артистары үҙ күҙҙәре менән күреп, ауыл һайын туғандарымдың ҡәҙер-хөрмәтен күреп инанды. Уларҙың: "Гастролдәргә Мотал ағай менән йөрөргә кәрәк икән ул - ҡайҙа ғына барһаҡ та, ҡаҙы ла тултырма, бишбармаҡ та һалма, табын тулы ниғмәт!" - тип һоҡланыуҙары, алғышланып рәхмәт әйтеүҙәре үҙе ни тора!

Йылайырҙарҙан тыш, Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил, Ейәнсура яҡтарында ла таныш-белеп тороуҙары, хәл ҡәҙәрем ҡунаҡ итергә тырышыуҙары насармы ни! Бына әле күптән түгел генә әсәйем яғынан апай-ағайҙарым, еңгәй-еҙнәйҙәрем, ҡусты-һеңлеләр, килен-кейәүҙәр Хәйбулла районының Атингән ауылында ҙур табынға йыйылып, әсәйемдең бер туған кинйә ҡустыһы Сәлимйән ағайыбыҙҙың вафатына бер йыл тулыу уңайынан Фәниә еңгәйебеҙ ул-ҡыҙҙары менән үткәргән аят мәжлесендә булып, уба-туба туғандарҙы күреп, күптән йыйылып килгән эс серҙәребеҙ менән бүлешеп ҡайттыҡ. Сибайҙан, Аҡъярҙан, Бүребайҙан, Йылайырҙан, Байғусҡарҙан, Һамарҙан, Йәнтештән һәм башҡа тарафтарҙан килгән туғандар күрешеүҙән ҙур шатлыҡ кисерҙек, мәрхүмдәребеҙ рухына бергәләшеп доға ҡылдыҡ. Фекер алышып, киләсәктә йышыраҡ күрешеп торорға килешеп таралыштыҡ.

Туған ауылым Сәләхтә һәр йортта ҡәҙерле ҡунаҡбыҙ. Рәмовтар, ҙур ғына ара булып, үҙ-ара бик татыу аралашып йәшәне. Картуф сәсеү һәм ҡаҙыу, бесән осоро, ҡаҙ өмәләре, һуғым, баш итенә саҡырышыу һәм башҡалар осоронда Рәмовтар араһы сыулашып саҡырышып алыр ине. Абдулла, Нотфулла, Әбделмән, Әбделхәй, Хөснолхаҡ, Марат, Батырйән, Зәкирйән, Зәйнулла, Әнүр һәм башҡа ағай-олатайҙар һәр саҡ бер табынға өйөрөлдө. Ҡыҙ туғандарын да ситкә типмәне улар: Файза һәм Сибәрбикә инәйемдәр, Мәүәзиә һәм Ураҙбикә апайымдар ҙа һәр береһенең табын түрендә булды.

Бар ине шул туғандарҙың берҙәм, татыу саҡтары... Тик берҙән-бер көн килеп туғандар бер нисә төркөмгә бүленде... Заман шойҡанымы был, әллә кешенең үтә күп белеп, "аҡыллы" булып китеүеме? Аңлатыуы ҡыйын... Был хәл, үкенескә ҡаршы, туғансыл, ҡунаҡсыл халҡым араһында ҡәҙимге күренеш була бара.

Нисек кенә булмаһын, мин үҙем туғандарҙың татыу һәм берҙәм булыуҙарын теләр инем. Өс көнлөк кенә фани донъяла килешеп, матур йәшәүҙәргә ни етә! Байлыҡ, тибеҙ, шуның артынан йүгереп, ата-әсәһен, бер туғандарын онотоусылар, һанламаусылар күбәйә арабыҙҙа... Ә байлығын әхирәткә тейәп китеүселәр бармы ни? Иҫән сағыбыҙҙа ҡәҙерләйек бер-беребеҙҙе! Иртәгә һуң булырға мөмкин...

*КӨНАУАЗ*

# ӨЛКӘНДӘРҘЕҢ...

## оҙон ғүмерлелек серҙәре



"Мин был донъяла һеҙҙең һымаҡ оҙаҡ йәшәргә теләр инем, тик уның сере нимәлә, аңлат әле, Уҡытыусым", - тип өндәшкән бер ваҡыт шәкерт остазына. "Мин һиңә аңлатырмын да ул, тик йәш саҡта ололар һүҙе аҡылдан бигерәк өгөт-нәсихәт тип ҡабул ителә. Ә шулай ҙа һорауыңа ябай ғына яуабым әҙер. Оҙаҡ йәшәүҙең сере - һаулыҡ, тиҙәр, ғәҙәттә, бында дөрөҫлөк бар, ләкин төп сер ана шул һаулыҡ нигеҙенә йәшеренгән". "Йә, остазым, әйтә һал, тиҙерәк: ниндәй сер ул унда йәшеренгән?" - тип түҙемһеҙләнә шәкерт. "Сабырлыҡ! - ти остаз шәкерте ҡыҙлығына тоҫҡап. - Һаулыҡ нигеҙе тап ана шунда. Ысынлап әйтәм, иҫеңдә тот һәм ниндәй генә хәлдә лә ғүмереңдең һәр сәғәте, һәр минутында ла тыныслыҡ һаҡлап ҡала бел, бына шунда ла инде оҙон ғүмерлелек сере. Ығы-зығы, буш һүҙлелек, ҡыҫыр хыялдар - һаулыҡты ҡаҡшатыусы дошмандар. Сабыр ғына маҡсатыңа табан атла - ҡабаланма, тыпырсынма: артыҡ һүҙ һәм файҙаһыҙ ғәмәлдәр ғүмерҙе оҙайтмай - шуны бел!"

Остаз кәңәше менән килешергә лә, уны оҙаҡ йәшәүҙең берҙән-бер сараһы итеп ҡабул итмәҫкә лә мөмкин - һәр кемдең үҙ юлы, үҙ тәжрибәһе. Айырыуса бөгөнгө заманда. Остаздың шәкерте, йәш кеше булараҡ, юҡҡа ғына тәүҙә Уҡытыусыһы философияһын ҡабул итә алмай ҡаңғырмағандыр. "Нисек инде? - ти ул ғәжәпләнеп. - Бер ҡайғыһыҙ, бәлә килгәндә лә бойоҡмай, хатта мөхәббәт ғазаптарынан ҡасып, өлгәшкән еңеүҙәрең шатлығын да татымайынса йәшәргә, ти! Был бит ысын тормош булмай",- тип башын эйә күңелһеҙләнгән шәкерт. "Юҡ, тормоштан ҡасма һин, самаһыҙлыҡтан, хаттин ашыуҙарҙан ҡас - бына шунда бөтөн сер", - ти ахырҙа остаз.

Сабырлыҡ өлгөһө күрһәтеү, ҡайһы бер нәмәләрҙә үҙенде сикләй белеү беҙҙең халыҡта ла хуплана ғына. Был хаҡта "Тыныс йәшәйем, тиһәң, телеңде тый; оҙаҡ йәшәйем, тиһәң, ауыҙыңды тый", "Тән сырхауы - күп ашау, йән сырхауы - күп һөйләү", "Туя ашама, ҡуя аша", ти бит халыҡ аҡылы ла. Хәҙер бит аҙыҡ-түлек сифатының да юҡҡа сығыуы, уны яһалма өҫтәмәләр, химия "ҡаҙаныштары менән байытыу" ҙа өлкәндәрҙе генә түгел, бигерәк тә йәштәрҙе лә туҡланыуға ҡарата һағыраҡ булыуҙы талап итә. Был мәсьәләләр бөгөнгө көндә оҙаҡ йәшәргә теләгән кешеләрҙе берләштереүсе "100" клубы тип аталған йәмғиәттең ҡағиҙәләре менән тап килә. Уның иң беренсе ҡағиҙәһе үк туҡланыуҙа

*БАШ ҠАЛАМ*

# ТАҘАРҘЫ. ТАҘАРТЫЛМАНЫ.

**(Башы 1-се биттә).**

Мин, Башҡорт дәүләт медицина университеты студенты булараҡ, Телеүҙәктән уҡыу йортона көн дә йәйәү йөрөйөм. Һәм бына нисә йылдар буйы Гоголь һәм Карл Маркс урамы араһында урынлашҡан ойошма һәм магазиндарға илтеүсе баҫҡыстарҙың ҡот осҡос хәлдә булыуын күреп күңелем ҡыйыла. Ҡаланың тарихи үҙәгендә урынлашҡан, көнөнә меңәрләгән кешенең күҙенә бәрелеп ятҡан ошо емерек баҫҡыстар хатта үҙҙәре лә илай төҫлө. Быйыл ҡышын уларҙы бөтөнләй таҙартыусы кеше булманы, магазинға күтәрелергә теләүселәрҙең нисек ыҙалауҙарын күреп-аңғарып йөрөнөм. Кемдең яуаплылығындалыр был баҫҡыстар, кем уларҙы төҙөкләндерергә һәм кем ҡышын ҡарҙан таҙартырға тейештер - белмәйем, әммә ҡалабыҙҙың йөҙөнә ҙур ҡыҙыллыҡ килтереп тора улар.

Шулай уҡ мине ҡалала сүп-сар һауыттарының бик әҙ булыуы борсой. Шул уҡ ҡаланан ситтәге автобус туҡталҡалары янында ла улар юҡ кимәлендә. Ни өсөн матур, ныҡ сүп-сар һауыттары ултыртып бөтмәҫкә һәм уларҙы даими таҙалап тормаҫҡа һуң? Был бит беҙҙең көндәлек тормошобоҙға тура йоғонто яһай.

Ыңғай күренештәр ҙә бихисап баш ҡалала. Мәҫәлән, Өфө урамдары буйлап хәҙер ҙур, таҙа автобустар елдерә. Һәм уларҙың ҡайһы берҙәренең тематик йәһәттән биҙәлеүен күреү миңә бик оҡшай. Күптән түгел генә Өфөлә Башҡортостандың Милли музейы брендына аҫтында йөрөгән автобусты күрҙем. Был, берҙән, музейға иғтибарҙы арттыра. Икенсенән, автобус үҙе лә йәнләнеп ҡалғандай. Ошондай брендланған автобустар күберәк булһын ине ҡала урамдарында.

Шулай итеп, ҡаланың үҙендә өмәләр үтте, таҙартылды, йыуылды, тигәндәй. Ә хәҙер ҡаланан әҙ генә ситкә сығып ҡарайыҡ: трасса буйҙары, ауылдарға илткән юлдар, автобус туҡталҡалары янында сүп-сар өйөмдәре ята әле...

**Алмаз ЙӘНБИРҘИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Благовещен районы буйлап эш сәфәре барышында "Аркстал" предприятиеһының яңы етештереү майҙансығында булды. Йылдам үҫеш биләмәһе резиденты төҙөлөш тармағы өсөн декоратив металл конструкциялар етештерә. Предприятие директоры Роман Куклин һүҙҙәренсә, әлеге көндә заводта 60 кеше эшләй, уртаса эш хаҡы - 70 мең һум, 80,5 миллион һум инвестицияланған. "Аркстал" компанияһы инжиниринг хеҙмәттәренә, йәмәғәт урындары интерьерҙары өсөн проекттар эшләүгә махсуслашҡан "БашГрупп" төркөмөнә инә.

✓Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығында май байрамдарында ял көндәре хаҡында иҫкә төшөрҙөләр. "1 май - Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы, 9 май - Еңеү көнө ял көндәре булып тора. Хеҙмәткәрҙәрҙең ял һәм байрам көндәрен рациональ файҙаланыу өсөн Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән ялдар 4 ғинуарҙан 2 майға һәм 23 февралдән 8 майға күсерелде. Шулай итеп, биш көнлөк эш аҙнаһында 1-4 майҙа, шулай уҡ 8-11 майҙа ял итәбеҙ. Алты көнлөк эш аҙнаһында 1 һәм 4 май, шулай уҡ 8, 9 һәм 11 май - ял көндәре", - тиелә ведомство белдереүендә. 1 һәм 9 майҙағы байрам көндәре отпусктың календарь көндәре иҫәбенә индерелмәй.

✓Үҫмерҙәргә ата-әсәләрҙең ризалығынан тыш банк иҫәбен асыуҙы тыйыуҙары ихтимал. Рәсәй парламентының яңы закон сығарыу башланғысы тураһында Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, банктарҙың үҫмерҙәргә ата-әсәләрҙең яҙма ризалығы менән генә иҫәп асырға хоҡуғы тураһында закон проектын депутаттар беренсе уҡыуҙа май айында ҡарарға ниәтләй.

✓Йылайыр районынан Махсус хәрби операция яугире, гвардия ефрейторы Павел Голубцов хәрби бурысын үтәгәндә ҡыйыулыҡ һәм профессионализм күрһәткән. Ул Украина хәрби көстәренең ике FPV-дронын атып төшөргән. Яҡташыбыҙҙың батырлығы тураһында Рәсәйҙең Оборона министрлығынан хәбәр иттеләр.

✓Башҡортостанда илебеҙҙәге һанлы тәүге имам эшләй башланы. Республика мосолмандарының Диниә назараты мөфтөйө Айнур Бирғәлин хәбәр итеүенсә, Өфөлә эшләнгән "Һанлы имам" мобиль ҡушымтаһынан яңылыҡтарҙы, намаҙ ваҡытын, ҡибла йүнәлешен белергә һәм башҡа мәғлүмәттәр менән танышырға була. Бынан тыш, һәр кем үҙенең шәхси кабинетында онлайн режимда хәйер һалырға мөмкин. Әйткәндәй, яңы һанлы имам ярҙамында ике аҙна эсендә 800 мең һум йыйылған. Виртуаль остаз Өфөнөң Мәрйәм Солтанова исемендәге Ислам колледжы менән берлектә ҡулланыуға индерелде, тип белдерҙе мөфтөй үҙенең телеграм-каналында.

сама белеү кәрәклеге хаҡында: аҙнаһына 3-4 тапҡыр киске аштан баш тартыу тик файҙаға ғына, ти был ҡағиҙә. Ризыҡҡа ҡарата сабырлыҡ - кеше холҡоноң көҙгөһө ул. Тик шуның иҫәбенә башҡа ваҡыттарҙа саманан тыш күп ашау ҙа ярамай. Бер үк ваҡытта туҡланыу калорияһын һәм ит ашауҙы сикләү мотлаҡ.

Артабанғы пункттар оҙон ғүмерлелек мәсьәләләре буйынса йылдар буйы шөғөлләнеүсе табиптар - гериатрҙар күрһәтмәһенә, халыҡ тәжрибәһенән һәм күҙәтеүҙәренән бер ҙә айырылмай: мөмкин тиклем күберәк хәрәкәтләнергә, күңелгә яҡкан шөғөл менән булырға, мәсәлән, ейән-ейәнсәрҙәр менән аралашыу; намаҙға баҫыу, шахмат-шашка уйнау, һүрәт төшөрөү, тегеү-сигеү менән булыу; бейеү йә хор түңәрәгенә йөрөү, баҡса үҫтереү, сәйәхәткә сығыуҙар һ.б. Иң мөһиме - яңғыҙлыҡтан ҡасырға тырышыу. Бының өсөн иһә туғандарҙың, яҡын дуҫтың барып хәлен белеү, театрға, концерттарға йөрөү, бик булмаһа, тәҙрә төбөндә сәскәләр үҫтереү, башҡа төр үҫентеләр (лимон, мандарин, салат, укроп, петрушка, йәшел һуған һ.б.) ултыртыу һәм уларҙы тәрбиәләү кеүек шөғөлдәр донъяға булған ҡыҙыҡһыныуҙы арттыра, күңелде күтәрә, баш мейеһе нейрондарын әүҙемләштерә.

Былар, әлбиттә, оло йәштәгеләрҙә үҙ көндәрен үҙҙәренә күрергә өйрәтһә, бөгөн өлкәндәргә ҡайһы бер тормош мәсьәләләрен хәл итеүҙә дәүләт хәстәрлеге лә күп мөмкинлектәр бирә. ***Мәсәлән, 2020 йылдан алып республикала БР Башлығы Радий Хәбиров башланғысы буйынса "Башҡорт оҙон ғүмерлелеге" проектының бойомға ашырыла башлауын бик күп өлкән йәштәгеләр ысын мәғәнәһендә бүләк рәүешендә һөйөнөп ҡабул итте.*** Айырыуса туризм һәм экскурсиялар программаһы популярлашты, был саранан бигерәк тә йәшерәк һәм дәртләрәк пенсионерҙар үҙ итте. "Туризм" проектын бойомға ашыра башлағандан алып был программа сараларында 56 мең пенсионер актив ял туризмы менән ләззәтләнде. Улар үҙебеҙҙең Башҡортостандағы иҫтәлекле объекттарҙы һәм тәбиғәт һәйкәлдәрен, тарихи урындарҙы, боронғо ҡалаларҙы, турбазаларҙы барып күрҙе, донъяға ҡараштарын киңәйтте һәм кесе ватаныбыҙ гүзәллектәрен, тәбиғәтен үҙ күҙҙәре менән бағып баһалай, һоҡлана алды.

Ләкин шулай ҙа, әйтеүемсә, туризм һәм экскурсиялар нигеҙҙә һау-сәләмәттәр өсөн яҡшы. Ҡыҙғанысҡа, һаулыҡ торошо һәм йәше буйынса унда ҡатнаша алмағандар ҙа бик күп бит, уларға нимә тәҡдим итә "Башҡорт оҙон ғүмерлелеге" республика проекты? Радий Хәбиров был хаҡта: "...проект ике маҡсат ҡуя: кеше ғүмерен оҙайтыуға булышлыҡ итеү һәм икенсеһе: өлкәндәрҙең тормош сифатын яҡшыртыу". Эйе, туризм менән генә сикләнмәй республика программаһы. Әле телгә алып кителгән икенсе категория өлкәндәр - һаулыҡ торошо һәм йәше буйынса әүҙемлектәре сикләнгәндәр - спорт һәм һауыҡтырыу физкультураһына йәлеп ителеп, үҙҙәре өсөн ҙур файҙа ала. Һәм, ысынлап та, һуңғы йылдарҙа парктарҙа һәм сәләмәтлек һуҡмаҡтарында скандинав таяҡтары менән йөрөүселәрҙең бермә-бер артыуы күҙгә ташлана. Был улар өсөн иң ҡулай сараларҙың береһе. Өҫтәүенә, өлкәндәр йәйәү йөрөүселәр төркөмөндә үҙ-ара дуҫлаша, ихлас аралаша ала.

Бынан тыш, пенсионерҙар табипҡа "сәйәхәттә" лә онотоп китә алмай, әлбиттә. Былтыр ғына ла республикала 799 мең пенсионер дауалау учреждениеларында иҫкәртеү медицинаһы ҡаралыуы үтһә, һәр төрлө сир билдәләре асыҡланған 773 меңдән ашыу кеше диспансер күҙәтеүенә алынды, тип хәбәр итә "Башинформ" агентлығына БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш гериатры, Республика һуғыш ветерандары клиник госпиталенең баш табиб урынбаҫары Әлфиә Абзалетдинова. Әлеге ваҡытта Башҡортостан поликлиникаларында 47 гериатрика кабинеты эшләй, стационарҙа ятып дауаланыусылар өсөн 205 геронтологик карауат бүленгән. Республиканың үҙәктән алыҫ ятҡан райондарына "Сәләмәтлек поездары" йөрөп тора. Бер йыл эсендә был программа буйынса 170 мең кеше табиптә ҡарала алды, уларға 41 мең медицина тикшереүҙәре үткәрелде. Шуның менән бергә Башҡортостан табиптары өлкән йәш-тәгеләр өсөн сәләмәт йәшәү рәүеше, оҙон ғүмерлелек саралары, йығылыуҙар һәм һөйәк һыныуҙарҙы иҫкәртеүсе уҡыуҙар алып бара, лекциялар уҡый. Ҡала һәм райондарҙа спорт һәм һауыҡтырыу төркөмдәре ойоштороу ҙа үҙ һөҙөмтәһен бирә: 60-тан өлкәнерәк йәштәгеләр был төркөмдәргә йөрөп, ГТО комплексы нормаларын тапшыра.

Эйе, оҙаҡ йәшәүҙә генә түгел эш, ә оҙаҡ йәшәп тә сәләмәт һәм теремек булыу, үҙ аяҡтарыңда йөрөү, камил аҡыл, зирәк зиһенеңдә һаҡлау, донъя матурлығын үҙ күҙҙәрең менән күрә алыу шатлығында ул оҙайлы ғүмерҙең асылы; шул саҡта ғына оло кеше башҡалар көнлө булмайынса, үҙ-үҙен хеҙмәтләндерә һәм хатта яҡындарына ниндәйҙер файҙа ла килтерә ала. Уларға был мәсьәләлә ярҙам ҡулы һуҙып, хәстәрлек күреүсе "Башҡорт оҙон ғүмерлелеге" проектына рәхмәтле пенсионерҙар.

БР ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова хәбәр итеүенсә, әле эшләп килгән оҙон ғүмерлелек проектының яңы сараларын булдырыу ҙа ҡарала. Шуларҙың иң мөһиме - өлкәндәр менән финанс грамоталылығы дәрестәре үткәреү - бөгөнгө көндә көнүҙәк һәм бик кәрәкле, файҙалы йүнәлеш. Өлкәндәр хаҡында хәстәрлек күреп, был маҡсаттарҙа реаль гәмәлдәр башҡарыусы дәүләт проекты булдырып, республика етәкселеге изгелекле һәм файҙалы йүнәлеш тота: өлкән йәштәгеләргә күп йәһәттән үҙҙәрен кәрәкле тойоу, хәстәрлеккә рәхмәтле булыу ҙа был донъяла оҙағыраҡ ҡалыу теләге тыуҙыра, күңелен күтәрә, илһам бирә. Донъя тарлығы юҡ, күпһенмәйек, өлкәндәребеҙгә ҡарата хәстәрлекле, кешелекле булайыҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ТРАМПТЫҢ "САУҘА ҺУҒЫШЫ"

**6 апрелгә ҡарай төндә Киев режимы ҡарамағындағы территорияларҙа бер нисә тапҡыр һауа һөжүме хаҡында иғлан ителгән, Киевтың ҡайһы бер райондарында көслө янғындар сыҡҡан. Дошман тылына һөжүмгә РФ Хәрби-диңгеҙ флоты ла йәлеп ителгән: кораблдәр "Калибр" ҡанатлы ракеталар осорған; Ту-95МС алыҫ авиация көстәрененң стратегик ракеталар йөрөтөүсе туғыҙ самолеты һауаға күтәрелгән.**

Рәсәй ғәскәре тарафынан дошман тылына ракета һөжүме ҡулланыуҙың етди сәбәптәре бар: Киев режимы, энергетика объекттарына һөжүмдә 30 көнгә туҡтатып тороу хаҡында ике яҡлы килешеүҙе күрәләтә боҙоп, беҙҙең энергетика объекттарына һәм граждандар инфраструктураһына туҡтауһыҙ һөжүм итә, тыныс ҡалалар өҫтөнә шартлаҡтыҡтар яуҙыра. Былай ғына ла түгел, пилотһыҙ шартлаҡтыҡс аппараттар һәм артиллерия уты ҡулланыуҙы арттырғандан-арттыра бара. 4 һәм 5 апрелдә генә лә Украина ҡораллы көстәре Брянск, Белгород, Смоленск, Липецк, Воронеж, Херсон өлкәләрендәге энергетика объекттарына төбәп, 14 тапҡыр һөжүм итте. Рәсәй һауа һөжүменә ҡаршы оборона көстәре Украина яғынан осоролған 107 дошман шартлаҡтыҡс аппаратын юҡ итеүгә өлгәште.

Был осорҙа иһә АҠШ тарафынан индерелгән яңы пошлиналар донъя илдәре даирәһендә шау-шыу, хәүеф һәм ризаһыҙлыҡтар килтереп тыуҙырҙы. АҠШ президенты Дональд Трамптың ҡайһы бер илдәргә ҡарата иғлан ителгән "сауҙа һуғышы" дөйөм үҫеш һәм инвестициялар өлкәһендә прогресҡа аяҡ сала, тип белдерҙе Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының сауҙа һәм үҫеш буйынса Конференцияһы. ***Мәғлүм булыуынса, 2 апрелдә Дональд Трамп сит илдәрҙән индерелгән импортҡа үҙ-ара пошлиналар билдәләү хаҡында иғлан иткәйне. Юғары пошлиналар һалыныусы илдәр исемлеге лә пәйҙә булды: Камбоджа тауарҙарына ҡарата 49 процент, Вьетнамға - 46, Таиландҡа - 36, Ҡытайға - 34, Тайваньға - 32 , Евросоюзға 20 процент пошлина ҡулланыласаҡ.*** Ҡытай властары тәүҙә ошо сәбәпле АҠШ менән сауҙа мәсьәләләрен көйләүҙә үҙ-ара һөйләшеп аңлашырға теләк белдергәйне, ләкин ҠХР Дәүләт советының тарифтар буйынса комиссияһы 10 апрелдән АҠШ-тан килтерелгән тауарҙарға ҡара-ҡаршы рәүештә шулай уҡ 34 процент пошлина һалыныасағы хаҡында белдерҙе һәм Америкаға сығарылыусы һирәк осраусы металдар ҡулланып етештерелгән тауарҙарға махсус контроль булдырырға ҡарар итте. Ҡытай властарының был аҙымын Трамп, дөрөҫ булмаған уйын һәм паника, тип атаны. Трамп сәйәсәте арҡаһында килеп тыуған яңы донъяуи тәртип айҡанлы Европарламент та үҙ фекерен белдермәй ҡалманы. Европа халыҡ партияһы башлығы Манфред Вебер әйтеүенсә, АҠШ юғары импорт пошлиналары хаҡында белдергән көн - ул "ҡара көн"гә әйләнде, был хата аҙым, тине депутат һәм Евросоюзды Трампҡа ҡаршы башҡа илдәр менән сауҙа килешеүҙәре төҙөп, инициативаны ҡулға алырға саҡырҙы.

Әйткәндәй, Трамптың үҙен самаһыҙ иркен тотоп, бығаса күрелмәгән тәртиптәр булдырырға ынтылыуы һәм, ғөмүмән, уның эске һәм тышҡы сәйәсәте АҠШ-тың үҙендә лә ҙур ризаһыҙлыҡтар тыуҙыра. АҠШ Конгресының Демократтар партияһы алдағы 30 көн эсендә Трампҡа импичмент иғлан итергә йыйына, ләкин Рәсәй сенаторы Алексей Пушков әйтеүенсә, был ниәт барып сыҡмаясаҡ, сөнки импичмент белдереү өсөн Трампҡа тағырлыҡ ғәйеп юҡ. INTERFAX.RU хәбәренә ҡарағанда, АҠШ-тың 50 штатында ла һәм Европа илдәрендә Дональд Трамп сәйәсәтенә, шулай уҡ хөкүмәт һөҙөмтәлелеге департаменты етәксеһе Илон Маскҡа ҡаршы протест акциялары булып, унда миллиондарса кеше ҡатнашыуы хаҡында хәбәр ителә. Ризаһыҙлыҡ белдереүселәр араһында Республикасылар партияһы вәкилдәренең дә булыуы уғата һағайта. Хатта ки Трамптың уң ҡулы булған Илон Маск та президент сәйәсәтенә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереп, Евросоюз менән ирекле сауҙа зонаһы булдырыу фекерен яҡлауы хаҡында әйтте. Ә Дональд Трамп журналистарға иғлан иткән пошлиналарҙан баш тартырға уйламай, киреһенсә, ул тап ошо мәсьәлә буйынса Европа һәм Азия илдәре лидерҙары менән осрашып һөйләшеүе һәм партнерҙарының әлеге пошлиналар нигеҙендә сауҙа килешеүе төҙөргә риза булыуҙары хаҡында һөйләнә. Ә бына АҠШ-тың үҙендәге Эшҡыуарлыҡ институты белдереүенсә, Трамптың пошлина формулаһында математик хата бар һәм ул пошлиналарҙы дүрт тапҡырға күтәреүҙә күренә, һөҙөмтәлә башҡа дәүләттәр тарафынан да ҡара-ҡаршы тарифтар юғары килеп сыға. Ҡыҫҡаһы, институт экспертары белдереүенсә, Трамптың пошлина сәйәсәтендә иҡтисади мәғәнә юҡ. Өҫтәүенә, юғары пошлиналар иғлан иткәндән һуң шул уҡ көндә доллар арзанайҙы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөнөң сауҙа-иҡтисад колледжы студенты "Башҡортостан" 31-се мотоуҡсылар полкы составында хәрби бурысын үтәү өсөн Махсус хәрби операция биләмәһенә юлланған. Был хаҡта Өфөнөң Киров районы хакимиәте хәбәр итә. "Молодой" позывнойлы яугир хәҙер М.Нагаев исемендәге батальон сафтарында өлкән тоҫкаусы булып хеҙмәт итә. Махсус хәрби операция биләмәһендә күрһәткән ҡыйыулығы һәм ҡаһарманлығы өсөн II дәрәжә "Хәрби батырлыҡ өсөн" һәм "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыға" миҙалдары менән бүләкләнгән.

✓Өфө халҡына автомобилде газонда, тротуарҙа һәм башҡа тәғәйенләнмәгән урында ҡалдырған өсөн административ яуаплылыҡ янай. Баш ҡала мэрияһында белдереүҙәренсә, бындай водителдәргә Башҡортостандың административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексының 6.21-се статьяһына ярашлы яза көтә. "Төҙөкләндереү ҡағиҙәләрен үтәүҙе контролдә тотоу өсөн һәр районда көн һайын административ комиссия вәкилдәре эшләй. Парковка ҡала киңлектәрен йәмһеҙләп кенә ҡалмай, юлдарҙа бысраҡтың таралыуына ла булышлыҡ итә", - тип билдәләнеләр ҡала хакимиәтендә.

✓Яҡташыбыҙ лотереяла 15 миллион һумдан ашыу аҡса откан. "Столото" мәғлүмәттәре буйынса, 11 мартта Мәскәү ваҡыты буйынса киске сәғәт 6-сы яртыла "Спортлото "6 из 45" лотереяһының 13976-сы тиражы барышында суперприз - 15 271 876 һум аҡса уйнатылған. Был юлы яҡташыбыҙға уңыш йылмайған. Ул отҡан аҡсаһын алыу өсөн лотерея үҙәгенә мөрәжәғәт итмәгән әле. Бәлки, ул был хаҡта белмәйҙер. Әлеге ваҡытта уның мобиль ҡушымтала 60 һумға бер билет һатып алыуы тураһында ғына билдәле.

✓Үткән аҙнала Өфөлә 60 меңләп кеше урамдарҙы, ихаталарҙы таҙартырға өмәгә сыҡты. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оперативкала айырыуса әүҙем булған Орджоникидзе, Ленин, Совет райондары билдәләнде һәм уларға аҡсалата призлар тапшырылды. Иң әүҙем 1 меңдән ашыу граждан шулай уҡ призҙарға лайыҡ булды. Үткән аҙнала хакимиәт адресына ебәрелгән 973 хәбәр-ялыуҙарға ла анализ яһалды. Халыҡтың иң күп дәүәһе төҙөкләндереү, юлдар һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ мәсьәләре буйынса булыуы билдәләнде.

✓Башҡортостандың йәш спортсылары спорт акробатикаһы буйынса Рәсәй беренселегендә иң яҡшылары тип танылды. Орел ҡалаһында үткән турнирҙа илдең 34 төбәгенән 11-16 йәшлек 300-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты. Октябрьский ҡалаһы хакимиәте башлығы Алексей Пальчинский хәбәр итеүенсә, Дина Низаева менән Тихон Брезгин ҡатнаш дисциплинала пьедесталдың юғары баҫҡысына күтәрелде. Төркөмдәр программаһында Маргарита Садовникова, Камилла Кириллова, Анастасия Иванова икенсе булды. Билдәләнеүенсә, Октябрьский ҡалаһы Башҡортостанда спорт акробатикаһы буйынса төп үҙәктәрҙең береһе булып тора.

ҠЫҪҠАСА

# АҒАС УЛТЫРТЫРҒА!

**19 апрелдән 10 майға тиклем (берҙәм көн - 26 апрель) "Йәшел Башҡортостан" акцияһы барышында республикала 135 яңы аллея ултыртыу планлаштырыла.** Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова белдерҙе. Сара Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына арнала. Ошо уңайҙан республикала тематик аллеялар барлыҡҡа киләә. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡтың Октябрь проспектында - 80 төп ҡайын, Салауатта - 80 төп йүкә, ә Октябрьскийҙың Еңеү паркында 80 төп шыршы ултыртыла. Нефтекамала "Киләсәк аллеяһы"н булдырыу планлаштырыла, унда 100 төп пирамидаль тирәк үҫентеһе ултыртыла. Өфөлә 3 мең эре ағас һәм 1700 ҡыуаҡ ултыртыу, 3 тематик аллея булдырыу күҙаллана. Быйыл яҙ бөтәһе 7700 төп эре һәм 67 мең төп башҡа үҫенте ултыртыу планлаштырыла. Акцияла 45 меңдән ашыу кеше ҡатнашыр тип көтөлә, уларҙың 5 меңе - ирекмәндәр.

✔ **Өфө хакимиәтендә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына арналған сараларҙы әҙерләү һәм үткәреү буйынса ойоштороу комитеты ултырышы үтте. Унда байрам алды сараларына баҫым яһалды.** Күмәк сараларҙың береһе апрель аҙағында "Яҙ көйҙәре" ҡала фонтандарын асыу фестивале барышында ойошторола. "Еңеү вальсы" илһөйәрлек акцияһында һәр кем һуғыш йылдары тарихына сумыра мөмкин. Баш ҡала концерттар, күргәҙмәләр, конкурстар һәм акциялар, шулай уҡ хәтер сәғәттәре, патриотик музыкаль конкурстар һәм башҡа саралар үткәрелә. Еңеү Көнөндә өфөләрҙе һәм баш ҡала ҡунаҡтарын сағыу һәм бай программа көтә: күсмә МХО тарихы музейы, концерт, хәрбиҙәр һәм техника парады.

✔ **Башҡортостанда "Торлаҡ төҙөлөшө өсөн аҡса туплау" программаһын ҡулланыу мөмкинлеге киңәйҙе - хәҙер аҡсаны торлаҡты реконструкциялауға ла йүнәлтергә мөмкин.** Республика Хөкүмәте ошондай ҡарар сығарҙы. Республика программаһы фатир, йорт, төҙөлөш өсөн ер участкаһы һатып алыуҙы, ипотеканы ҡаплауҙы күҙ уңында тота ине. Башҡортостанда был программа 2014 йылдан тормошҡа ашырыла. Федераль закон проектынан айырмалы рәүештә, Башҡортостан программаһында дәүләттән премиялар ҡаралған: ҡатнашыусының айлыҡ взносына республика бюджетынан 30 процент күләмендә премия өҫтәлә (әммә айына 5 меңдән артмаҫҡа тейеш).

✔ **Былтыр йәйгеһен Башҡортостан шифаханаларында 66 меңгә яҡын кеше һаулығын нығытҡан.** Миҙгел Рәсәй шифаханалары өсөн һөҙөмтәле булды. Юлламаларға һорау рекордлы кимәлгә етте. Ҡунаҡтар һаны һәм шифаханаларҙың тулайым килеме буйынса күрһәткестәр ҙә юғары. Әлеге ваҡытта Башҡортостан Рәсәйҙең тәүге 10 төбәге иҫәбендә тора һәм шифахана-курорт ялын популярлаштырыу буйынса Волга буйы федераль округында беренсе урынды биләй. 2024 йылдың июнь-август айҙарында Башҡортостан шифаханаларында 65,7 мең кеше ял иткән. Республикала шифаханаға юлламаның уртаса хаҡы 37,6 мең һум булған. Йәй көнө Башҡортостан шифаханаларының тулайым килеме 2,477 миллиард һумға еткән. Былтыр йәй Волга буйы федераль округы шифаханаларында иһә 385,7 мең кеше һаулығын нығытҡан. Дөйөм алғанда, йәй көнө Рәсәйҙә 2,2 миллион кеше шифаханала ял итеүҙе һайлаған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХЕҘМӘТТӘШЛЕК ҺӨҘӨМТӘ БИРӘ



**Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Рәсәйҙең хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры урынбаҫары Магомед Абдулхәлимов менән осрашты. Улар төбәктә социаль учреждениелар системаһын үҫтереү һәм берлектәге проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу мәсьәләләрен тикшерҙе.**

Башҡортостан илдең Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы менән хеҙмәттәшлек алып бара һәм өлкән йәштәге граждандарға, инвалидтарға, шулай уҡ балалы ғаиләләргә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән бер нисә башланғысты тормошҡа ашыра, тип билдәләне Радий Хәбиров. "Беҙҙә дәүләткә ҡарамаған сектор уңышлы үҫешә. Республикала реабилитацияға һәм реабилитациялауҙың техник сараларына сертификаттар системаһы индерелде, - тине республика етәксеһе. - Элекке "Талҡаҫ" шифаханаһында реабилитация үҙәген булдырыу проектын тәкдим итергә теләйбеҙ. Был үҙәк шул иҫәптән МХО ветерандары өсөн дә бик кәрәкле булыр тип ышанам".

Магомед Абдулхәлимов республиканың федераль министрлыҡ менән юғары кимәлдә хеҙмәттәшлек итеүен раҫланы һәм төбәктең перспективалы башланғыстарына ярҙам күрһәтергә әҙер булыуын белдерҙе. "Башҡортостан "Ғаилә" милли проектының "Өлкән быуын" федераль проектында әүҙем ҡатнаша. Бер нисә мөһим объект, шул иҫәптән "Именлек" социаль үҙәге булдырылды, - тип билдәләне ул. - Бөгөн мин дәүләт-шәхси партнерлыҡтың уңышлы өлгөһө - Кушнаренко районындағы "Ата-әсә йорто" проекты менән таныштым. Яңы, шул иҫәптән "Талҡаҫ" шифаханаһында МХО-ла ҡатнашыусылар өсөн реабилитация үҙәген булдырыу башланғыстарына килгәндә, уларҙы инвестиция комиссияһында ҡарарбыҙ. Әгәр был проект норматив талаптарға тап килһә, ярҙам итербеҙ".

# АҘАУҘАРҒА ЯРҘАМ КӘРӘК!

**Архангел районы башлығы Айрат Сәйетғәлин Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ташҡындан зыян күргән Аҙау ауылы халҡының ниндәй түләүҙәр алыуы тураһында һөйләне.**

"Үткән аҙнала аҡса алдыҡ, тарата башланыҡ. Һәләк булған малдарҙың хужаларына - 29 кешегә тулыһынса түләнек. Ғаризалар буйынса тәү сираттағы ихтыяждар өсөн 5-әр мең һум таратыла, бөгөнгә 745 мең һумлыҡ түләүҙәр башҡарылды. 7 апрелдә иртән 9 йорт хужалығына юҡҡа сыҡҡан мөлкәт өсөн аҡса ебәрҙек. Был эште ошо арала тамамлайбыҙ", - тип хәбәр итте Айрат Сәйетғәлин.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был эш тамамланғас, уға хәбәр итергә ҡушты. "Иң мөһиме, беҙ һеҙгә аҡса ебәрҙек. Әгәр күберәк кәрәк булһа, бүлербеҙ. Иң мөһиме, зыян күргән кешеләрҙең йорт-ҡуралары ғәҙел рәүештә тергеҙелергә тейеш", - тине Радий Хәбиров. Башҡортостандың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм Транспорт министрлығы ла ауылды тәртипкә килтереү эштәрен алып бара. Эштәр тамамланғас, Башҡортостан Башлығы ауылды тергеҙеүгә хеҙмәттәрҙең нисек ярҙам итеүен шәхсән тикшерергә йыйына.

# УҢАЙЛЫ МӨХИТТӘ ЙӘШӘЙБЕҘ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың барлыҡ ҡалаларының Рәсәйҙең Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы әҙерләгән ҡала мөхите сифаты индексы рейтингына инеүенә үҙ фекерен белдерҙе.**

Был индексты белгестәр илдең 1116 ҡалаһы өсөн 36 параметрға нигеҙләнеп иҫәпләп сығарған (төҙөкләндереү, хәүефһеҙлек, йәмәғәт транспорты, юлдар, уңайлы мөхит һәм башҡалар). "Бөтә ҡалаларыбыҙ ҙа рейтингҡа инде. Уларҙың барыһы ла йәшәү өсөн уңайлы тип танылды", - тип билдәләне республика етәксеһе Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә.

Билдәләнеүенсә, әгәр 2018 йылда Башҡортостанда ошондай алты ғына ҡала булһа, 2023 йыл йомғаҡтары буйынса - 17, хәҙер был рейтингҡа тәүге тапҡыр 21 ҡала инде.

Бөтә Рәсәй рейтингы йомғаҡтары тураһында һөйләгәндә республика етәксеһе баш ҡаланың яҡшы күрһәткестәрен билдәләп үтте. Миллионлы ҡалалар араһында Өфө бишенсе урынды алды. "Алда Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡаҙан һәм Пермь. Беҙ - бишенсе. Әйткәндәй, Пермь менән Өфө араһында айырма - бер генә балл. Өфөнөң идара итеү командаһы менән берлектә башҡарған эш ошондай һөҙөмтәләр бирә. Бик яҡшы, барыһын да ҡотлайым", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров.

# ТЕЛ БЕЛГӘН - ИЛ ГИҘГӘН

**Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин үҙенең телеграм-каналында мигрант балалары өсөн имтихандарға ҡағылышлы законға үҙгәрештәр хаҡында аңлатма бирҙе.**

Уның әйтеүенсә, был тема күптәрҙе борсой. Хәҙер был балаларҙы мәктәпкә ҡабул итеү өсөн рус теле буйынса тестарҙа дөрөҫ яуаптар 90 процент тәшкил итергә тейеш. Рус теленән, шул уҡ ваҡытта телдән бирелгән һорауҙарҙы ла ҡушып, баһалама материалдар уҡыу барышының һәр баҫҡысы өсөн айырым эшләнгән. Спикер билдәләүенсә, былтыр граждандарҙың мөрәжәғәттәренә нигеҙләнеп, Дәүләт Думаһы депутаттары миграция сәйәсәтен камиллаштырыуға йүнәлтелгән 14 закон эшләне һәм ҡабул итте. Шуларҙың һуңғыһы - мигрант балаларын мәктәпкә ҡабу итеү шарттарын билдәләгәне көсөнә инде.

РФ Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса 2025 йылдың 1 ғинуарына Рәсәйҙә бөтәһе 783 593 балиғ булмаған мигрант иҫәпләнә. Әгәр ҙә элегерәк Рособрнадзор мигрант балаларына рус теленән тестарҙы уңышлы тапшырыу өсөн дөрөҫ яуаптарҙың 30 проценты ла етә, тип тәкдим иткән булһа, был ҡабул ителмәне һәм шарттар ҡайтанан эшләнде. Бынан һуң мәктәпкә уҡырға инеү өсөн: 1-се класта - 10 һорауҙың 9-ына; 2-5 кластарҙа - 20 һорауҙың 18-енә; 6-9 кластарҙа - 22 һорауҙың 20-һенә; 10-11кластарҙа 24 һорауҙың 22-һенә дөрөҫ яуап бирелергә тейеш. В.Володин әйтеүенсә, был мәсьәлә контролдән алынмай әле, уны хоҡуҡи ҡулланыу нормалары өйрәнеләсәк, шул уҡ ваҡытта тест биремдәре йәкмәткеһе, уның сифаты һәм һөҙөмтәлелеге буйынса төбәктәр, педагогик берекмәләр фекерҙәре лә иҫәпкә алынасаҡ.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостандың Милли банкында 19 апрелгә тиклем тимер тәңкәләрҙе ҡағыҙ аҡсаға алмаштырырға йәки банк иҫәбенә күсерергә мөмкин булған урындарҙы атанылар. Түбәндәге банктарҙа: Һаҡлыҡ банкы, Россия, Форштадт, Энергобанк, Альфа-банк, Райффайзенбанк, Россельхозбанк, ВТБ, Банк ПТБ, Газпромбанк, Ак Барс, Акибанк, Авангард, Промсвязьбанк. Магнит, Монетка, Лента магазиндары. Хатта ҡарайған, йәнселгән, тишелгән аҡсалар ҙа ҡабул ителә. Иң мөһиме, улар 1997 йылдан башлап сығарылған аҡса булырға тейеш.

✔2025 йылдың 1 апреленән Башҡортостандың ҡайһы бер ҡалаларында "Ғаилә ипотекаһы" программаһы буйынса күп фатирлы йорттарҙа икенсел торлаҡ һатып алырға мөмкин, тип хәбәр итә Башҡортостандың төҙөлөш министрлығы. ДОМ.РФ сайтындағы программаға индерелгән тораҡ пункттар исемлегендә республикабыҙҙың 14 ҡалаһы бар. Улар - Баймаҡ, Белорет, Бөрө, Благовещен, Дәүләкән, Ишембай, Мәләүез, Туймазы, Яңауыл, Ағиҙел, Межгорье, Күмертау, Салауат һәм Сибай. Илдең 901 ҡалаһында тамламалы шарттарҙа әҙер йортта фатир һатып алырға була.

✔Благовещен янында ер убылған. Соҡор Абыҙ ауылы яғына илткән юлдың уң яғында, Өфө-Бөрө-Яңауыл автомобиль юлынан 650 метр алыҫлыҡта урынлашҡан. Был хаҡта Благовещен районы хакимиәте башлығы Анна Карабанова үҙенең телеграм-каналында хәбәр итә. Уның һүҙҙәренсә, соҡор урынын муниципалитет хеҙмәткәрҙәре тикшерә. Тәүлек эсендә ул нығыраҡ ҙурайған. Ер аҫтында ер аҫты һыуҙары хәрәкәте күҙәтелә һәм тағы тупраҡ ишелеү хәүефе бар.

✔Башҡортостанда торлаҡты тәүлек әйләнәһенә ҡуртымға алыу өсөн иң ҡиммәт хаҡ теркәлгән. Фатирҙың уртаса ҡуртым хаҡы - 2,5 мең һум. Ә ҡаланан ситтәге йорт тәүлегенә 8,2 мең һум тора. Уҙған йылдың февраленән тәүлек әйләнәһенә ҡуртымға тапшырылған торлаҡҡа һорау - 66 процент, ә тәкдим 33 процентҡа артҡан. Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта уртаса хаҡ 4,8 мең һәм 3,2 мең һум тәшкил иткән. Краснодар крайында - 3,2 мең һум. Өфөлә фатирҙарҙы оҙайлы ваҡытҡа ҡуртымға биреү тәкдимдәре 37 процентҡа кәберәк.

✔Стәрлетамаҡтан йәш гимнаст Полина Дмитриева Рәсәй беренселегендә 4 алтын миҙал яуланы. Был хаҡта республиканың Спорт министрлығынан хәбәр иттеләр. Полина күпбәйгелә дүрт алтын миҙал менән Рәсәйҙең абсолют чемпионы исеменә лайыҡ булды. Ярыштарға спортсыны тренер Елена Кайгулова әҙерләгән. Башҡортостан командаһы, Мәскәү командаһынан ғына ҡалышып, икенсе урынды алды. Команда составында Стәрлетамаҡ спортсылары Полина Дмитриева, Дарина Федорова һәм Самира Рәхимғолова, шулай уҡ Өфө ҡыҙы Диана Ускова сығыш яһаны.

ҺОРАУ-ЯУАП

# БУРЫСТЫ КЕМ ТҮЛӘЙ?

**Айһылыуҙың хыялы тормошҡа ашты - фатирлы булды! Рәхәтләнеп йәшәйем инде, тип ҡыуанғанында, уны күңелһеҙ хәбәр көттө: элекке хужалар коммуналь хеҙмәттәр буйынса ҙур бурыс ҡалдырған. Был турала ләм-мим өндәшмәнеләр, Айһылыу үҙе лә был хаҡта бөтөнләй уйламаған. Ошондай хәлдәр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йыш осрай. Кем бурыстарҙы түләргә тейеш?**

*РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров һорауҙарға яуап бирә.*

- Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү үҙ эсенә һыуыҡ һәм эҫе һыу, электр энергияһы, йортто йылытыу, газ, ағынты һыуҙарҙы сығарыу, ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү хеҙмәтен ала (РФ Торлаҡ коммуналь кодексының 154-се статьяһының 4-се өлөшө). Ошо хеҙмәттәр өсөн кеше фатир хужаһы булған көндән түләргә тейеш (РФ Торлаҡ кодексының 153-сө статьяһының 5-се өлөшө). Был хаҡта РФ Юғары Судының, яңы торлаҡ хужаһы шәхси килешеүҙәр нигеҙендә күрһәтелгән хеҙмәттәр өсөн элекке милексенең бурысын түләргә тейеш түгел, тигән аңлатмаһы ла бар (№ 309-ЭС19-10804). Шулай итеп, Айһылыу элекке фатир хужаһы ҡалдырған бурыстар өсөн яуап бирмәй. Әммә капиталь ремонт өсөн иғанә индереү был ҡағиҙәгә инмәй. РФ Торлаҡ кодексының 158-се статьяһы һәм Юғары суд ҡарарҙары буйынса, капиталь ремонт өсөн бурыстар фатирҙың яңы хужаһына күсә. Уны элекке фатир хужаһынан суд аша ғына түләттереп була. Ошондай хәлдәргә тарымаҫ өсөн торлаҡ һатып алыр алдынан документтарҙы, бурыстар юҡлығын ентекләп тикшерергә кәрәк.

# ҺАҠЛАНЫУ САРАҺЫ

**Йылайыр районы Ҡашҡар ауылынан Эльвира: "Кредит алыуға сикләү ҡуйып була торған яңы закон бар, тиҙәр. Шул хаҡта һөйләгеҙ әле", - тип мөрәжәғәт итә депутатҡа.**

- 1 марттан үҙ көсөнә ингән законға ярашлы, Рәсәйҙең һәр граждананы кредит биреүҙе тыйыу механизмы ярҙамында көтөлмәгән бурыстарҙан үҙен яҡлай ала. Был мутлашыуҙан һәм төплө уйламай кредит алыуҙан ҡотолорға ярҙам итәсәк. Хеҙмәт буштай күрһәтелә. Унын өсөн Дәүләт хеҙмәттәре порталында йәки Күп функциялы үҙәктә шаблонлы ғариза тултырырға кәрәк. Йыш ҡына минән, үҙ-үҙенде тыйыу ҡуйған кеше киләсәктә кредит ала аласаҡмы, тип һорай. Эйе, мөмкин, ғариза яҙғандан һуң 1-2 көн эсендә хоҡуҡ тергеҙелә. Үҙ-үҙенде тыйыу автокредит, ипотека, дәүләт ярҙамы менән уҡыу өсөн бирелгән кредитҡа ҡағылмай. Барлыҡ ыҙы ла ошо унайлыҡ менән ҡулланырға саҡырам, бигерәк тә оло йәштәгеләр өсөн файҙалы, мутлашыусыларҙан һаҡланыуҙың тағы бер алымы ул.

# ТАШЛАМАЛЫ ИПОТЕКА КЕМГӘ?

**Йәшерен түгел, торлаҡ мәсьәләһе - бөгөнгө йәштәрҙең иң ауыртҡан урыны. Үҙ мөйөштәре булмау сәбәпле, ғаилә ҡороуҙы, бала тыуҙырыуҙы кисектереүселәр байтаҡ. Дәүләт йәштәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү йүнәлешендә төрлө программалар булдыра. Әммә барыһына ла уға "эләгеүе" еңел түгел. Мәҫәлән, 2018 йылда 6 процентлыҡ ставка менән ғаилә ипотекаһы программаһы эшләй башлағайны. Был льгота тик яңы төҙөлгән йорттан фатир алырға мөмкинлек бирә. Ошо льготаны үҙ төбәктәрендә ҡуллана алмағанлыҡтан, ҡайһылар баш ҡалаға күсеп килә, бәләкәй генә булһа ла торлаҡ алырға тырыша. Өфөләге хаҡтарҙың "тешләшеүе" сәбәпле, күптәрҙең иркенерәк фатир алырға матди хәле етмәй. Оло ҡыуаныс, ошо көндәрҙә был ҡағиҙәгә үҙгәреш индерелде. Һүҙ - Зариф Закир улына:**

- Эйе, 2024 йылдың 20 декабрендә Дәүләт Советы ултырышында, Рәсәй Президенты Владимир Путиндың йөкләмәһен үтәү ниәтендә, балалы ғаиләләргә икенсел торлаҡҡа йылына 6 процентлыҡ льготалы ғаилә ипотекаһына мөмкинлек биргән механизм эшләнде. Бынан ары льготалы ипотека яны торлаҡ аҙ төҙөлгән ҡалаларҙа йәшәүселәргә лә биреләсәк. 1 апрелдән үҙ көсөнә инәсәк документҡа Башҡортостандың 14 ҡалаһы ингән: Ағиҙел, Баймаҡ, Белорет, Бөрө, Благовещен, Дәүләкән, Ишембай, Күмертау, Межгорье, Мәләүеҙ, Салауат, Сибай, Туймазы һәм Янауыл. (Был исемлек "Дом.рф" льготалы федераль программалар операторы порталында баҫылған.) Льгота менән алты йәшкә тиклемге балалар, шулай уҡ инвалид бәлиғ булмаған бала тәрбиәләүсе ғаиләләр файҙалана ала. Йорт аварияны хәлдә булмаған, 20 йылдан яңырак булырға тейеш. Бәләкәй ҡалаларҙа был закондың эшләй башлауы йәштәрҙең тыуған яҡтарында төпләнеүенә, иркенерәк йәшәүенә өмөт бирә.

# ВЕТЕРАН СТАТУСЫ

**"Хәрби хәрәкәттәр ветераны статусы кемдәргә бирелә?" - тип һорай Өфөнән И. Ҡоҙаҡаева.**

- Күптәрҙең һорауы буйынса "Ветерандар тураһында" Федераль законға үҙгәрештәр индерелде. Бынан ары хәрби хәрәкәттәр ветераны (яраланған осраҡта - хәрби хәрәкәттәр инвалиды) исеме Рәсәй биләмәһенә ҡоралды баҫып инеүҙе, шулай уҡ Рәсәй дәүләт сигендә һәм субъекттары биләмәһендә ҡоралды провокацияны кире ҡағыу буйынса бурыстарҙы үтәгән хәрби хеҙмәткәрҙәргә бирелә. Хәрби хәрәкәттәр ветераны статусы хәрбиҙәргә, прокурорҙарға, эске эштәр органдары, милли гвардия ғәскәрҙәре һәм РФ Тәфтиш комитеты хеҙмәткәрҙәренә тапшырыла. "Халыҡ менән осрашыуҙар мәлендә был мәсьәләне күптәр күтәрҙе. Ил бөтөнләгән һаҡлаусы хәрбиҙәребеҙҙе хәрби хәрәкәттәр ветерандары тип таныу тураһындағы законға үҙгәрештәр индереүҙе күптәр һораны. Мәҫәлән, С. ауылында Курск өлкәһендә һәләк булған хәрбиҙең әсәһе мөрәжәғәт итте. Улы ике йыл дауамында МХО-ла булған, шунан уны башҡа хәрбиҙәр менән Курск өлкәһенә ебәргәндәр. Дошман утын кире ҡаҡҡан мәлдә, оло үкенескә, уның ғүмере өҙөлгән. "Улыгыҙ хәрби хәрәкәттәр ветераны була алмай, сөнки МХО биләмәһендә һәләк булмаған", - тигәндәр уға. Һөҙөмтәлә был ирҙең ғаиләһенә бер ниндәй ҙә социаль ярҙам эләкмәгән". Әлеге закон ярҙамында Курск һәм башҡа өлкәләрҙә ил алдындағы бурысын үтәүселәр хәрби хәрәкәттәр ветерандары иҫәбенә индереләсәк. Яугирҙәр һәм уларҙың ғаиләләре тейешле саралар менән ҡуллана аласаҡ.

**Гүзәл БИКМӘТОВА әҙерләне.**

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## Миңдеғолов Тәфтизан Таһир улы

Т.Т. Миңдеғолов - Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса һәләк булған яугир, 112-се Башҡорт, һуңынан 16-сы гвардия Чернигов кавалерия дивизияһының миномёт батареяһы расчёты командиры, гвардия сержанты. Советтар Союзы Геройы (1944, үлгәндән һуң).

Тәфтизан Таһир улы Миңдеғолов 1922 йылдың 29 майында Автономиялы Совет Башҡорт Республикаһының Бөрйән-Түңгәүер кантоны Күсей ауылында (Башҡорт АССР-ының Бөрйән-Түңгәүер кантоны, хәҙер - Башҡортостандың Баймаҡ районы) крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Милләте буйынса башҡорт. Тыуған ауылы мәктәбендә ете класс тамамлай, артабан Ворошилов исемендәге колхозда һәм алтын прииксыларында эшләй.

1941 йылда Ҡыҙыл Армия сафтарына саҡырыла. Кесе командирҙар мәктәбендә уҡый, формалашыусы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы составына алына. 1942 йылдың июленән - Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында. Брянск, Сталинград һәм Үҙәк фронттарындағы алыштарҙа ҡатнаша. Төрлө алыштарҙа күрһәткән ҡаһарманлығы 1943 йылдың 28 февралендә Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән билдәләнә.

1943 йылдың 20 сентябрендә 62-се гвардия кавалерия полкының миномет расчеты командиры (Үҙәк фронт, 61-се армия, 7-се гвардия кавалерия корпусы, 16-сы гвардия кавалерия дивизияһы), гвардия сержанты Тәфтизан Миңдеғолов Черныш тораҡ пункты (Украина, Чернигов өлкәһе) тирәһендәге алыштарҙа айырыуса ҡаһарманлыҡ күрһәтә, полкташы Шакиров менән икәүләп 20 немец автоматсыһының 18-ен юҡ итә. Ошо батырлығы өсөн II дәрәжә Ватан һуғышы орденына лайыҡ була.

1943 йылдың 29 сентябрендә Усохи ауылы (Белоруссия, Гомель өлкәһе, Брагин районы) өсөн барған алыштарҙа 62-се гвардия кавалерия полкы подразделениелары дошман уты аҫтында ҡала, шул ваҡытта расчет командиры Тәфтизан Миңдеғолов үҙ ирке менән дошман нөктәләрен юҡ итергә теләк белдерә. Автоматтан атып һәм гранаталар ташлап, ул дошмандың миномет расчетын ҡыйрата. Ошо алышта Т.Т. Миңдеғолов батырҙарса һәләк була. Галки ауылының көньяҡ-көнбайыш осонда Туғандар ҡәберлегендә ерләнә (Белоруссия, Гомель өлкәһе, Брагин районы).

СССР Юғары Советы Президиумының 1944 йылдың 15 ғинуарындағы Указына ярашлы гвардия сержанты Тәфтизан Таһир улы Миңдеғолов Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була һәм "Алтын Йондоҙ" миҙалы һәм Ленин ордены менән (үлгәндән һуң) бүләкләнә.

Т. Т. Миңдеғоловтың исеме алтын хәрефтәр менән 112-се Башҡорт кавалерия (16-сы гвардия Чернигов) дивизияһының 78 Советтар Союзы Геройы исемлеге составында Башҡортостан Республикаһының Милли музейы бинаһында (Өфө ҡалаһы, Совет урамы, 14) мәңгеләштерелгән, шулай уҡ уның исеме 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейы бинаһында (Өфө ҡалаһы, Левитан урамы, 27) таҡташта теркәлгән. Тәфтизан Миңдеғоловтың тыуған ауылы Күсейҙә Герой хөрмәтенә бюст ҡуйылған һәм уның исемен йөрөткән мәктәп бинаһында мемориаль таҡтаташ урынлаштырылған. Шулай уҡ Баймаҡ ҡалаһында урамдарҙың береһенә уның исеме бирелгән.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев төбәктәрҙең баш ҡалалары мэрҙары һәм илдең эре финанс-сәнәғәт үҙәктәренең "Милли рейтинги"нда дүртенсе урынға күтәрелде. "Рейтинг" мәғлүмәт коммуникациялары үҙәгендә билдәләнеүенсә, Ратмир Мәүлиевтың позициялары нығыныуы һәм үҫеүе ҡала хужалығын идара итеүҙе оптималләштереү буйынса системалы эшкә бәйле. Ҡуҙәтеүселәр Өфө мэрының эш стилен системалы тип баһалай.

✓Өфөлә Рәсәйҙең Милли матурлығы Бөтә Рәсәй матурлыҡ, мода һәм креатив фестивале үтте, уның сиктәрендә "Топ-модель Өфө-2025" дефиле буйынса турнир лауреаттары һәм "Пар алма" һайланды. Жюри ҡарары менән "Пар алма" конкурсының гран-прийы Елена һәм Анна Куликоваларға тапшырылды. Елененың ғаиләһендә 10 бала тәрбиәләнә. Куликовтар - бик күп балаларға ата-әсә наҙы бүләк иткән ғаилә. Беренсе һәм икенсе урындарҙы Өфөнән Үмәрбаевтар һәм Сәғәҙиевтар ғаиләләре алды, ә өсөнсө урындарҙы Әбйәлил районынан апалы-һеңлеле Әлибәковалар һәм Кинйәбулатовтар ғаиләһе бүлеште.

✓Өфөлә Николай Гастелло исемендәге скверҙы ремонтлау эштәре башланды. Был хаҡта Калинин районы башлығы Ғәзизйән Әхмәтйәнов хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, скверҙы төҙөкләндереү - "Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе"нең 100 йыллыҡ юбилейына әҙерлектең бер өлөшө. "Әле подряд ойошмаһы белгестәре махсус техника ярҙамында асфальт япмаһын, бордюр таштарын алып ташлау эштәрен башҡара. Былый йәй скверҙа яңы юлдар, брусчатка түшәйәсәр, эскәмйәләр ҡуялар, биләмәне йөшелләндерәләр", - тип яҙа район етәксеһе социаль селтәрҙә.

✓Башҡортостан көрәшселәре билбау көрәше буйынса Рәсәй беренселегендә ике алтын, бер көмөш һәм өс бронза миҙал яулаһы. Ярыштар Дағстанда үтте. Алтын миҙалға Зарина Ғәбиҙуллина һәм Варвара Омелина лайыҡ булды, Диана Котловская - көмөш, Роман Ханжин, Ярослава Порываева һәм Марлен Тюлюкбаев бронза миҙалдар менән бүләкләнде. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 3 атлет май айында Үзбәкстанда донъя беренселегендә ҡатнашыуға саҡырыу алды.

✓Өфөлә 18-20 йәшлек егет-ҡыҙҙар араһында билбау көрәше буйынса Рәсәй беренселеге ярыштары үтте. Баш ҡала хакимиәте хәбәр итеүенсә, турнирға илдең 25 төбәгенән спортсылар килде. Төрлө ауырлыҡ категорияларында алыштар Көрәш һарайында ойошторолдо. Бынан алдараҡ Өфөлә Максим Серафимов иҫтәлегенә грек-рим көрәше буйынса Рәсәй беренселеге уҙҙы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Кешене сама белмәү тойғоһо, нәфсе ҡоло булыуы харап итеүенә бәйле тағы ла әллә күпме миҫалдар килтерергә мөмкин булыр ине. Ә бит һәр бер һуғыштың, кешеләргә бәйле катаклизмдарҙың нигеҙендә нәфселек ята.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡара аҡсарлаҡ, һаҙ аҡсарлағы

**(Черная крачка)**



Ваҡ ҡош, сыйырсыҡтан ҙур түгел. Йәйен түше аҡ, үҙе ҡап-ҡара була. Йәш ҡоштар һорғолтораҡ, түше, муйыны, ҡойроғо - ҡара, түшендә ике яҡлап ҡара таптарыбар. Суҡышы - ҡара, ҡанатының осо - аҡһылт. Тауышы - башҡа һаҙ ҡоштарыныҡы кеүек: "кек-кек-кек".

Рәсәйҙең урта өлөшөндә йәшәй. XIX быуат аҙағында Өфө губернаһында йыш осраған ҡош булған. Үткән быуаттың 60-сы йылдарында һирәкләп булһа ла Урал алды һәм Урал арьяғындағы бөтөн йылға һәм күлдәрҙә күрергә мөмкин ине. Асылыкүл, Ҙур Учалы, Ҡарағайлы, Күлтабан, Талҡаҫ, Бөрсөнсө, Үләнде, Суртанды һ.б. күлдәрҙә уларҙың һаны тиҫтәгә етер булды. 2005 йылда Нуғай ҡасабаһы эргәһендәге уҡыу базаһына яҡын ғына урынлашҡан ташландыҡ карьерҙа ла ҡара аҡсарлаҡты тап иттек. Йәғни, әлеге көндә лә һаҙ аҡсарлағы республикала киң таралған ҡоштарҙың береһе.

Май башында ҡышлау ерҙәрҙән әйләнеп ҡайта. Бер нисә пар берләшеп бер ерҙәрәк оя ҡора. 3 йомортҡа һала, 18-22 көн баҫа. Һыуҙа һәм һыу эргәһендә йәшәгән бөжәктәр менән туҡлана. Көҙгәрәк балыҡ та тота. Июлдең өсөнсө декадаһында йылы яҡтарға юллана.

## Аҡҡанат аҡсарлаҡ

**(Белокрылая крачка)**



Ҡара аҡсарлаҡҡа оҡшаған, улар бер ерҙә йәшәй. Аҡҡанат аҡсарлаҡтың ҡанатының өҫкө яғы, ҡойроғо - аҡ. Тауышы киҫкен, "киррик-киррик", "чиррик" һымаҡ булып ишетелә.

Ҡара аҡсарлаҡ йәшәгән ерҙәрҙә көн итә. XIX быуатта Өфө губернияһының һирәк ҡоштары исемлегенә индерелә. Урал арьяғы күлдәрендә осраһа ла, оя ҡороп йәшәүе асыҡланмаған.

Апрель аҙағында ҡайта, башҡа һаҙ ҡоштары менән бер ерҙә оя ҡора. Гәҙәттә, 3 йомортҡа һала. Бәпкәләр 2-3-сө көндә үк ояны ташлап китә. Хәүеф тыуғанда, улар йәшенә белә, ата ҡош менән инә ҡош йырткыстарға ҡаршы ташланырға ла күп уйламай. 3 аҙналыҡ ҡош оса ала.

Бөжәктәр, ваҡ балыҡ ашай. Бәпкәләргә лә бөжәк ашатып үҫтерә, уларҙы осоп барышлай тота.

Июль аҙағында йылы яҡҡа оса башлай. Август башында инде аҡҡанат аҡсарлаҡтарҙы беҙҙә тап итеү мөмкин булмаған хәл.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

**Бала саҡтан бигерәк тә өләсәйҙәр, ҡартәсәйҙәр беҙгә артыҡ шатланырға, шашынырға, ҡысҡырып көлөргә, самаһыҙ иһаһайларға, бер һүҙ менән әйткәндә, бейбаштаҡланырға, үкереп иларға, үҙәк тартырға, үкһергә, кешегә рәнйергә, ҡарғарға, аҡырырға, екерергә, яуызлыҡ теләргә ярамағанлығы хаҡында ҡат-ҡат иҫкәртә торғайны. Быларҙы үтәүҙе улар беҙҙән талап итте, үтәмәгәндәргә аҡ тешен күрһәтеп барманы. Ошондай һәм ошоға оҡшаш барлыҡ тыйыуҙарҙы дөйөмләштереүсе һүҙ кеүек яңғырай "Артыҡ шатлыҡ һағыш килтерә" әйтеме. Хәйер, тик шатланыуға, ҡайғырыуға йә кешегә яуызлыҡ теләүгә генә ҡайтып ҡалмай был әйтем. Уның хаҡында төрлө юҫыҡта уйланһаң, кешене, милләтте, дәүләтте һәм кешелекте оҙон ғүмерле итерлек, милли идеяға торош асылына ла төшөнәһең.**

# АРТЫҠ ШАТЛЫҠ...

## һағыш килтерә



Мин хеҙмәт иткән хәрби часта Гогодзе фамилиялы (исемен онотҡанмын) сәйер тәбиғәтле грузин егете бар ине. Ҡаҙанлыҡта мейессе булып хеҙмәт итте ул. Мунса ягыусы ла, сантехник та ине үҙе. Бер мәл уға яҡын туғаны вафат булып ҡалыуы тураһында телеграмма килде. Тыуған ере яҡын булғас, ҡайтып, туғанын һуңғы юлға оҙатып килде. Шунан һуң бик оҙаҡ ваҡыт ҡайғырып йөрөнө ул. Ҡырынманы ла, ашханаға ла йөрөмәне. Көндәр һәм төндәр буйына ҡаҙанлығында бер нөктәгә текәлеп ултырыр булып китте. Ял көндәре хәрби частың клуб мөдире һәм хат ташыусы үзбәк егете Иркин Инагамжанов отбойға тиклем клубында күңелле музыка ҡуйып, тирә-яҡҡа яңғырата торғайны. Гогодзе клубҡа барып, мөдире менән талашып, музыканы ла туҡтаттыра ине.

Совет Армияһы һалдатының үҙен сәйер тотоуы күпмелер ваҡыт үткәндән һуң штаб офицерҙарына барып еткәс, штаб начальнигы бер тапҡыр ғына уға ҡырынырға һәм ашханаға йөрөргә бойорҙо ла, ул тыңламағас, старшинанан ҡайышһыҙ шинель кейҙерттереп, гауптвахтаға оҙаттырҙы. Ундағы тәртип ҡаты, өс көндән һуң үҙен ипкә килтереп, ротаға әйләнеп ҡайтты һалдат. Уйсанлығы ҡалды барыбер.

Форсат сыҡҡанда ара-тирә Гогодзенан һәм башҡа грузин милләтле һалдаттарҙан грузиндарҙың траурға бәйле йолалары һораштырғыланым. *Баҡтиһән, уларҙа яҡын туғаны вафат булғандан һуң оҙаҡ ваҡыт ҡайғырыу мәле була икән. Ул саҡта ир-аттар ҡырынмай, ҡатын-ҡыҙҙар ҡара кейем кейеп йөрөй, траур булған йылда зат-нәҫел араһында барлыҡ күңел асыу байрамдары, шул иҫәптән туйҙар кисектерелеп торола. Байрамдар һәм туйҙар туғандар араһында ғына түгел, тотош ауылдарҙа, ҡала ерендә булһа, айырым йорттарҙа ла һуңыраҡ ваҡытҡа билдәләнә. Ҡыҫҡаһы, был милләттә кешенең ҡайғыһына ҡарата айырыуса ихтирамлы мөнәсәбәт күрһәтелә икән.* Улар матәм көндәрендә, ҡайһы берәүҙәр кеүек, һыҡтап та йөрөмәй, шул уҡ ваҡытта йылмаймай ҙа, көлмәй ҙә, бер тигеҙ хәләттә йөрөй. Хәйер, хәҙер был хәл уларҙа нисектер, һәр хәлдә, үткән быуаттың 80-се йылдарында тап шулай ине.

Ә беҙҙәге хәлдәр 80-се йылдарҙа ла, хәҙер ҙә күренекле шағир Рәйес Түләк әйтмешләй:

*Бына, мәйет сыға тигән йорттан*
*Аҡ ебәккә төрөнөп туй сыкты.*
*Ап-аҡ тиеп мин табынған ҡарҙар*
*Ирегәйне, күпме ҡый сыкты,-*

тигән кеүек. ***Хәҙер беҙҙә түйы ла, йыназаһы ла, ҡайғыһы ла, шатлығы ла, солохо ла, һуғышы ла, ағы ла, ҡараһы ла - барыһы ла бергә буталған, ҡайҙа нимә икәнлеген дә айырырлыҡ түгел. Берәүҙәр ҡайғынан һыҡтаған бер мәлдә, янындағы икенселәр туй үткәрә, берәүҙәр теттергән саҡта, уның күршеһе ҡайғы-хәсрәтенән йәненә урын таба алмай һыҡрай.***

Үҙәк телевидениелағы ҡайһы бер шоу программалар аптырата. Уларҙа ҡатнашыусылар тик ғаилә эсендә генә ҡала торған проблемаларын, хатта тәндең билдән түбән өлөшөнә бәйле булған серҙәрен бар донъя алдында асып һалып, интимды урамға сығарып, үҙҙәрен рисуай итәләр, бер-береһенә эт ашағыһыҙ һүҙҙәр әйтеп талашалар. Ата-әсәһе бер туктауһыҙ ирешкән, талашҡан ғаиләләге балалар нисек булып үҫә тип уйлайһығыҙ? Бында ла шундай уҡ хәл: тотош ил халҡының психикаһы ҡаҡшай, талашыу-ирешеү кешеләр, ғаилә ағзалары мөнәсәбәтендә нормаға әүерелә. Был тапшырыуҙар унда күтәрелгән мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн түгел (унда бик актуаль проблемалар ҙа күтәрелгән сүрәттә лә, Дәүләт Думаһы депутаттары ҡатнашыуы шуға ишара), шәхесте, ғаиләне, йәмғиәтте, милләтте, һуңғы сиктә дәүләтте эске яҡтан тарҡатыу маҡсатында ойошторолғанға оҡшаған.

***Беҙ көн һайын тиерлек балаларҙың, үсмерҙәрҙең ҡанһыҙлығына, бәйелһеҙлегенә бәйле сәстәр үрә торорлоҡ ваҡиғаларҙың шаһиты булып торабыҙ. Бындай күренештәрҙең сәбәптәрен таба алмай, барлыҡ ғәйепте балаларҙың һәм үсмерҙәрҙең үҙҙәренә япһарып, бот сабабыҙ. Әгәр ҙә янъял, ирeш, талаш ошондай тапшырыуҙарҙа ҡәҙимгә нормаға әүерелә икән, бәләләрҙең башы ҡайҙа икәнлеге билдәле.*** Баҡтиһән, шоуҙа барған күп кенә ваҡиғалар сценарийға ҡоролоп, дөрөҫ булһа, унда интригаһы сағыуыраҡ ҡорған ҡатнашыусыға гонорар ҙа түләйҙәр икән, тип ишеттем. Әгәр ҙә мин яңылышһам, үҙегеҙҙән дәғүәләрегеҙҙе белдерегеҙ. Беҙҙең Башҡортостан Юлдаш телевидениеһында ла шуға оҡшашыраҡ шоу программалар ойошторорға маташып ҡаранылар. Килеп сыҡманы, сөнки беҙҙең халыҡтың менталитеты бөтөнләй башҡа төрлө шул. Беҙҙә ундай ирeш-талашты театр сәхнәһендә берәр спектаклдең конфликты рәүешендә генә һынландырыу мөмкин.

"Артыҡ шатлыҡ һағыш килтерә" әйтеменең бер мәғәнәһе сама төшөнсәһенә лә бәйле. Һәр нәмәлә лә сама булырға тейеш. "Сама саманан артмай", тип тә әйтәләр. "Һимеҙ тәндә арыҡ йән", "Һимеҙлек ҡуйға ғына килешә" тигән әйтемдәр самаһыҙ туҡланыуҙы иҫкәртеүгә ҡоролған. Америкала, мәҫәлән, һәр икенсе кеше һимеҙлек менән яфалана, һәр өсөнсө үлем дә ошо сәбәпкә бәйле. Ҡабул иткәнгә тиклем ризыҡҡа беҙ хужабыҙ, ҡабул иткәндән һуң ул беҙгә хужа шул. Бер зыярат ҡапҡаһына: "Бында ятыусылар дөрөҫ туҡланмау, самаһыҙ ашау арҡаһында донъялыҡ менән хушлашты", - тигән һүҙҙәр яҙып ҡуйғандар. Кешене сама белмәү тойғоһо, нәфсе ҡоло булыуы харап итеүе, донъялыҡтан иртә алып китеүенә бәйле тағы ла әллә күпме миҫалдар килтерергә мөмкин булыр ине. Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, һәр бер һуғыштың, кешеләргә бәйле катаклизмдарҙың нигеҙендә нәфселек ята.

"Айыҡ тормош башланым" тигән китабымдың "Үтескә алынған шатлыҡ" тигән өлөшөндә мин бер тапҡыр араҡы эскән кешенең ҡырҡ көн һуҙымында балтаһы һыуға төшкән кешеләй бошонол, шомланып йөрөүе хаҡында әйтеп үткәйнем. Нимәнелер артыҡ ҡулланғанда, артыҡ шашынғанда, илағанда, көлгәндә, ҡайғырғанда беҙ нәҡ ошо рәүешле алдағы ғүмеребеҙҙән ҙур өлөшөн үтескә алабыҙ шул. Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, тотош кешелек комфортлы йәшәү рәүешен маҡсат итеп ҡуйып, киләсәк быуындарҙың өлөшөнә инеп, ғөмүмән, кешелектең ғүмерен ҡыҫҡарта түгелме икән? Радиоканалдар аша туктауһыҙ, тәүлек әйләнәһенә концерттар барғанда, телеканалдар аша бер туктауһыҙ шоуҙар күрһәтелгәндә, шомланмаҫтай ерендән шомланырһың. Ә бит беҙ ошо юл менән бәләҡазаларҙы, тәбиғәт катаклизмдарын, донъя һуғыштарын үҙебеҙ тыуҙырабыҙ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

# Ғаиләм-ҡәлғәм

11-17 апрель (алағарай) 2025 йыл
№14 (1158)

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА



## БАЛА ҺӘМ УЙЫНСЫҠ

**Балалар уйынсыҡтары... Магазин кәштәләренә күҙ һалһаң, иҫ-аҡылың китерлек уйынсыҡтар бар хәҙер. Баланды етәкләп инһәң, ул әле береһенә, әле икенсеһенә ынтыла. Барыһы ла матур, мауыҡтырғыс, ымһындырғыс. Уйынсыҡ етештереүселәр атай-әсәйҙең баланы ныҡ яратыуын, күңелен ҡыйырға теләмәгәнен, уның өсөн ҡулынан килгәнен дә, килмәгәнен дә эшләргә тырышып-ынтылып торғанлығын белә, шуның өсөн уйынсыҡтарға хаҡты самаһыҙ ҡиммәт ҡуя. Бала хаҡты белмәй, ҡыҙыҡҡан уйынсығын алдыра. Урам буйлап аяғы ергә теймәй ҡыуанып ҡайта. Шунан уның менән күп тигәндә ике-өс көн уйнай һәм танһығы ҡана.**

Балаға уйынсыҡ алырға кәрәк. Ләкин ниндәйен? Әлбиттә, бала үҙ ҡулдары менән ниҙер яһап, теҙеп, үҙ хыялындағыса эшләп уйнарға ярата. ***Шуның өсөн ярым әҙер уйынсыҡтар алыу отошло.*** Ә ҡыҙ балаға бала ҡурсаҡтар алыу маҡсатҡа ярашлы була. Ғаилә, атай, әсәй, бала итеп сығарылған Барби, Кен уйынсыҡтары менән уйнаған ҡыҙ баланы күҙ алдына килтерәйек. Атай менән әсәй итеп яһалған ҡурсаҡтарҙы үҙ-ара нисек һөйләштерһен, кем итеп уйнатһын бала? Ҡыҙ бала нисә генә йәштә булһа ла ҡурсаҡтарҙы йә үҙенә тиң, йә үҙенән бәләкәй итеп уйнатырға ярата. Ул йә әсәй (әсәй булып йышыраҡ осрай), йә уҡытыусы, тәрбиәсе булып уйнай. Барби ҡурсаҡтарҙың бала аңына нисек тәьҫир итеүе тураһында уйлап та ҡарамай һатып алырға ынтылабыҙ. 1959 йылдан, бындай ҡурсаҡтар сығарыла башлағандан алып, барби ҡурсаҡтары хаҡында донъя кимәлендә бәхәстәр бара, ул бәхәстәр тынмаҫ та, туҡтамаҫ та. Америка кешеһе Рут үҙенең Барбара исемле ҡыҙының исемен, Кен исемле улының исемдәрен атап етештерә башлаған был ҡурсаҡтар киң таралды хәҙер. Уны етештереүҙе туҡтатмаҫ өсөн һәр ваҡыт заман талаптарынан сығып камиллаштырып торалар. Хәҙер иһә заман модаһы менән кейемдәр тегеп кейендерәләр. Матур һәм зауыҡлы итеп кейендерелгән был ҡурсаҡтар күҙ яуын алып тора, әлбиттә. Әммә ундай ҡурсаҡтарҙы фәҡәт баланы алдаштырыу, ваҡытын ниндәйҙер шөғөл менән тулыландырыу өсөн генә файҙаланырға мөмкиндер. Әлбиттә, баланы зауыҡлы кейенеү, мода айыра белеү яғынан ниҙер тәрбиәләй алалыр был ҡурсаҡтар. Ләкин бит ундай зауыҡ бала бәләкәй генә сағында һалынмай, үҫә килә тәрбиәләнә. ***Ә бала бәләкәй саҡта уға тышҡы түгел, ә күңел тәрбиәһе кәрәк. Күңел тәрбиәһен әҙер уйынсыҡтар түгел, ә баланың үҙ фантазияһын ҡушып бар иткән донъяһы ғына тәрбиәләй ала.***

Бала өсөн уйынсыҡ нимә ул? Уйынсыҡ - ул баланың хыял донъяһын сағылдырырлыҡ мөхит бар итеү сараһы. Бала үҙ уйыны менән эске донъяһын аса. Бәләкәй генә итеп биләп алған күңел майҙанында уның хыял донъяһы урынлаша. Бала башкөллө ошо донъяға сума. Һөйләшеүгә ауыр, теле һуң асылған балалар ҙа, бик аралашып бармаған йомоҡ балалар ҙа ошо үҙ донъяһында ҡәҙимгесә һөйләшә, үҙе уйлап сығарған яҡындары менән аралаша. Баланың эске донъяһын белгең килһә, һиҙҙермәй генә уның уйынына күҙ һал да, һөйләшеүенә ҡолаҡ һал.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# ҮҪЕГЕҘ ӘЛЕ, МАЛАЙҘАР, ҮҪЕГЕҘ ӘЛЕ, ҠЫҘҘАР!



**Әҙәм балаһының фани донъяға тыуыуы, ғәҙәттә, уның ата-әсәһе, олатай-оләсәйҙәре, башҡа яҡын туғандары өсөн көтөп алынған, ҡыуанысլы һәм үҙенә күрә бик тә күркәм ваҡиға.**

Әлбиттә, инә ҡарынында малай яраламы, йә иһә ҡыҙмы, ул ата-әсә теләгенән тормай, сөнки был биогенетик феномен. Илаһыбыҙҙың мәңгелек йәшәйеш ҡанундары әҙәми заттың яралыуын, үҫеүен, кеше булараҡ формалашыуын уның биологик асылын хасил иткән геномы, йәғни нәҫел материалы аша билдәләй. Ул шул тиклем ҡатмарлы, хатта иң юғары кимәлдә тип һаналған IT-технологияларға нигеҙләнгән яһалма интеллект та ошондай биологик системаны ҡора алмаҫ ине. Ҡыҫҡаса әйткәндә, 22 аутосома, 2 енси хромосома (X һәм Y) һәм митохондриаль ДНК кешене кеше иткән 3 миллиард 99 миллион 734 мең 149 пар гендан тора. Эмбрионға атаһынан Y, әсәһенән X хромосома бирелһә - малай тыуа, ә XX парлы хромосома уны ҡыҙ бала итеп ялттыра.

***Ир бала менән ҡыҙ бала үҫешендә айырмалар ҡасан һәм нисек барлыҡҡа килә икән?*** Әлбиттә, уларҙы көнө-төнө балаларын бәпләп, ҡарап үҫтергән ата-әсәләр ғәмәли рәүештә күрә-белә һәм малайҙарында ир-атҡа, ҡыҙҙарында ҡатын-ҡыҙға хас сифаттарҙы тәрбиәләргә тырыша. Әммә ошо проблема ғилми яҡтан да тикшерелеп, билдәле бер һығымталар эшләнгән. Ошондай мәғлүмәттәр уҡыусыларыбыҙҙа ла ҡыҙыҡһыныу уятыр, тибеҙ.

***Ғәҙәттә малайҙар ҡыҙҙарҙан әҙме-күпме эрерәк кәүҙәле, ауырыраҡ булып тыуа.*** Имсәк балалығы осоронда улар араһында һиҙелерлек айырма булыуы тойолмай, әммә ҡыҙ балаларҙың һөлдә һөйәктәре үҫеше малайҙарҙыҡынан алдараҡ барыуы, хәрәкәт итеүҙәренең әүҙемерәк, тән тиреһенең һиҙеү кимәле юғарыраҡ булыуы билдәле. Табиптар, физиологтар, неврологтар имсәк балалары менән 1 йәшкә тиклем үк төрлө физик күнегеүҙәр үткәреүҙе хуплай, сөнки был уларҙың хәрәкәткә ҡарата ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә, эмоциональ үҫешен әүҙемләштерә.

***Малайҙар, аяҡтарына баҫып йөрөй башлауҙарына күп тә үтмәй, үҙҙәрен башҡаларға ҡарата агрессивыраҡ тота башлай.*** Күрәһең, тәүтормош замандарынан бирле формалашып нығынған ир-ат психологияһы уларҙың нәҫелдән бирелә торған сифаттарына тап ошондай йүнәлеш бирәлер. Был иң элгәре малайҙарҙың ниҙеләр теләүенә ҡаршылыҡ булғанда, йә иһә улар һораған нәмәне бирмәгән саҡта йышыраҡ күҙәтелә. Шәхси тормошомдан бер миҫал килтерәйем. Тәүге улыбыҙ һимеҙ булып үҫте, артыҡ хәрәкәтсән түгел ине. Бер көндә, магазинға ингәнебеҙҙә (уның теле асылмаған саҡ), ул минең ҡулымда ине. Витринала үҙен ҡыҙыҡтырған нимәнелер күреп ҡалып, ым-хәрәкәте менән ошо әйберҙе ҡулына алырға теләгәнен белдерҙе. Әммә мин боролоп китә башлағас, нык асыуланып тороп, бармаҡтары менән битемдән бороп алғаны хәтерҙә ҡалған.

***Билдәле булыуынса, балаларҙың телмәре бер тигеҙ формалашмай. Ҡыҙ балалар малайҙарҙан иртәрәк һөйләшә башлай.*** Был, күрәһең, кеше мейеһендә телмәр үҫешенә нигеҙ булған Брок һәм Вернике зоналарындағы нейрон системаларының үҫеше менән бәйле. Нисек кенә булмаһын, йәш балаларға улар тыуғандан алып һәр даим тыуған телендә өндәшеү, уларға йүнәлтелгән һүҙҙәрҙе наҙлап-иркәләп әйтеп тороу фарыз. Тап ошо рәүешле бала мейеһенең сенсор (кеше телмәрен һиҙеү-тойоу) зоналары әүҙемләшә, беренсел вербаль нейрон системаларының нигеҙе формалаша. Әйтергә кәрәк, мәктәпкәсә йәштәге балаларға туған телде өйрәткәндә төрлө вербаль уйындар, мультфильмдар, шиғырҙар, әкиәттәр һәм йырҙар ҡулланыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Күренекле совет психологы Лев Выготский балаларҙың 1 йәштән башлап бер юлы ике телде үҙләштерә алыуы хаҡында ғилми мәҡәлә лә яҙып ҡалдырған.

***Ғилми тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, 8-10 йәш самаһында малайҙар математик арауыҡ төшөнсәләрен ҡыҙҙарға ҡарағанда тиҙерәк үҙләштерә, арифметик ғәмәлдәрҙе башҡарыу, логик мәсьәләләр сисеү яғынан да алдымыраҡ була.*** Ҡыҙҙарҙың да, малайҙарҙың да үҫешеп килгән аңы предметтарҙы иҫәпләй алыу, һандарҙы ҡулланыу, логик-арифметик мәсьәләләрҙе сисергә өйрәнеү мөмкинлектәрен бирә. 4 йәшендә үк хәреф танып, уҡырға өйрәнгән улым менән шөғөлләнгәндә артабан, ҡушыу, алыу, ҡабатлау, бүлеү ғәмәлдәренән башҡа, тиҫкәре һандар төшөнсәһен, квадратҡа күтәреү һәм квадрат тамырын табыу кеүек абстракт ғәмәлдәр менән эш итергә өйрәтеп була икәненә инандым. Йәнә япон педагогы һәм психологы Масару Ибуканың 90-сы йылдарҙағы ҡанатлы һүҙҙәре иҫтә ҡалған: "Баланы 3 йәшенән алып ҡына уҡыта-өйрәтә башлау һуң була!"

***Мәктәптә уҡыған йылдарында телмәр үҫеше яғынан ҡыҙҙар алдымыраҡ булһа, үҫмер малайҙарҙың математик һәм логик фекерләүе юғарыраҡ кимәлдә була.*** Әммә заманса уҡытыу технологияларын ҡулланыу барса өлкәләрҙә тиерлек ҡыҙҙар һәм малайҙарҙың интеллектуаль үҫешен тигеҙләй ала. Айырым, махсус һәләттәр үҫешенә иғтибар итһәк, бында бөтөнләйгә тиерлек айырмалар юҡҡа иҫәп: физкультура һәм спорт, сәнғәт, әҙәбиәт һәм шиғриәт менән мауыға башлау, ижади һәләттәренең үҫешә барыуы малайҙарҙа ла, ҡыҙҙарҙа бер үк йәштә күҙәтелә. Шул уҡ ваҡытта, "Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән" тигән әйтемгә ярашлы, малайҙарҙы ир-ат, ҡыҙҙарҙы ҡатын-ҡыҙҙар башҡарған һөнәрҙәргә йәштән үк өйрәтеп өлгөрөү мөһим.

**Әле әйтелгәндәрҙән бер һәйбәт һәм фәһемле һығымта эшләү фарыз: балаларыбыҙҙың физик, интелектуаль һәм рухи-әхлаҡи үҫеше бик бәләкәй саҡтарынан уҡ улар өсөн ҡыҙыҡлы булған ғәмәлдәр менән мауыҡтыра алыу, аң-белем көҫәүгә, ижадҡа йүнәлеш биреү, ватансыллыҡ, халҡыбыҙға, телебеҙгә, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү менән бермә-бер бәйле. Шулай булһа, нәҫелебеҙ ҡоромаҫ, ул-ҡыҙҙарыбыҙ йорт-илебеҙҙең ныҡлы терәге, халҡыбыҙҙың матур шәхестәре булып үҫеп етер.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

✓ ***Тормоштары ни хәтлем ауыр, етешһеҙ булһа ла, кешеләр тулы ғаилә булып йәшәргә тырышҡан. Ҡарауһыҙ ҡалған етем туғандарын да тәрбиәгә алғандар, шунлыҡтан, элек илебеҙҙә балалар, ҡарттар йорттары булмаған.***

ҺАҠЛАУ ЙОЛАЛАРЫ

**Ата-бабаларыбыҙ үҙҙәренән һуң һау-сәләмәт, көслө рухлы, абруйлы нәҫел ҡалдырыуға ныҡ иғтибар биргән. "Өйләнмәгән уйныҙ булыр, донъяһы көйһөҙ булыр", тип, улдарына ваҡытында кәләш алып бирергә, ҡыҙҙарын кейәүгә бирергә тырышҡандар. Ҡатын-ҡыҙҙың иң маҡтаулы бурысы - әсә булыу, бала бағыу, ләкин ҡайһы бер осраҡтарҙа йәш ғаиләләр быныдай бәхеттән мәхрүм булғандар. Элек медицина ярҙамы ла тейешле кимәлдә булмағанлыҡтандыр, ҡыҙылса ауырыуы йәки башҡа сәбәптәр менән йәш балалар араһында үлем ныҡ көслө булған. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә балалар тыуып торған, үлеп торған, шуға ла ололар йәштәрҙе: "Балаң тыуғанына ҡыуанма, торғанына ҡыуан", - тип иҫкәрткән.**

# БАЛАЛЫ КЕШЕ - БАЙ КЕШЕ

Борон балалары гел үлеп торған ғаиләләрҙә "Балаларҙы һатып алыу" йолаһын үткәргәндәрен, ҡорбан салдырғандарын, ҡыҙ бала тыуһа - ир балаға кәләш итеп бирергә, ир бала тыуһа - берәй ҡыҙ баланың бәхетенә йәшәп китер әле, тип инселәгәндәрен беләм. "Данлы уҙаман Уйылдан" исемле китабымда ла шундай ике осраҡты яҙғайным. Әле үҙем йәшәгән Ҡәйепҡолда (Учалы районы) ауылдаштарҙан "Бала һатып алыу " йолаһын беләләрме икән, тип һораштыра башланым. Улар: "Тегене һатып алғандар, быны һатып алғандар", - тип, теҙеп миҫалдар килтерә башланылар. Үҙебеҙ йәшәгән Ҡәйепҡол ауылында ла шундай хәл булған икән.

***Дилара апай Мәғәсүмова ҡайнағаһы Мөхәмәт ағай Мәғәсүмовты һатып алыуҙары тураһында ошоларҙы бәйән итте:*** "Инә ҡаҙ ишек алдында ни эшләрен белмәй, ары һуғылып, бире һуғылып ҡаңғылдап йөрөй ине. Ҡәйнәм тәҙрәнән ҡараны ла сеңләп илап ебәрҙе: "Ҡаҙымдың туғыҙ бәпкәһе берсә үлде, әүрәп йөрөргә, исмаһам, береһе лә ҡалманы бит. Ҡайһылай ғына зарланып илап йөрөй. Минең дә туғыҙ балам тыуып торҙо, үлеп торҙо. Һәр баламды ерләгән һайын шулай, ошо инә ҡаҙ кеүек, әсе ҡайғыларымдан үҙемә урын таба алмай, зарығып, һарһылып илап йөрөй торғайным. Унынсы балам Мөхәмәтемде һатып алдыҡ, шунан Вәрисем йәшәп китте. Өйөбөҙ шул тиклем тынысһыҙ булды. Өйҙө күсереп һалырға ҡайҙа һуң аҡсаһы, етешһеҙ тормош ине бит..."

***Мөхәмәт ағайҙың ҡатыны Рәшиҙә еңгә лә, һүҙгә ҡушылып китте:*** "Эйе, ҡәйнәмдәр менән бергә шул өйҙә йәшәп ятҡан саҡта беҙҙең дә тәүге балабыҙ ауырымай ҙа ине, шул тиклем ныҡ итеп иланы ла иланы. Аптырағас, больницаға алып барҙыҡ. Врачтар ҙа ярҙам итә алманы, бәпәйебеҙ үлеп ҡуйҙы. Ҡараһаҡ, гәжәп иттек: арҡаһында биш бармаҡ эҙе тора ине. Икенсе балабыҙ тыуғас, бер йәше тулғансы, атай йортонда йәшәнем. Үҙем менән бәләкәй саҡта булған хәл тураһында атайым менән әсәйем һөйләгәне иҫкә килеп төштө. Элек ауылдың уртаһында йәшәй торғайныҡ. Атайым менән әсәйемдең, өйөбөҙ ныҡ тынысһыҙ булды, тип һөйләгәндәре хәтерҙә. Миңә бер йәштәр самаһы булғандыр, иртә һөйләшкәнмен. Бер ваҡыт төн уртаһында атайым әсәйемде: "Тор әле, тор, әллә нимә күкрәгемә баҫып, сәңгелдәккә ырғыны", - тип уятҡан. Әсәйем мине сәңгелдәктән алайым, тип эйелһә: "Ашай", - тип ҡысҡырып илап ебәргәнмен. Әсәйем тиҙ генә иҙән уртаһында дары быҫҡыта һалған. Мин ҡыуанысымдан ҡулдарымды сәпәкәйләп: "Үлде, бөттө", - тип, көлөп ебәргәнмен. Туғандарым һаташып ауырып киткән саҡтарында әсәйем артыш, дары быҫҡытыр, йә булмаһа, дарыны һөткә иҙеп, ҡултыҡ аҫтарына, устарына, табандарына һөртә торғайны".

***Муса ауылы ҡыҙы Фатима Мөхәмәт ҡыҙы Нәбиуллина ла атаһы менән әсәһе үҙен "һатып алыуҙары" тураһында ошоларҙы һөйләне:*** "Әсәйем Зөлҡағиҙә Фәсхитдин ҡыҙы һәм атайым Мөхәмәт Ғәбит улы Нәбиуллиндәр бер ауылда тыуып үҫкәндәр, класташтар, бергә эшләгәндәр. Өйләнешеп, матур тормош ҡорғандар. Һандыҡ төбөндә ятҡан "Тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ"тарҙан миңә тиклем Рафиҡ, Нәбирә, Гөлсирә, Рәйфә, Радик исемле туғандарым булғанын белдем, тик улар оҙаҡ йәшәй алмағандар, бер-бер артлы үлеп торғандар. Атайым менән әсәйем, Зәйтүнә әбей менән Зәйнулла бабай Джантаевтарға ат биреп, мине, яңы ғына тыуған баланы, тәҙрә аша "һатып алғандар", Фатима тип исем ҡушҡандар. Бәпәй сағымдан ете ҡат ҡатмарлы күлдәк тегеп кейҙергәндәр, тәңкәләр таҡҡандар. Башлығыма ла, күҙ теймәһен тип, ҡаҙҙың өрпәйеп торған йомшаҡ ерен ҡуйғандар. Мине ныҡ һаҡлап ҡына йөрөткәндәр. Тәүге сәсем дә алынмаған. Әсәйем: "Балам, һинең тәүге сәсең алынмаған, тәүге сәсе алынмаған кеше рәнйешле була, бер үк кешегә рәнйей күрмә, ипле бул, рәнйешең кешегә төшөп ҡуймаһын", - тип иҫкәртә торғайны. Мине "һатып алғандан" һуң беҙҙең ғаиләлә өс бала тыуып йәшәп киткән. Атайым менән әсәйемә үпкәләп: "Ниңә миңә Фатима, тип әбейҙәр исемен ҡуштығыҙ? Мәктәптә класташтарым мине "батый"тип ирештерәләр бит. Берәй матур ғына яңғырашлы заманса исем тапманығыҙмы ни?" - тип, илай торғайным. Атайым: "Ҡыҙ бала булып тыуғаныңа ҡыуан, исемең Фатима булғанға рәхмәт әйт. Малай булып тыуһаң, исемеңде Абдулла тип ҡушыр инек. Ул ваҡытта ла һине "Апуш" тип ирештерерҙәр ине", - тине. Балалары гел генә үлеп торған ғаиләләрҙә малай тыуһа - Абдулла, ҡыҙ тыуһа - Фатима тип исем ҡушҡандар икән. Юҡ, хәҙер улай исемемә заранмайым, минең исемем донъяла иң матуры".

Борон ололар балаларына исем ататыуға ла ҙур иғтибар биргәндәр, исем балаларҙың яҙмышында ҙур роль уйнай, тип иҫәпләгәндәр һәм мәғәнәлеләрен генә ҡушырға тырышҡандар. Күп кенә исемдәребеҙ Көрьән-Кәримдән алынғанын беләбеҙ, баланың ғүмере оҙон булһын, ен-шайтандар әйтә алмаһындар, тип, Мөхәмәтғәли, Нәғимйән, Көнбикә, Хәбибьямал кеүек ҡушма исемдәр ҡушылған. Ен-зәхмәттәр баланың исеменән үк ҡурҡып торһон тигән маҡсатта Төлкөбай, Һеләүһен, Аҡкөсөк, Айыухан, Арыҫланғәли тигән исемдәр менән дә атағандар.

***Мәләүез ҡалаһында йәшәүсе Хәмиҙә Бәҙеритдин ҡыҙы Фәйзуллина ла үҙенең иҫтәлектәре менән уртаҡлашты:*** "Ямашта (Бөрйән районы) өйөбөҙ бик тынысһыҙ булды. Өйҙөң бер түбә таҡтаһы төндә йөрөй, тип һөйләрҙәр ине. Мин иҫ белгәндә атайым иҙән уртаһында дары быҫҡытыр ине. Өй тыныс булһын өсөн, олатайымдан ниҙер өшкөртөп нигеҙҙәргә һалдылар. Яңы өй һалып сыҡҡас, атайым менән әсәйемдең минән һуң бер улы, ҡыҙы тыуып, ауырымай-нитмәй генә үлгәндәр. Мин, беренсе бала, Шәмсиямал өләсәйемдең өйөндә тыуғанмын, мулла Уйылдан олатайымдың тәрбиәһендә генә тере ҡалғанмындыр инде. Миңә ун йәш тулғанда ҡустым тыуҙы. Атайым инде донъяһын онотоп "байрам итеп" йөрөй. Уйылдан олатайым менән Шәмсиямал өләсәйемдең "Баланы һатып алырға кәрәк", - тип һөйләшкәне иҫтә ҡалған. Мин ҡустымды һатып ебәрәләр икән, тип аңлап, ҡайғыра башланым. "Кустыһыҙ ҡалам да баһа", - тип илайым. Күмәк балалы ғаиләләргә ҡарап ҡызыға торғайным. Шәмсиямал өләсәйем күп итеп ваҡ өшәләр, бәлештәр, бәрәмәстәр бешерҙе. Һарыҡ һуйҙылар. Шунан өйҙөң тәҙрәһенән алып, ҡустымды тәҙрә аша Уйылдан олатайым, Шәмсиямал өләсәйем, Фатима инәйем, Ҡанифа инәйем "һатып алдыҡ" тинеләр. Исемде лә Сынтимер тип ҡушып, бәпес туйы үткәреп таралыштылар. Биш йыл үткәндән һуң, тағы ла бер ҡустым тыуҙы, уға Биктимер тип исем ҡуштылар. Ышанырһыңмы, ышанмаҫһыңмы, бына бит ул элекке йолалар ниндәй булған!"

***Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылынан Мәғрифә инәй Бикешева һөйләгәндәрҙән.*** Мәғрифә инәй менән Мөхәмәт бабайҙың ике ҡыҙы, ике улы, ата менән әсәне бала һөйөү ҡыуаныс-шатлыҡтарынан мәхрүм итеп, әсе ҡайғыларға һалып, тыуыу менән бер-бер артлы үлеп торалар. Аслыҡ, яланғаслыҡ, бөтә эштәрҙең дә ҡул көсө менән башҡарылыуы, иртәнән кискә тиклем ураҡ урыуҙар - бөтәһе лә балаларҙың үлеменә сәбәпсе булғандыр инде. Балаҡайҙары гел үлеп торғас, бишенсе бала, Гөлсөм апай, яҡты донъяға килеү менән ата менән әсә яңы тыуған баланы Хөснитдинова Хәкимә өләсәҙән "һатып алыу" йолаһын башҡаралар. Хәкимә өләсәй сабыйҙы тыуыу менән төрә һалып, алып ҡайтып китә лә, ҡулына ете бөртөк мәрйен тағып, тәҙрә аша һатып бирә. "Ҡулымда биш һум ғына аҡсам бар, ошо балам үҫеп етһә, үҙ көсө менән инәһенә күлдәк алып бирер, тип уйланым. Биш һум ғына аҡса, бер баҫма еп, бер метр аҡ ситса тауар бирҙем. Ҡыҙым ике балалы булғас, һатып биргән инәкәйенә күлдәк алып биреп, был нәҙерҙе үтәп ҡуйҙы", - тип һөйләгәйне Мәғрифә инәй.

Тормоштары ни хәтлем ауыр, етешһеҙ булһа ла, кешеләр тулы ғаилә булып йәшәргә тырышҡан. Ата-әсәләре үлеп, ҡарауһыҙ ҡалған етем туғандарын да тәрбиәгә алғандар, шунлыҡтан, элек илебеҙҙә балалар, ҡарттар йорттары булмаған. Беҙҙең быуын балаларының да күбеһе, барын да юғын да күреп, олораҡтары кесерәктәрен ҡурсалап, бәләкәйҙәре өлкән ағайҙары, апайҙарынан ҡалған кейемдәрен кейеп, ишле ғаиләләрҙә үҫте. Тормош етешһеҙ булһа ла, балалар баҡсалары, мәктәптәр бала-сағаларҙың шат тауыштарынан шау-гөр килеп торҙо. Атай-әсәйҙәребеҙ күмәк балаларын бер ҙә күпһенмәне:" Тауҙан таш артмай ул", - тип яратып торорҙар ине.

Хәҙерге ваҡытта Хөкүмәтебеҙ күп балалы ата-әсәләргә һәм шулай уҡ ҡарауһыҙ ҡалған балаларҙы тәрбиәгә алған ғаиләләргә ҙур ярҙам ҡулы һуҙырға ғына тора, төрлө саралар үткәрә: пособиелар арттырыла, Әсәлек капиталы бирелә һәм башҡалар, шуға ҡарамаҫтан, ауыл ерҙәрендә балалар һаны кәмей барыу сәбәпле, бынамын тигән итеп төҙөлгән балалар баҡсалары, мәктәптәр бер-бер артлы ябыла бара. Киләсәк нисек булыр икән? "Балалы кеше - бай кеше", тиҙәр. Тәрбиәле, тәрән белемле, күп һанлы йәш быуынлы ил бай ҙа, көслө лә була бит.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА,**
**Учалы районы.**



БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

# БАЛА ЭШ МЕНӘН ҮҪҺӘ...

## бәхеткә юл асыла

(Башы 1-се биттә).

Атай менән әсәй үҙҙәре лә күп балалы ғаиләнән. Тимәк, ысын башҡорт ғаиләһе. Йәмил Йылайыр районының Һабыр ауылында етенсе бала булып донъяға ауаз һала. Степной ҡыҙы Альбина ла туғандары менән ғорурлана ала - туғыҙ балалы ғаиләлә үҫә ул. Ике йәш йөрәктең тормош юлдары бергә киҫешеүе һис тә осраҡлы түгел, маҡсаттары, донъяға ҡараштары уртаҡ уларҙың. 2000 йылда танышып, ғаилә ҡороп ебәрһәләр, инде һиҙҙермәй генә 25 йыл үтеп тә киткән. Ошо йылдар эсендә, тәбиғи, һынауҙар ҙа булғандыр, ләкин берҙәмлек, татыулыҡ булған ерҙә һәр саҡ тормош усағы гөрләй. Ҡоҙашевтар ғаиләһе тураһында шулай тип кенә әйтергә була: мөхәббәт, бер-береһенә ихтирам һәм һаҡсыл мөнәсәбәт. Ете баланы ла ошо рухта тәрбиәләйҙәр, ҡошсоҡтарының киләсәге яҡты булырына, йәмғиәткә, халҡына файҙалы булып үҫерҙәренә шикләнмәйҙәр. Ошондай юғары маҡсат менән йәшәгән Ҡоҙашевтарҙың конкурстарҙа ҡатнашыр көстәре лә, күрһәтер эштәре лә етерлек. Ғаилә башлығы менән әңгәмә ҡорабыҙ.

**Йәмил, "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе - 2025" конкурсында ҡатнашыу ҙур әҙерлек талап иттеме? Һеҙҙең өсөн көтөлмәгәнерәк булдымы әллә?**

- Конкурста ҡатнашыуыбыҙ әле, тиген тәҡдим килгәс, бер ҙә икеләнеп тормай, риза булдыҡ та ҡуйҙыҡ. Сөнки уға тиклем дә төрлө ярыштарҙа көс һынағаныбыҙ булды, ниндәйҙер тәжрибәбеҙ бар, тимәксемен. "Йәш ғаилә", "Супер ғаилә" һәм башҡа конкурстарҙа ҡатнашып, алдынғы урындарҙы яулай торғайныҡ. "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе - 2025", әлбиттә, уларҙан бер ни тиклем айырыла, шулай ҙа ғаилә көсөнә ышанғандар еңелеп ҡалмаясаҡ. Тәүге этапта әллә ниндәй оло тырышлыҡ һалдыҡ, тип әйтмәйем, бары тормош-көнкүрешебеҙ нисек, шуны асыҡ һәм теүәл итеп күрһәтергә тырыштыҡ, һәм тәүге турҙы еңел генә үттек тә киттек. Икенсе этапта ситтән тороп ҡатнашыу талап ителде. "Аҡъяр ТВ" хеҙмәткәрҙәренә рәхмәт. Улар төшөргән ролик баһалама ағзаларына ебәрелде. Беҙҙең өсөн иң ғәжәбе шул булды - конкурста ҡатнашҡан 81 ғаилә араһынан беҙ беренсе урынды яуланыҡ. Шулай итеп, республика этабына үтеп тә киттек. 1 мартта иһә бөтөн ғаиләбеҙ менән Стәрлетамаҡ ҡалаһына юл алдыҡ. Ярыш юғары кимәлдә ойошторолғайны, ойоштороусылар тулы көстәренә эшләне, бай йөкмәткеле булды. Гран-приға беҙ эйә булырбыҙ ҙа, 100 мең һумлыҡ сертификат алырбыҙ, тип һис тә уйламағайныҡ. Хәйбулла районын танытыуыбыҙ, уның исеменән сығыш яһай алыуыбыҙ менән ғорурбыҙ. Район хакимиәтенә, мәғариф идаралығына рәхмәтебеҙ ҙур, айырыуса балаларыбыҙ өсөн ҡыуандыҡ. Улар үҙҙәрен һынап ҡараны, һәм енеүселәр булып сығыш яһаны. Ошонан да оло бәхет бармы ни!

**Ишле ғаиләнең хәстәре лә, мәшәҡәттәре лә етерлек. Бала тәрбиәләүҙә нимәгә ныҕыраҡ иғтибар итәһегеҙ?**

- Альбина ла, мин дә ишле ғаиләлә үҫтек. Бындай ғаиләләрҙә балалар бер-береһенә терәк булып, ярҙамлашып, яуаплылыҡ алып үҫәләр. Шулай булғас, беҙ ошо сифаттарҙы үҙебеҙҙең балаларҙа ла күрергә теләнек. Тап балалар күп булғанда ғына "ғаилә" тигән һүҙ үҙенең ысын мәғәнәһен аса. Уҡыу мәлеме, каникулмы, беҙҙең ғаилә таң менән ҡуша тора. Иртән ашап алғас, һәр беребеҙ үҙ эшебеҙ менән булышабыҙ. Ике балабыҙ балалар баҡсаһына йөрөй, дүртәүһе - мәктәпкә. Өлкән улыбыҙ Аҡъяр тау колледжында уҡый. Төшкөләккә дәррәү ҡайтып инәбеҙ, балаларҙы ашатабыҙ, унан ҡатын менән йәнә эшкә сығып китәбеҙ. Балалар инде дәрес әҙерләйҙәр, өйҙә йыйыштырып, мал-тыуарҙы ҡарап ҡуялар. Кис ҡайтыуға, бөтә нәмә әҙер, эшләнгән.

Иң мөһиме, балаларҙы хеҙмәт һөйөргә өйрәтергә кәрәк, бала эш менән үҫһә, сынығыу ала. Һәр эште дөрөҫ бүлеү тигән әйбер бар - һәр баланың үҙ бурысы булырға тейеш. Тәүге балабыҙ тыуғанда өләсәй-көрсәй, ҡартатайҙарҙың ярҙамы ҙур булды. Унан инде үҙебеҙ ҙә тормош көтөргә өйрәндек. Өлкән балалар бәләкәстәрен ҡараша, бик хәстәрлекле улар, кешегә ярҙам итергә генә торалар. Битараф түгелдәр. Өлкән улыбыҙ Арыҫлан туған-тыумасаларға бесән сабыша, мал ҡарашырға ярҙамлаша. Бәләкәстәре иһә уға оҡшарға тырышылар, шуға ла өлкәндәрҙең абруйлы булыуы мөһим.

**Буш ваҡытығыҙҙы нисек үткәрәһегеҙ? Ҡайҙа ял итергә яратаһығыҙ?**

-Беҙҙең ғаилә балыҡсылыҡ менән мауыға башланы әле. Йылға буйында бергәләшеп мәж килеү, шәп балыҡ ҡарпыр, тип ҡармаҡ тотоп ултырыу - бөтәһе лә күңелебеҙгә хуш килә. Шуныһы, нимә эшләһәк тә, беҙ бергәбеҙ. Йәй етһә, баҡса менән булышабыҙ, емеш-йәшелсәбеҙ күп. Алмағас, груша ағастары, виноград - бөтәһе лә бар. Һыйыр малы, йылҡы тотабыҙ. Яҙ етһә, 100 баш өйрәк, 30 ҡаҙ, 50 бройлер тауыҡ алабыҙ. Хеҙмәт - ул иң шәп ял. Ауылда барған төрлө эштәрҙән ситтә ҡалған юҡ. Районда үткән сараларҙа ла ҡатнашабыҙ. Балаҡайҙарыбыҙ беҙҙән күреп, шулай уҡ әүҙемселәр булып үҫәләр. Иң мөһиме, улар иҫән-һау булһындар. Һау-сәләмәт кеше генә ҙур эштәр атҡара, оло маҡсатар менән йәшәй һәм бүтәндәрҙе лә үҙе артынан эйәртә ала.

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТЫУЫМ КӘМЕЙ...



**2024 йылда Башҡортостанда 21 305 пар өйләнешкән. Республика никах һаны буйынса "ПромРейтинг" тикшеренеү агентлығы белгестәре төҙөгән рейтингта 10-сы урынды биләй.**

Никах буйынса иң бәхетле төбәктәр һәм ҡалалар исемлеген Мәскәү башлай (87,2 мең өйләнешкән). Икенсе урында - Санкт-Петербург (50,3 мең никах теркәлгән), өс лидер иҫәбендә Мәскәү өлкәһе (47,9 мең яңы ғаилә). Лидерҙар араһында шулай уҡ Краснодар крайы, Свердловск, Ростов, Төмән, Силәбе өлкәләре, Татарстан бар. Дөйөм алғанда, 2024 йылда илдә 880 026 никах теркәлгән, был былтырғы ошо уҡ осорҙағы күрһәткестән 7,0 процентҡа түбәнерәк. Бынан тыш, Башҡортостан сабыйҙар һаны буйынса алдынғылар рәтендә. Был рейтингта беҙҙең республика туғыҙынсы урында (32 968 яңы тыуған сабый). Беренсе урында, гәҙәттәгесә, Мәскәү (120 мең сабый). Артабан Мәскәү өлкәһе (71,4 мең), Краснодар крайы (51,5 мең), Санкт-Петербург (47,1 мең) килә.

Ошо осорҙа илебеҙҙә бөтәһе 1 222 408 сабый тыуған. Был күрһәткес 2023 йыл күрһәткестәренән 3,4 процентҡа ҡалыша.

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!

# ИРҘӘРГӘ АҠЫЛ КӘРӘКМЕ?



**Социологтар Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙарындағы иң яҡшы сифаттарҙы атаны.**

Намыҫлылыҡ, аҡыл, хужалыҡ итеү һәм тоғролоҡ - Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙарының төп сифаттары ошолар. Респонденттарҙың 44-47 процентының яуаптары буйынса шундай һығымта яһалған. Ә бына тышҡы матурлыҡ күптәргә бик мөһим түгел, был сифатты һорау алыусыларҙың 26 проценты ғына атаған.

Ә ир-егеттәрҙең иң ҡиммәтле сифаттары араһында намыҫлылыҡ (56 процент) һәм аҡыл (47 процент) иң мөһим тип билдәләнә.

Социологтар быйылғы мәғлүмәттәрҙе 15 йыл элек үткәрелгән һорау алыу күрһәткестәре менән сағыштыра: аҡыллы ир-егеткә һорау һиҙелерлек кәмегән. Шул уҡ ваҡытта уларҙың бойондороҡһоҙлоғона, тоғролоғона һәм хәстәрлегенә, шулай уҡ күңел торошона һәм бәлә-ҡазаларға ҡаршы тороу һәләтенә талаптар артҡан.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# БАЛАҢДЫ ҠЫЙЫРҺЫТМАЙҘАРМЫ?



**Уҡытыусыларҙың 70 проценттан ашыуы уҡыусылар һәм уларҙың ата-әсәләре тарафынан буллинг ҡорбандары була. Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының Фән, мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте һәм спорт буйынса комитет рәйесе Айбулат Хажин хәбәр итте.**

Депутат билдәләүенсә, Рәсәйҙә һорау алыуҙа ҡатнашҡан 15 мең уҡытыусының яртыһы ғүмере һәм һаулығына хәүеф янауын белдергән. "Шул уҡ ваҡытта социаль селтәрҙәрҙә һәм киң мәғлүмәт сараларында - балаларға ҡарата буллинг йышыраҡ осрай. Әммә был уҡытыусыларҙың бындай буллингҡа юлыҡмауын күрһәтмәй. Был проблема бар һәм ул бик етди", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды А. Хажин.

Спикер әйтеүе буйынса, төп әҙәрлекләү һәм мыҫҡыллау объекттары булып 5-7 йәшкә тиклемге стажы булған йәш педагогтар һәм өлкән йәштәге уҡытыусылар тора. "Әлеге ваҡытта Дәүләт Думаһында закон проекты әҙерләнә, ул педагог статусын формалаштырыуға һәм яҡлауға булышлыҡ итер һәм һәр уҡытыусыға ҡатмарлы конфликтлы хәлдән сығырға мөмкинлек биргән ниндәйҙер механизм булдырыр, тип ышанам", - ти БР Ҡоролтай комитеты башлығы.

Башҡортостанда мәктәптәрҙә конфликт һәм әҙәрлекләү эпизодтары бер аҙ артыуы теркәлгән. Республиканың балалар омбудсмены Ольга Панчихина БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында хәбәр итеүенсә, 2024 йылда республикала бала хоҡуҡтары буйынса вәкил аппаратына ошондай 125 мөрәжәғәт килгән. "Буллинг 2-7-се кластарҙа йышыраҡ осрай, юғары кластарҙа әҙерәк, әммә унда ҡатмарлыраҡ осраҡтар була. Әлбиттә, бөгөн ата-әсәләр ҙә, балалар ҙа проблеманы йәшермәй, уҡытыусыларға һәм профилле хеҙмәттәргә мөрәжәғәт итергә тырыша. Беҙ психологтар, йәштәр сәйәсәте, мәғариф, социаль яҡлау структуралары вәкилдәре менән берлектә эшләйбеҙ һәм һәр ваҡыт ярҙам итергә әҙербеҙ", - тип билдәләй О. Панчихина.

Юғары категориялы табип-психиатр, Республика психотерапия үҙәгенең баш табибы Наталья Тулбаева баланың мәктәп буллингы кисергәнен таныу билдәләре тураһында Ufanovosti.ru порталына һөйләне.

Белгестәр әйтеүенсә, түбәндәге осраҡтарҙа ата-әсә балаһына иғтибар итергә тейеш: бала йыш ҡына яңғыҙ ҡала һәм уның менән бер кем дә аралашырға тырышмаһа; класҡа инһә, барыһы ла өндәшмәһә; аралашырға тырыша, әммә яуап итеп бер нисә кеше бер юлы һөйләшһә йәки нимәләр эшләһә, ҡушаматтар бирһә; һөйләшкән ваҡытында йыш ҡына һаҡланыу ишаралары ҡулланһа (ҡулы менән яба), тирә-яғына ҡараһа; дәрестән һуң беренсе булып кластан сығырға тырышһа, класташтарынан бик тиҙ китһә йәки, киреһенсә, дәрестән һуң әйберҙәрен бик оҙаҡ йыйып, барыһы ла киткәнен көтһә; элек бындай хәл булмаһа ла, дәрестәргә һуңлай башлаһа һәм башҡалар.

Башҡа билдәләр ҙә әҙәрлекләүҙе күрһәтә ала. Мәҫәлән, бала бысраҡ кейемдә ҡайта, уның кәйефе ҡырҡа үҙгәрә, уҡыусы кемгәлер үҙенең телефонын йәки башҡа шәхси әйберҙәрен файҙаланыуға бирә, башҡаларға ашхананан йәки магазиндан нимәләр һатып ала, мәктәп ихатаһында йыш ҡына балалар төркөмө йыйыла, улар тығыҙ ҡулсаға теҙелә.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА



# БАЛА ҺӘМ УЙЫНСЫҠ

**(Башы 7-се биттә).**

Шуның өсөн уйынсыҡтарҙы ялтырауыҡтан, тотош әҙер эшләнгәндән түгел, ә ярым яһалғанды алырға кәрәк. Ә инде, һис юғы, йәйге ял осоронда балалар менән тәбиғәткә сығып, тәбиғәт донъяһы менән аралашып, ағастан, япраҡтарҙан, таштарҙан, балсыҡтан һәм башҡа шундай һығылмалы, әүәләп тә, йомарлап та һәр төрлө ҡалыпҡа йәтеш кенә, тиҙ генә килтермәле нәмәләрҙән бала менән бергәләп төрлө уйынсыҡтар яһап аралашыу бала менән аралашыуҙың иң матур ысулы ул. Бала менән бергәләп яһалған хыялый мөхит уның фантазияһын үҫтереп кенә түгел, ә эске донъяһын өйрәнеп алыу өсөн атай-әсәйгә артабанғы тәрбиә эшендә ныҡ ярҙам итер ине.

Әлбиттә, йәйге ялдарҙан башҡа ваҡытта көнөтөнө эштә юғалған һәм кисен генә ҡайтып бала менән аралашырға форсат тапҡан заман атай-әсәйҙәренән дә; бергә йәшәрлек шарттар булмағанлыҡтан, айырым донъя көтөп, ейән-ейәнсәрҙәре менән бик һирәк кенә аралашыу форсаты тейгән өләсәй-олатайҙарҙан да тәрбиә эшендә әүҙем ҡатнашып китеүҙәрен өмөт итеү мөмкин түгел. Шуның өсөн баланың эске донъяһы менән таныш түгелбеҙ, уның холҡ-фиғеле ҡайһы йүнәлештә үҫешкәнен күҙҙән ысҡындырып ебәрәбеҙ, тәрбиә эшендә иң ҙур ярҙамсы булған туған тел һәм туған традицияларҙан мәхрүм ҡалыуын, сит-ят мөхиткә ылығып китеүен, хатта интернет аша аралашып та юлдан тайпылыуын һиҙмәй ҙә ҡалабыҙ. Быңдай шарттар тыуҙырылыуға бер кем дә ғәйепле түгел. Аҙаҡ аҡланыуҙың, һылтаныуҙың, үкенеүҙең файҙаһы самалы ғына. Шуға күрә гәлсәр һауытыбыҙ ватылмаҫ элек уны һаҡлау сараһын күрәйек. Уның иң ышаныслы юлы - беҙ иғтибар итеп тә бармаған һәм ҡайһы бер атай-әсәйҙәрҙең бөтөнләй иғтибарынан ситтә тороп ҡалған уйынсыҡтар һәм балаларҙың сәхнәләштерелгән, йәғни үҙҙәре уйлап сығарған ғаилә, балалар баҡсаһы һәм башҡа уйындары аша уларҙың күңел донъяһын өйрәнеү. ***Бала үҙ уйынында ни тураһында хыялланғанын, ниҙәр борсоғанын, атай-әсәй яғынан ҡайһы осраҡта, ниндәй мәлдә хата ебәрелгәнен, уға ҡарата гәҙел булмаған осраҡтарҙы, ниндәй осраҡта уны шатландырырлыҡ ваҡиғалар булғанын, атай-әсәйҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен һәм башҡа, һәм башҡа ваҡиғаларҙы сағылдыра.*** Тик, әлбиттә, улар уйнатҡан ҡурсаҡтар үҙҙәренән бәләкәйерәк: йә бала, йә ҡусты, йәки һеңле булырға тейеш.

Ә ир балалар атай булып та, ғаилә ҡороп та уйнамай. Улар командир, шофер, летчик булып уйнаусан. Күп осраҡта атаһының һөнәрен ҡабатлаусандар. Ҡайһылай ғына булмаһын, уларҙың уйыны аша ла күңел донъяларын белеп була. Тик был серҙе аҙаҡ уларҙы сыбыртҡылау өсөн файҙаланырға түгел, ә үҙеңде атай-әсәй булараҡ тәрбиәләү, баланы артабан ниндәй йүнәлештә үҫтереү, ҡайҙа яңылышлыҡ ебәргәнеңде аңлау өсөн кәрәк. Бала һиңә асмаған серен уйынсыҡтарына ныҡыраҡ аса. Ул уйнағанда бөтөн эске донъяһын һинең усыңа һала. Өйрән генә.

***Ҡыҫҡаһы, әйтергә теләгән фекерҙең әрәсәһе шунда: баланың эске донъяһын тәрбиәләү атай-әсәйҙең иң мөһим, мөҡәддәҫ бурыстарының береһе. Ә был донъяға инеүҙең иң ышаныслы юлы - бала күңелен аңлау. Бала күңелен аңлауҙың һыналған ысулдарының береһе - уның уйынына ҡарата иғтибарлы булыу. Һүҙ ыңғайында әйтеп китеү урынлы булыр: ғаиләлә ишле, тиңерәк үҫкән балалар үҙҙәре уйлап сығарған был донъяларында онотолоп-бирелеп уйнай һәм тап ошондай уйындар аша уларҙа татыулыҡ, ярҙамсыллыҡ, бер-береңде аңлау кеүек нотоҡ уҡып ҡына һеңдереп булмай торған ҡиммәттәр тәрбиәләнә.***

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ҺАБАҠТАР

# КӨНСӨЛЛӨК АРАЛАРҘЫ НЫҒЫТАМЫ?

**Элегерәк, мин бала саҡта, йыш ҡына радионан "Ҡатын алдым көләс тиеп. Ул - көнсөл булып сыҡты. Тап бына шул холҡо менән Тынғы бирмәй йонсотто..." тип бер шаян йырҙы йырлағандарын ишеткеләй торғайным. Миңә, бала кешегә, ул тик мәҙәк кенә һымаҡ тойола ине. Әммә хәтһеҙ тормош юлы үткәс, тирә-яғыма, таныш-тоноштарыма ҡарап, ғаиләләге саманан тыш көнсөллөктөң ни тиклем насар нәмә икәнлеген аңлай башланым.**



Интернетта Лена Хәйруллинаның "Артыҡ көнсөллөгөм арҡаһында үҙ бәхетемде үҙем емерҙем" тип аталған бер мәҡәләһен уҡып тетрәндем. Инде олпат йәштәрҙә булған Рәмзиә исемле ханым (исемдәр, моғайын, үҙгәртелгәндәр) утыҙ йылдар элек үҙе менән булған ваҡиға хаҡында авторға эс серен сисә. Ирен - Хәйҙәрен һис сәбәпһеҙ ҡыҙғана торған ғәҙәте булған был гүзәл заттың. Бер мәл Хәйҙәр поликлиникала ун йылдай күрешмәгән, үҙенең улын ҡалаға дауаханаға алып килгән курсташы (әлбиттә, ҡатын кеше) менән осрашып, уны өйөнә сәйгә алып ҡайта. Ҡатыны Рәмзиә, көнләшеп, оло ғауға ҡуптара, иренең битенә төкөрөп, әлеге ҡатындың сәсенә йәбешә... Ҡатынының был ҡылығына асыуланған Хәйҙәр шул мәл өйөнән сығып китә. Бөтөнләйгә. Хәйҙәр аҙаҡ икенсе бер ҡатын-ҡыҙға өйләнеп, матур, бәхетле йәшәп алып китә. Ә Рәмзиә ханым үҙенең әлеге ҡылығы өсөн ғүмер буйы үкенеп йәшәй. Үҙе әйтмешләй, "гәзит аша булһа ла, әлеге һис бер ғәйепһеҙ ҡатын алдында ғәфү үтенергә" ҡарар итә...

Ошо хаҡта уҡыған бер кем дә был хәлгә битараф ҡалмағандыр, моғайын. Мин шәхсән Хәйҙәрҙең курсташын өйгә алып ҡайтыуын уларҙың яҙмышы тип юранам. Аллаһ Тәғәлә тап бына ошо осраҡты Хәйҙәргә көнсөл Рәмзиәһенән ҡотолорға сәбәп итеп ебәргәндер, тип уйлайым. Бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с): "Әгәр бераү менән бер хәл булды икән, ул хәлдең булмай ҡалыуы мөмкин түгел ине. Ә инде кешене берәй хәл ситләтеп үтте икән, был хәлдең булыуы мөмкин түгел ине. Сөнки был - Аллаһ Тәғәләнең әлләҡасан яҙып ҡуйған тәҡдире. Бына ошо хаҡиҡәтте танымай тороп, кеше иман килтергәндәрҙән булмаҫ", - тип әйткән бер хәҙисе лә бар бит.

Көнсөл кеше менән йәшәү ғәйәт ауыр икәнен дә аңлау кәрәк. Быңдай тормош һис кенә лә матур була алмай. Шуға ла ҡарамаҫтан, бәғзе бераү ғүмер буйы хәләленең шундай холҡона сыҙап йәшәй, балалары хаҡына ғаиләһен ташлап та китә алмай. Ғаилә бәхете өсөн үҙенең бәхетен "фиҙа ҡыла" тип әйтергә лә булалыр. Ә баяғы һөйләнгән осраҡта Хәйҙәр ифрат та уңай ҡотолған Рәмзиәһенән. Теге курсташ ҡатындың килеүе лә тап-таман ғына булған. Барыбер килешеп, бәхетле йәшәй алмаҫ ине улар.

Үҙем табип булараҡ, Рәмзиәнең ир ҡыҙғана торған холҡон хатта ниндәйҙер бер йәшерен сир тип һанарға ла булалыр тип уйлайым. Медицинала "патологическая ревность" тип аталған термин бар. Медицина институтында уҡығанда, профессор-психиатр ошо темаға бик ҡыҙыҡлы лекция уҡығаны хәтеремдә. Көнсөллөгө хаттин ашҡан ҡатын-ҡыҙ ирен хатта үҙенең яҡын ғына туған апай-һеңлекәштәренән дә ҡыҙғанып, һәр саҡ өйҙә бола ҡуптарыусан. Ә инде ире менән бер кабинетта эшләгәндәр араһында берәй буйҙаҡ ҡатын бар икән, ғаиләлә ығы-зығы мәртәбәләргә йышая. Өҫтәүенә, кабинетташ коллегаһы сибәр ҙә булһа - бөттө баш! Бынан тыш, фатирына йәшерен видеокамералар ҡуйҙырып, йә булмаһа, икенсе бер таныштан ялларып, ире (йә ҡатыны) артынан күҙәтеү ойошторған факттар ҙа аҙ түгел бит. Быңдай күренештәр барыһы ла әлеге сирҙең симптомдарын хәтерләтә.

Нисек кенә булмаһын, ҡыҙғаныу һис кенә лә ғаиләне нығытмай. Бер һиңары көнсөл булған парҙың берәй мәжлескә барыуы, ҡағиҙә булараҡ, һәр саҡ "бола" менән тамамлана. "Берәй бисәнең аяғына баҫып ултырмаймы икән" тип, иренең аяғын өҫтәл аҫтынан ҡапшап, тикшереп ултырған, хәләл ефетенең һәр һүҙен контролгә алып, ҡайтҡас гел генә "вайна" күтәргән бер ҡатынды беләм. "Шуға ҡараның", "быға йылмайҙың", "тегегә шулай тип әйттең" тип, өйгә ҡайтҡас, игәүен дауам итә ҡатын.

Әгәр "ҡыҙғаныулған" ир ҡыҙыуыраҡ икән - был ҡатын үҙе лә рәнйетелеүҙән башы сыҡмаясаҡ (Аллаһ һаҡлаһын!), әммә ғәҙәтен барыбер ҡуймаясаҡ. Саманан тыш ҡыҙғаныусан кешене яҡшылыҡ менән дә, ҡурҡытып та - бер нисек тә төҙәтеп булмай шул. Бына шуны ваҡытында аңлаған бәғзе бераү үҙенең яртыһынан иртәрәк ҡотолоп китеү сараһын күрә. Юғиһә, ҡартайғас та дауам итә быңдай ығы-зығы. Ҡайһы бераүҙәр олоғайғас, балалары үҫеп, аяҡҡа баҫҡас, айырылышып китә.

"Саманан" тип әйтеүем шул - ниндәйҙер кимәлдә көнләшеү тигән нәмә бөтә кешелә лә була ул, әммә һәр нәмәлә сиктән сыҡмау кәрәк. Бәйғәмбәрҙең ҡайһы бер ҡатындары араһында ла эске көнләшеү тигән тойғо кисереү булмаған түгел. Әммә шундай осраҡта уларҙың һәр ҡайһыһы нисек тә хәләл ефетенә көндәштәренә ҡарағанда ныҡыраҡ оҡшарға тырышып, иң беренсе нәүбәттә үҙҙәрен яҡшы яҡҡа үҙгәртергә ынтылған. Көнләшеү менән көнләшеү араһында бына ниндәй айырма! Аллаһ Тәғәләгә ныҡ ышанған был ҡатындар бер-береһенә яла яғыу һымаҡ яуызлыҡ ҡылмаған. Хатта ситтәр шундай ғәйбәт-фәлән сығарһа, бер-береһен яҡлашып булғандар. Шәриғәт ҡушыуына ярашлы, Бәйғәмбәр ҙә ҡатындарына гәҙел мөнәсәбәттә булған, береһенә лә өҫтөнлөк бирмәгән. Әлбиттә, бөгөнгө көндә күп ҡатынлылыҡ беҙҙең илдә законлаштырылмаған, бәлки был килтергән миҫал бигүк урынлы ла түгелдер. Шулай ҙа, көндәштәрҙең татыу йәшәү мөмкинлегенә бер миҫалды килтерә алам. Минең өләсәйем Ғилмияза (уҙған быуаттың егерменсе йылдары) бүһер менән сирләп киткәс, әле генә ҡырҡтан үткән ҡартатайыма: "Бабай, минең хәлде күреп тораһың - хәҙер ҡатынлыҡ бурысымды үтәй алырлыҡ хәлдә түгелмен (бында ул бала табыу мөмкинлеген күҙ уңында тотҡандыр). Икенсе ҡатын алһаң, үҙеңә лә, миңә лә еңелерәк булыр ине..." - тип кәңәш иткән. Ҡартатайым Сафура исемле инәйҙе алғас, был көндәштәр ныҡ татыу йәшәгән. Сафура инәйҙән тыуған улының балалары менән беҙ бөгөнгө көндә аралашып йәшәйбеҙ, әлхәмдүлилләһ...

Көнләшеүселәр булған ғаиләлә еңеүсе һәм еңелеүсе булмай. Быңдай хәл икеһе өсөн дә - оло бәлә. Кемгәләр ғәжәп тә тойолор, әммә минең ныҡлы инаныуымса, барыбыҙҙың күҙ алдына ғәйәт кире образ булып баҫҡан әлеге Рәмзиә ханымды... һис һүҙһеҙ ғәфү итеү кәрәк (тик утыҙ йыл элек тарҡалған ғаиләне ҡабаттан аяҡҡа баҫтырыуҙы күҙ уңында тотмайым). Әҙәм балаһы төрлө була бит. Кемдер тиҙ генә ҡыҙып барыусан, икенселәр саманан артыҡ тыныс, хатта вайымһыҙ йә ялҡау булған һымаҡ, әлеге ҡыҙғаныуҙы бәғзе бер кеше холҡондағы үҙенсәлек тип тә ҡарау дөрөҫ булалыр. Рәмзиә ханымдың үкенеп һөйләүенән күренеп тора: үҙенең хатаһын аңлаған ул, һуңлап булһа ла. Икенсенән, ваҡытында үҙенең шул "ауырыу өйәнәге" сәбәбенән, ирен - Хәйҙәрен, үҙенән бушандырып, бәхетле иткән был гүзәл зат. Халҡыбыҙҙа "Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә - ҡатын" тигән әйтем ошо осраҡҡа ла, бәлки, тап киләлер. Минең менән килешмәгәндәрҙең булыуына ла шигем юҡ, уларҙы ла тыңларға әҙермен.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*✓ Тертләп туҡтаған эҙәрләүсенең икеләнгәнен тойоп, яугир ҡапыл һарай яғына ынтылды. Ҡорбанынан быңдай етеҙлек көтмәгән аусы автоматынан атып ебәреүгә ул, кемдер аяҡ салып йыҡҡандай, мәтәлләп барып төштө.*






Маңлайҙан ағып төшкән һалҡын тир күҙҙе томалай. Снаряд умырып алған бурбайҙан аҡҡан ҡан берцыға тула. Бронежилеттың күнегелгән ауырлығы аҙым һайын арта бара, яурындарҙы баҫа. Яралы кейек һымаҡ аҡтыҡ көсө менән һаман алға ынтылған яугир үҙенең тоҙаҡта икәнен, ҡулсаның ҡотолғоһоҙ ҡыҫыла барғанын тоя. Әммә үлемесле хәүеф янағанда ҡайҙандыр тәрәндән, күҙгә күренмәгән тамырҙарҙан ҡалҡып сыға торған ҡеүәт уны туҡтауһыҙ алға ҡыуалай. Ә аусының аҙымдары еңел: гүйә, аяҡ аҫтындағы ҡырсын таштарҙы ҡыштырҙатып, океан ярына иртәнге күнекмәгә сыҡҡан. Шлемына беркетелгән видеокамера "кешегә һунарҙы" төшөрөп бара. Пальмалар аҫтында, төнгө океанға теклəп, хәмер уртлай-уртлай, дуҫтарын көнләштереп һөйләргә хәтәр мажара... Ул ҡорбанын талсыҡтырып, "тиреһен боҙмай" ғына терелəй алырға ниәтләй, шуға күрә ашыҡмай: "урыҫҡа һунар"ҙың һәр минутынан кинәнес ала. Шуныһы йәл: ҡорбаны ҡарт айыу һымаҡ килбәтһеҙ, пантера һымаҡ сос, төлкөләй хәйләкәр, арыҫлан һымаҡ хәүефле булһа, фильм ҡыҙығыраҡ булыр ине. Хәйер, "айыу" дошмандарына ҡаршы ҡаһарман торҙо, автоматында патрондары бөткәнгә тиклем ҡамауҙан йырып сығырына өмөтөн юғалтманы. Тик бушҡа ғына. Күп тә үтмәҫ, ул һөрлөгөп йөҙтүбән барып төшөр. Шул саҡ аусы автоматы менән төрткөләп, уны салҡан әйләнергә мәжбүр итер, аяғы менән түшенә баҫып, ә камера мәрхәмәт ялбарған ҡыҙғаныс күҙҙәрҙе эре планда төшөрөп алыр. "Veni, vidi, vici"! Килдем, күрҙем, еңдем! Был тамашаға шундай атама бирергә булыр ине!

Ә яугир үҙенә һунарҙың ахыры етеп килгәнен аңлай. Тирә-яҡта атыш һирәгәйҙе. Тимәк, дошман әҙерләгән тоҙаҡ ныҡлап томаланды. Хәйер, һалдат һаман һайлай ала: әсирлек йә үлем! Хурлыҡлы әсирлеккә ҡарағанда үлем - ҡотолоу. Ә ҡотолоу яҡын - ҡул һуҙымында. Тик ҡаймыҡҡан яурын бәләкәй сумкалағы һуңғы гранатаны алырға ирек бирмәй, һәлберәп торған ҡулдың көсө юҡ. Пуля, броniктан үтмәһә лә, ҡаты имгәткән. Шуға күрә бер минутҡа ғына, хатта яртыһы ла баштан ашҡан, туҡтап аулаҡта ҡалырға кәрәк. Саҡ ҡына... Саҡ...

Күҙ ҡырыйы менән тыҡрыҡты абайланы. Аяҡтар шунда ҡайырылды. Эргәлә янып торонбаштары ғына ҡарайып ҡалған йорт, баҡсала снаряд ярсыҡтары сәрпәкләгән ағастар, ҡойма ҡалдығы... Ҡойма бейек түгел, бил тәңгәле. Башында бер ниндәй ҙә уй юҡ яугирҙың, ә кәүҙәһе тартылған кереш һымаҡ көсөргәнеп, үҙен-үҙе шул ҡойма аша ырғыта. Ҡоймаға һыйынып сумкаһын ҡапшай. Ҡалтыранған бармаҡтары менән асырға маташҡан арала аусы килеп тә еткән: өҙөк-өҙөк һулышы ишетелә, аяҡ аҫтында быяла ярсығы, кирбес ватыҡтары шығырҙай. Яп-яҡын, ауыр, уҡшытҡыс еҫе борҡой - амфетамин, ахыры. Арыу-талыу белмәүенең сәбәбе шунда!

Автоматтың затворы шыҡылданы. "Бөтәһе лә бөттө!" Шул саҡ алыҫ түгел граната шартланы. Пулемет ата башланы. Тимәк, кемдәрҙеңдер һаман да ҡаршы торорға форсаты бар! Аусының рацияһы телгә килергә маташып ҡыштырҙаны ла ҡолаҡ ярғыс сәрелдәү ишетелде: "Джон! Джон! Һелп ми! Һееелп!" Ҡысҡырыусының тауышы, тамағына ҡан тығылғандай, мөлкөлдәп өҙөлдө. Тертләп туҡтаған эҙәрләүсенең икеләнгәнен тойоп, яугир ҡапыл ҡалҡынды ла ихата аша ярым емерек һарай яғына ынтылды. Ҡорбанынан быңдай етеҙлек көтмәгән аусы автоматынан атып ебәреүгә ул, кемдер аяҡ салып йыҡҡандай, мәтәлләп барып төштө. Ошо уны үлемдәнме, хурлыҡтанмы йолоп алды. Пулялар ямғыры, өҫтөнән һыҙғырып үтеп, һарай таҡталарына барып ҡаҙалды. Күпмелер һеңгәҙәп ятты яугир... Тыҡрыҡтан күмәк аяҡтарҙың йүгерешеп уҙғанын, пулемет тыҡылдағанын, граната шартлағандан һуң тынып ҡалғанын, аҡырышҡан, һүгенгән тауыштарҙы ишетеп, яйлап үҙенә килде. Бер мәлде көслө ҡулдарҙың кейеменән матҡып тотоп, һарай эсенә һөйрәгәнен тойҙо.

- Тереме? - тип һораны таныш тауыш. Башҡортсалап...

- Теремен, - тип шыбырҙаны яугир. - Иплəп, егеттәр. Яурын ҡаймыҡҡан.

Салҡан әйләндереп һалдылар.

- Һыу...

Башын ҡалҡытып һыу эсерҙеләр.

- Һеҙ иҫән... - тип ҡыуанып шыбырҙаны яугир. Һарай тишек-тошоҡ булһа ла, тыштан ингәс, күҙ күрмәйерәк тора. Ул арала тилбер ҡулдар тәнен ҡапшай.

- "Шырмый"...

- Эйе, "Даян" абзый. "Мамай" ҙа, "Тарпан" да, "Геродот" та бында. Хөрмәт абзый "двухсотый", минән башҡалар "трехсотый"...

Ауылға тәүгеләрҙән булып өсәрләп-өсәрләп ингән ике төркөм ине был.

- Ә беҙ һеҙҙе һәләк иттек тип уйлағайныҡ. - Бронежилетын систереп маташҡан "Шырмый"ҙың ҡанға еүешләнгән йәбешкәк кейеменә ҡағылып һиҫкәнде.

- Минең ҡан түгел... - тине егет уны һүҙһеҙ аңлап. - Хөрмәт абзыйҙыҡы.

- Мин "Торба"ға абынғанмынмы ни?..

"Эйе, ул", тип баш һелктеләр.

- Шунда йығылмаһаң, бөтә пулялар ҙа һинеке булыр ине.

- Беҙгә тоҙаҡтың төбөнә үк инергә ирек биргәндәр. Һеҙҙең төркөмдәр килеп, атыш башланғас, беҙ тылда тороп ҡалдыҡ. Башта ҡыҙыуға тура килде. Аҙаҡтан һеҙгә әүрәнеләр. Һеҙҙең алыш арҡаһында ошоғаса именбеҙ. Боекомплекттар бөткәс, беҙгә йәшенергә ваҡыт бирҙегеҙ, - тип һүҙгә ҡушылды "Мамай", ҡанлы берцыны һаҡ ҡына систереп. - "Тарпан"ға ныҡ эләкте, "Геродот"тың башы яралы, һөйләшә алмай.

- Бурбайҙан ҡаның ныҡ аҡҡан. Ыштан балағың лысма, - тине "Мамай".

- Абзый, йәй уртаһында кем балаҡлы ыштан кейеп йөрөй инде, - тип бурылданы "Шырмый".

- Йырт та ҡуй! - тип ыңғырашты яралы.

- Әйтеүе еңел. Хатта ныҡ! СССР заманынан тороп ҡалғандыр был!

Быға тиклем ҡырын ятҡан килеш һарай стенаһындағы ярыҡтан урам яғын күҙәткән "Геродот", шымығыҙ, тигәнде белдереп ҡул һелтәне.

- Теге бәрей килә. - Сабир ярыҡтан ҡарай һалды ла ишек янында һөйәп ҡуйылған һәнәккә тотондо.

Бая эшен теүәлләргә өлгөрмәгән аусы кире әйләнеп килгән. Автоматын әҙер тотоп, һаҡ ҡына атлай. Атып төшөрөлгән кейекте еҫкәнеп эҙләгән һунар эте шикелле тирә-яғына ҡарап, туҡтап-туҡтап ала. Йөҙтүбән йығылған яугирға аяғы менән тибеп ҡараны, шул уҡ ваҡытта һарай тирәһен дә байҡаны.

- Нимә, ҡорбаныңа ҡарап туймайһыңмы? - Күрше йорт яғынан кирбес, быяла ватыҡтарына шатор-шотор баҫып, бер дәү әҙәм килде лә мәйетте әйләндереп һалды. - Ҡаны аҡҡан ғына, - тип һыҙғырып ҡуйҙы. - Монголоид.

- Үлтергәнемә ышанып бөтмәгәйнем, - тине быныһы, көслө акцент менән. - Терелəй ҡаптырмаҡсы инем. Кейн яраланып саҡырғас, быны ашығыс ҡына тишкеләнем дә, унда йүгерергә тура килде.

- Һәйбәт эш, - тип хупланы дәү әҙәм. - Бәхете - дөмөккән. Ярай, күңел асырға былай ҙа байтаҡ ҡаптылар, - тип хахылдап ҡуйҙы. - Русняға һунар хәтәрме? Инде шәп кино буласаҡ! - тип ымланы ул шлемдағы камераға. - Күңелеңде киң тот, кино дауам итә. Боҫоп ятҡандарын төтәҫләп сығарғанда күрерһең әле. Хәҙергә эләккәндәрен ҡурайыҡ.

Уның һүҙен ҡеүәтләгән һымаҡ, урам яғынан аҡырышҡан, һай-һайлап ҡысҡырған тауыштар ишетелде. Тамашанан ҡоро ҡалмаҫ өсөн был икәү шунда йүгерҙе. Ҡойма яғына барып еткәс, аусы кире боролоп, һарай яғына автоматтан оҙон очередь бирҙе. Ә алдан барған хохолдың:

- Я балдею... - тигән ҡәнәғәт тауышы килеп етте.

- Уфф, - тын да алмай ҡатып ҡалған Сабир тәрән һуланы. - Рәхмәт инде, Хөрмәт абзый, беҙҙе тағы ла ҡотҡарҙың.

- Һиҙә был бәрей!

- Әгәр ҙә был гоблин килеп сыҡмаһа, танауын тығыр ине, бында еҫкәнеп...

- Йөҙө ҡотһоҙ, зәғифтеке кеүек... - тине яугир. - Атмайынса байтаҡ эҙәрләп килде.

- Метамфетамин, - тип яуапланы Байсар. - Уларҙың йөҙө шулай ҡотһоҙлана, һаҫыҡ еҫ аңҡып тора. Чечняла осраштырҙылар. Бөтәһе лә наркота аҫтында, улар әле арыу-талыу белмәй, эйфорияла. Күрҙегеҙме, ниндәй һиҙгер. Бер нисә әшнәһен эйәртеп, теләһә ҡайһы ваҡытта әйләнеп килеүе бар.

Ул арала бер-бер артлы ике ҡабат һаңғырау ғына атыу ишетелде: кемдер үҙәк өҙгөс әрнеп ҡысҡырып ебәрҙе. Эсбауырҙарҙы аҡтарып, һеңерҙәрҙе һурып сығарырлыҡ, йән эйәһен яратылғандан алып оҙатып килгән мәңгелек ғазап ине был ауаздарҙа.

- Мин беләм шикелле был егетте, - ярыҡтан күҙен алмаған Сабир ап-аҡ булып был яҡҡа әйләнде. - Яңыраҡ килгәйне... Шаян... Тубығына аттылар шикелле...

Аҡырышҡан, һүгенгән, хахылдаған, тағы ла әллә ниндәй имәнес ауаздар дауам итте: "Слава Украине!", "Слава Украине!" Ҡабатла!"

- Унда беҙҙекеләр байтаҡ... - тине "Мамай".

- Тоҙаҡҡа күп эләктерҙек, тине бит хохол. Их, беҙҙең арттағылар ергә тигеҙләһенсе был ауылды.

Күп ҡан юғалтыуҙанмы, ауыртыуҙы баҫҡан укол касафатынанмы, яугир тәне таралып, ойоп барғанын тойоп, ҡалҡынып ултырҙы.

- Туғаным, - тип өндәште ул Сабирға. - Анау бәләкәй сумканы алып бир әле. Беҙгә һөйләшеп алырға кәрәк, егеттәр. - Уның тауышында тыныс тәүәккәллек тойоп, барыһы ла шымды. - Мин әсир төшөргә йыйынмайым.

Бөтәһенең дә мейеһен кимергән хәүеф әйтелде. Бер килкегә шым торҙолар.

- Һуңғы патрон? - "Мамай"ҙың һорауында үкенес тә, әсенеү ҙә бар.

- Һуңғы граната... - Һаман да ҡырын ятҡан яугир ҡулындағы бәләкәй сумкаһына ымланы.

Һуңғы граната яҙмышты һайлау мөмкинлеге бирә ине. Үлем - әсирлек ғазабынан ҡотолоу. Байсар Чечнялағы хеҙмәттәшен иҫенә төшөрҙө. Засадаға эләгеп, яралы килеш әсирлеккә төшкән егетте ай ярым тигәндә осраҡлы ғына ҡотҡарып алдылар. Киң яурынлы, мыҡты, көләс егет тере мәйеткә ҡалғайны. Тәнендә ҡағылырлыҡ урыны юҡ, күмкүк.

Дүҫ инеләр, тағы бер егет менән госпиталгә хәл белергә барҙы. "Үҙегеҙҙе һаҡлағыҙ, егеттәр. Абай йөрөгөҙ. Тотҡонда геройҙар юҡ. Иртәме-һуңмы, һәр кемде һындыралар, - тине һалдат. - Бер генә айырма: кем күпмегә түҙә? Бөтәһен дә һындыралар. Үҙеңдең кемдеңдер аяулы балаһы булғаның, "кеше ғорур яңғырай", тип аҡыл һатҡаның язалай башлағандың тәүге сәғәтендә үк онотола. Бер генә нәмәне төшөнәһең: һин буҡ тулы тире ҡапсыҡ ҡына. - Ауыр һүҙҙәренән былайыраҡ, үлек күҙҙәре менән аша ҡарап, ирен ситен ҡыйшайтып йылмайыуы ҡурҡыныс ине. - Тәнеңдең түҙгеһеҙ ауыртҡанын, ул ауыртыуҙың аҡылдан шаштырырлыҡ ғазабын бер минутҡа ла онотмайһың. Ә ғазаплаусы нисек итеп ауырттырырға белә, аҡыртыуынан ләззәтләнә. Һинең хәлдә ҡалһа, үҙенең дә тап ошолай үрһәләнәсәген белгәнгә күрә айырыуса ярһып ғазаплай".

Һәйбәт егет ине. Шул тиклем йәл булды: госпиталдә саҡта уҡ үҙенә ҡул һалған. Хеҙмәттәштәрҙең күбенеһе быға ғәжәпләнгәйне: нишләп улай - азатлыҡҡа сыҡты, һауығып килә, тиҙҙән дембель. Шунда командирҙары, уттыһыуҙы кискән хәрби офицер, әйткәйне: "Бер сик бар. Шул сикте аша атлап үтеп, һин тере ҡала алаһың, әммә йәшәй алмаясаҡһың". Ул саҡта Байсар был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлап та етмәгәйне. Әле иһә үҙенең тап ошо сиккә килеп еткәне тураһында уйланы.

**(Дауамы бар).**

✓ *Һурнаҡ - ул ялҡау ҡорттарҙан торған бәләкәй күс. Ул июнь башында ағас олононда үҙенә оя таба. Әммә был ояны июль аҙағында ташлап сығып китә. Шунышы аптырамалы, йәй буйы эшләмәй тик ята был ҡорттар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МУЙЫН АУЫРТЫУЫ...

## күңел торошо билдәһе

■ Ғалимдар куркума нигеҙендә яңы препарат уйлап тапҡан. Ул инсульттан һуң тиҙерәк һауығырға мөмкинлек бирә. Ғалимдар әйтеүенсә, был дарыуҙы ауырыуҙы иҫкәртеү маҡсатында ҡулланырға ла буласаҡ. Яңы дарыуҙың төп тәьҫир итеүсе матдәһе булып куркумаға сағыу төҫ биреүсе полифенол - куркумин тора. Ул ялҡынһыныуға ҡаршы тора һәм антиоксидант тәьҫиргә эйә. Яңы дарыуҙы инсульт кисергән кешенең организмына өс сәғәт эсендә индереп өлгөргәндә, баш мейеһе күҙәнәктәрен тере килеш һаҡлап алып ҡалырға мөмкин, ти ғалимдар. Был тәмләткесте аш-һыу әҙерләгәндә лә йышыраҡ ҡулланыу зарарлы булмаясаҡ.

■ Дархэм университеты неврологы Аманда Эллисон белдереүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда һалҡын тейҙереү һәм киҙеү симптомдарын ауырыраҡ кисерә. Доктор әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттең баш мейеһе үҫешенең бер осоронда айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Күп күрһәткестәр, шул иҫәптән, тән температураһы өсөн яуап биреүсе баш мейеһе өлөшө ир-егеттәрҙә тестостерон бүленеп сығыу һөҙөмтәһендә тиҙерәк үҫешә. Мейенең был өлөшө организмға инфекция инеүенә шунда уҡ тәьҫир итә һәм үҙенең эшен башлай, һөҙөмтәлә тән температураһы күтәрелә.

■ Британия ғалимдары йоҡоноң ниндәйҙер ҡарарҙар ҡабул итеүҙә мөһим роль уйнауын дәлилләгән. Йоҡлаған ваҡытта кеше аңға ябыҡ булған мәғлүмәт ала икән. Тикшеренеүҙәрҙә 27 ир-егет һәм 34 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Улар бер-бер артлы ябай һәм ҡатмарлы мәсьәләләр сисергә тейеш була. Ҡатнашыусылар мәсьәләләр сисеү арауығында ятып йоҡлап алыу мөмкинлегенә эйә була һәм ғалимдар асыҡлауынса, йоҡлап алыусылар башҡаларға ҡарағанда ҡатмарлы мәсьәләләрҙе күберәк сисеүгә өлгәшә.

■ Немец ғалимдары дәлилләүенсә, әгәр ҙә муйын ауырта икән, был физик түгел, ә психологик проблема. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда иғтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының - депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

■ Коннектикута университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, организмға саҡ ҡына һыу етешмәй башлаһа, шунда уҡ кәйеф насарая, көсһөҙлөк барлыҡҡа килә, фекерләү ҡеүәһе түбәнәйә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе профессор Лоренс Е. Армстронг фекеренсә, ял иткәндә лә, компьютер алдында ултырғанда ла һыу эсергә кәрәк. "Һыуһау тойғоһо беҙ 1-2 процент шыйыҡлыҡты юғалтҡас ҡына барлыҡҡа килә. Әммә был ваҡытҡа организмда һыуһыҙлыҡ һөҙөмтәһендә кире эҙемтәләр башланған була", - ти профессор. Бындай хәл килеп тыумаһын өсөн көнөнә 2 литр һыу эсергә кәрәк.

ҒАЛИМ ҺЫҒЫМТА ЯҺАЙ

# НИМӘ УЛ ҺУРНАҠ,

## ул ялҡау ҡорттар күсе генәме?

**Күптән түгел берәү миңә ошолай өндәшеп ҡуйҙы: "Баҡтиһәң, февраль башында фән өлкәһендә эшләгәндәр һөнәри байрамын билдәләй икән. Кисә үлһәм, бөгөн белмәҫ инем (тора биргәс, һорай ҡуйҙы). Фән кешеләрен әйтәм, юҡ-бар нәмә менән булышып ваҡыттарын бушҡа үткәрмәйҙәр микән улар?.."**
**Шунан үҙ алдына, әммә миңә ишетерлек итеп өҫтәп ҡуйҙы: "Эштәренең һөҙөмтәһен бер күрергә ине..."**

Һиҙеп торам, төплө яуап көтә ул минән. Шуға күрә мин, фән өлкәһендә шулай эшләйҙәр, былай эшләйҙәр, тип әйтергә ашыҡмайым. Бындай ҡоро яуаптан фәтеүә булмаясаҡ. Ул бушлыҡҡа ғына осасаҡ. Ә ниндәй миҫал килтерергә була? Уйлап-уйлап торҙом да, мин уға яуапты барыбыҙға ла таныш солоҡсолоҡ кәсебендә аңлатырға булдым. Ошо мәлдә кәңәшсем уфтанып ҡуйҙы. Бер балыҡ башын күпме сәйнәргә була, тигән уйы хатта йөҙөнә сыҡты. Ә шулай ҙа, мәйтәм, бына ошо һорауға яуап бир әле.

- Нимә ул һурнаҡ?

Кәңәшсем миңә, һурнаҡты ла белмәй икән был, тигән ҡараш ташланы ла ошолай яуап бирҙе.

- Һурнаҡ - ул ялҡау ҡорттарҙан торған бәләкәй күс. Ул июнь башында ағас олононда үҙенә оя таба. Әммә был ояны июль аҙағында ташлап сығып китә. Шунышы аптырамалы, йәй буйы эшләмәй тик ята был ҡорттар. Балауыҙ һуҙмай улар, бал йыймай, бала тәрбиәләмәй. Ҡыҫҡаһы, ата ялҡауҙар. Хатта йүкә сәскә атҡан ваҡытта ла эшләмәйҙәр. Аптырарһың, ҡыҙыу эш мәлендә нисек сыҙап ял итеп яталарҙыр инде... Унын ҡарауы, осоуы шәп уларҙың. Кейәнән тегеләй-былай гөж килеп торалар. Уларҙың берҙәм геүләп осоуына хатта оҫта солоҡсо ла алданып ҡуя. Үҙегеҙ беләһегеҙ, биләм осоронда күсте ерҙән ҡарайҙар. Маңлайына усын ҡуйып, ҡорттарҙың геүләп осоуын күҙәтеп торған солоҡсо, Аллаға шөкөр, көслө күс ҡунған, тип ҡыуанып ҡуя. Әммә ул үҙенең алданғанын көҙ көнө генә асыҡлай. Тулы батман бал алырға өмөтләнгән солоҡсо... буш ояға текләп аптырап ҡала. Баҡтиһәң, һурнаҡ йүкә сәскә атып бөткәнсе ояны ташлаған була. Ялҡау ҡорттар, әҙәм ышандырып, ус аяһындай ғына балауыҙ һуҙғандар. Бер-ике семтем генә бал йыйған булғандар. Ә ояла ел уйнап тора. Ул буп-буш. Берәү әйтмешләй, әҙәм ыстырамы инде *(бер аҙ тын ҡалып торғандан һуң ул минән һорай ҡуя).* Йә, яуабым дөрөҫмө?

Мин уның менән ризалашып, башымды һелкеп ҡуям. Һе, тип эстән генә ҡәнәғәт йылмайып ҡуя минең әңгәмәсем. Ә шулай ҙа... Ә ни өсөн һурнаҡ бал йыймай? Ни өсөн балауыҙ һуҙмай? Нишләп бала тәрбиәләмәй? Һәм башҡаһы? Әммә был һорауҙарҙы мин уға бирмәйем. Сөнки уларҙы ишетеү менән әңгәмәсем көлөп ебәрер ине.

- Һуң әйтеп торам да инде мин уларҙы, ялҡауҙар, тип!

Ә шулай ҙа, тип уйлап ҡуям мин, бындай яуап үтә ябай. Сөнки тәбиғәттә бер нәмә лә бушҡа эшләнмәй. Шуға күрә лә һурнаҡтың да үҙ сере, үҙ тәғәйенеше бар. Ә ялҡаулыҡҡа килгәндә инде... Ул беҙгә, кешеләргә генә, хас сифат бит.

Бына ошо мәлдән башланып китә лә инде фән кешеһенең эҙләнеү-өйрәнеү эштәре. Уны аҙна-ун көн эсендә генә тамамлап булмай. Ваҡыты менән ай ғына түгел, тотош йыл үтеп китә. Бына минең осраҡта ла һурнаҡ буйынсағы эш апаруҡ оҙаҡҡа һуҙылып китте. Кемдән генә уның тураһында һорашмайым, "арба" урынынан ҡуҙғалмай ҙа ҡуя. Сөнки һәр ваҡыт яуап бер үк - һурнаҡ ялҡау ҡорттарҙан тора! Ә шулай ҙа нығыша торғас, яуапты таптым мин. Хәҙер үҙемдең асышты һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәм. Әлбиттә, минең һығымталар дөрөҫлөккә тап килмәүе лә бар. Шуға күрә, ниндәйҙер өҫтәмәләр булһа, уларҙы ихлас көтөп ҡалам.

***Эштең айышына төшөнөр өсөн тарих төпкөлөнә, Боҙлоҡ дәүеренә, төшөп китәйек. Был һыуыҡ осорҙа күп йәнлек-бөжәктәр, шул иҫәптән бал ҡорто ла, үлеүгә дусар була. Бөгөн ғалимдәр ошолай фаразлай. Бына бер мәл Боҙлоҡ яйлап сигенә башлай. Тәбиғәт йылына. Яңынан урмандар барлыҡҡа килә. Ерҙең йылы өлөшөндә һаҡланып ҡалған бал ҡорттары урмандарҙы яңынан үҙләштерә башлай. Күстәрҙең ышаныслы "өйө" булып, ағас ҡыуыштары иҫәпләнә. Бер мәл күстәр алыҫ Европанан беҙҙең Башҡортостан урмандарына килеп етә. Күстәргә бейек Урал тауҙары Себер тарафтарына сығырға мөмкинлек бирмәй. Һөҙөмтәлә бал ҡорттары беҙҙең урмандарҙа туҡталып ҡалырға мәжбүр була.***



*Солоҡ кейәһендәге бал ҡорттары*

Тарихҡа байҡау яһанык. Ә хәҙер минең эш һөҙөмтәләренә күсәйек.

1. Урмандарҙы үҙләштереү мәлендә ***һурнаҡ*** исеме алған күстәргә төп көс төшә. Уларҙы икенсе исем менән тәүге үтеүселәр тип атарға булыр ине. Сөнки улар урмандың әле үҙләштерелмәгән өлөшөнә тәүгеләрҙән булып оса. Һурнаҡтың төп маҡсаты - йәшәргә яраҡлы ағас ҡыуышы табыу һәм уны мөмкин тиклем йәшәрлек хәлгә килтереү. Бына шуға күрә һурнаҡ бал йыймай, балауыҙ һуҙмай, бала тәрбиәләмәй. Торлаҡты сүп-сарҙан таҙартыу еңел эш түгел. Шуға был мәлдә улар кейәнән геүләп осоп тора.

2. Һурнаҡ рәтләгән ағас ҡыуышы ***кәүерт*** тип атала.

3. Һурнаҡтарҙы осороусы тәғәйен бал ҡорто ғаиләләре була. Улар ***ырлыҡ*** тип атала. Бер ырлыҡтан сама менән унға яҡын һурнаҡ-күс айырылып сыға. Әгәр башҡа ҡорт ғаиләләре тәүҙә көслө, аҙаҡ көсһөҙөрәк күс айырһа, һурнаҡтарҙың көсө бер сама көсһөҙ була.

4. Тәүҙә һурнаҡ, ҡәҙемге күс һымаҡ, берәй ағас ботағына барып һырый. Унан бер нисә тиҫтә ҡорт ур-

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӘКИӘТЛЕ БАЛА САҠ!

**Әкиәт - бала саҡтың айырылғыһыҙ бер өлөшө. Уның аша бала күңеленә туған тел байлығы һеңә, тормошто әсә теле аша, башҡортса ҡабул итеү формалаша, холоҡ әүәләнә.**

Әкиәт һөйләү - меңәр йыллыҡ тарихы булған йола. Бала көнө буйы телевизорҙан йәнһүрәттәр ҡараһа ла, кис атаһы йә әсәһе һөйләгән әкиәттән баш тартмаясаҡ. Сөнки әкиәттә зәңгәр экрандар тәҡдим иткән әҙер образдар юҡ, уны тыңлағанда сабый хыялына ирек бирә, геройҙарҙы нисек теләй, шулай күҙ алдына килтерә, хатта әкиәттең аҙағы оҡшамаһа ла, бала уны үҙенең фантазияһын файҙаланып, үҙе теләгәнсә тамамлап ҡуя.

Туған тел аша рухлы, әхлаҡлы быуын тәрбиәләү, уларҙың телмәрен үҫтереү беҙҙең Өфө ҡалаһы Дим районындағы 75-се "Аҡбуҙат" башҡорт балалар баҡсаһының төп бурысы булып тора. Бөтә яҡтан да уңайлы шарттарға эйә булған балалар баҡсаһы белемгә ҙур ынтылыш,



✓ ***Урмандың үҙләштерелгән өлөшөндә тәүге ҡышты уңышлы үткәргән бал ҡорто ғаиләһе - бала ҡорт, икенсе йыл уңышлы ҡышлағаны - шәшәк ҡорт, өсөнсө һәм унан күберәк ҡышты ҡышлағаны ҡара ҡорт тип атала.***



мандың әле үҙләштерелмәгән өлөшөнә торлаҡ эҙләү өсөн осоп китә. Был ҡорттарҙы ***шәйләк*** тип атайҙар. Шәйләк ҡорттар яңы урында йәшәргә яраҡлы ағас ҡыуышы таба. Һәм кире осоп ҡайтып, был турала һурнаҡҡа "еткерә". Һурнаҡ һырыған урынынан күтәрелә һәм табылған оя яғына ҡарай осоп китә.

5. Ниндәй алыҫлыҡҡа оса һурнаҡ? Ололар миңә, һурнаҡ ете тау аша китергә һәләтле, тип яуап бирҙе. Тимәк, борон бал ҡорттары йыл һайын сама менән 14 саҡырым урманды үҙләштергән булған.

6. Һурнаҡ табылған ояны мөмкин тиклем ипкә-һапҡа килтерә. Яртылаш әйҙерләгән "өйҙө" йәй аҙағында ташлап сығып китә. Әлбиттә, һурнаҡ үлмәй. Ул йәшәү өсөн икенсе бер ҡорт ғаиләһенә барып һыйына. Был ҡорт ғаиләһе ***аҫау*** тип атала. Ул икенсе йыл, башҡа ҡорт ғаиләләренән айырмалы рәүештә, бер көслө күс айыра. Унан бик һирәк ике күс сыға. Ошо көслө күс туп-тура кәүерткә табан оса. Уны ыңғай таба һәм унда йәшәп алып китә. Бәлки, тигән фараз бар, һурнаҡ ҡорттар үҙен һыйындырған ҡорт ғаиләһенә көҙ көнө үк кәүерт тураһында "һөйләйҙер". Ә, бәлки, тигән фекер бар, икенсе йыл йәй көнө һурнаҡ күсте кәүерткә хәтлем оҙатып баралыр. Кем белә инде...

Төп һығымта - бал ҡорто донъяһында һурнаҡ мөһим урын алып тора. Әгәр улар булмаһа, урмандың яңы өлөшөнә осҡан күстәрҙең ниндәйҙер бер өлөшө үлемгә дусар булыр ине. Ҡасан оя табаһың әле! Ҡасан уны рәтләйһең! Шул арала йүкә сәскә атып бөтөүе лә бар. Ә былай бик отошло - күстәр яңы урында торлаҡ эҙләп йөрөмәй. Яртылаш әҙер "өйҙә" йәшәп алып китәләр.

7. Кәүерттә йәшәп алып киткән күс ***мөсәл*** тип атала. Ул тәүге йәйҙә, башҡа ҡорт ғаиләләренән айырмалы рәүештә, балды ҡыш сығарлыҡ кимәлдә генә йыя. Шуға балауыҙҙы күп һуҙмай. Етәрлек кенә кимәлдә һуҙа. Мөсәлдең төп эше - "өйҙө" тулыһынса тәртипкә килтереү, уны оҙон ҡышҡа яраҡлы итеп әҙерләү.

8. Киләһе йылдарҙа урмандың үҙләштерелгән өлөшөндә буш ояларҙы эҙләү, уларға күстәр ҡуныу эше дауам итә. Был осраҡта йәшәргә яраҡлы "өйҙәрҙе" эҙләгән ҡорттарҙы ***шәйбәк*** тип атайҙар. Улар, шәйләк ҡорттарҙан айырмалы рәүештә, ағас ҡыуыштарын ғына түгел, ә урманда һыбай, йә арбала китеп барған солоҡсоно ла эҙләй. Шәйбәк ҡорттар солоҡсоно балта һабында йә батман тышында йәбешеп ҡалған бал-балауыҙ еҫенән таба, тигән фараз, бәлки, дөрөҫлөккә тап киләлер. Күп кенә солоҡсоларҙың, буш солоҡто (түмәр-умартаны) рәтләй башлауым булды, ҡорттар биләп тә алды, тип һөйләгәндәрен миңә йыш ишетергә тура килде. Моғайын, күптәрҙең, түмәр-умартаны күтәргән мәлдә үк уға күс килеп ҡунды, тигән хәбәрҙе үҙҙәре лә ишеткәндәре барҙыр...



*Түмәр-умартаны күтәреү*

9. Урмандың үҙләштерелгән өлөшөндә тәүге ҡышты уңышлы үткәргән бал ҡорто ғаиләһе - ***бала ҡорт***, икенсе йыл уңышлы ҡышлағаны - ***шәшәк ҡорт***, өсөнсө һәм унан күберәк ҡышты ҡышлағаны ***ҡара ҡорт*** тип атала.

Һурнаҡ буйынса эш тамам, тип әйтергә лә була. Һөҙөмтә һәйбәт, тип уйлайым мин. Сөнки кәм тигәндә лә өҫтәмә рәүештә ун асыш яһарға насип булды. Һүҙ ыңғайында бал ҡорто ғаиләһенең ҡайһы үҙенсәлектәре тураһында ла яҙып китеү урынлы булыр.

10. ***Әскернә*** тип үтә уҫал бал ҡорто ғаиләһен атайҙар. Уларҙы һәр кем ҡарай алмай. Ояны асыу менән был бал ҡорттары шул хәтлем ярһыйҙар, хатта ваҡыты менән улар бер аҙна буйына тыныслана алмайҙар. Әскернәне айырым кешеләр генә ҡарай ала. Бал ҡортоноң телен белә, тип әйтәләр ундай кешеләр тураһында.

11. ***Тексәйгән ҡорт.*** Бындай ҡорттарҙы миңә лә күҙәтергә тура килде. Бик ҡыҙыҡ күренеш. Ояны асыу менән бал ҡорттары кәрәҙ сите буйлап теҙелешеп баҫа башлай. Мин дә күреп ҡалайым, тигәндәй, һәр кеме алданыраҡ урын алырға тырыша. Рәттәре хатта тығыҙланып китә. Бына ошо ҡорттар һиңә тексәйеп ҡарап тик торалар инде. Һине сағырға уйламайҙар ҙа. Төтөн бирһәң, бер аҙға юғалып торалар былай. Әммә шунда уҡ тағы килеп кәрәҙ ситенә баҫалар һәм һиңә тексәйеп ҡарап торалар.

12. ***Төкөгән ҡорт*** һиңә һөжүм итә. Әммә саҡмай. Башы менән һинең ҡулыңа килеп төкөй ҙә кире осоп китә. Аҙаҡ тағы кире килеп төкөй.

Ошо урында мәҡәләмде тамамларға булдым. Яҙа башлаһаң, яҙыр нәмә күп инде ул. Моғайын, фән кешеһенең эш һөҙөмтәһен бер күрергә ине, тигән үтенесте үтәй алғанмындыр. Ә шулай ҙа бәғзе берәү: "Ә нимәгә ул бындай өйрәнеүҙәр, бындай асыштар?" - тип әйтеп ҡуйыр. Бындай өйрәнеүҙәр кәрәк шул, тип яуап бирер инем мин. Бына, әйтәйек, солоҡсолоҡ кәсебе - ул беҙҙең тарих, ул беҙҙең ғорурлыҡ. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, үҙ тарихыбыҙға хөрмәт менән ҡарарға тейешбеҙ.

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**биология фәндәре докторы,**
**профессор.**

теләк менән килгән балаларҙың ҡанаттарын нығыта, һәләттәрен үҫтерә һәм уңыштарға өлгәштерә.

Беҙҙә байрамдар, иртәлектәр тик башҡорт телендә үтә. Ҡайһы бер балаларға был ҡыйынлыҡ менән бирелһә лә, улар бик теләп туған телгә ылыға, йырлайҙар, шиғыр һөйләйҙәр. Һөҙөмтәлә бәләкәстәрҙең тел байлығы, хәрәкәтсәнлеге һәм отҡорлоғо арта. Кескәйҙәргә милли йолаларыбыҙҙы, байрамдарыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе өйрәтеп, башҡорт халҡының үткәненә, бөгөнгөһөнә, киләсәгенә ҡыҙыҡһыныу уятабыҙ, халыҡтың рухи байлығына ихтирамлы ысын шәхес тәрбиәләйбеҙ.

Беҙ кескәйҙәрҙе баҡсаға килгән тәүге көндәренән үк тел серҙәренә өйрәтә башлайбыҙ. Төрлө һамаҡтар, шиғырҙар, әкиәттәр, йомаҡтар өндәрҙе дөрөҫ әйтеп өйрәнеүгә булышлыҡ итә. Балаларҙы башҡорт халҡының йолалары, милли кейеме, музыка ҡоралдары менән таныштырып, бейеү-йырҙарын өйрәнеп, уларҙың күңеленә сәнғәткә мөхәббәт уятабыҙ.

Шулай уҡ балаларға донья халыҡтарының әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләү һәм сәхнәләштереү беҙҙең балалар баҡсаһының мөһим эшмәкәрлек йүнәлеше булып тора. Бала өсөн әкиәт - ул фантазия, уйҙырма ғына түгел, ул уның өсөн ысынбарлыҡ. Әкиәт аша йәшәйеш, мөхәббәт, башҡалар тураһында ҡайғыртыусанлыҡ хистәре менән таныштыра алабыҙ. Был хистәр балалар өсөн әкиәти, улырҙың аңдары өсөн аңлайышлы, әммә ләкин әхләҡ тәрбиәһе, ысынбарлыҡ булып ҡала. Әкиәттең эстәлеге, геройҙар образдары буйынса фекер алышып, сағыштырыу алымдарын ҡулланып, беҙ балалар менән анализ яһарға ла өйрәнәбеҙ.

Беҙ әкиәттәр сәхнәләштереп, төрлө конкурстарҙа ла ҡатнашып, призлы урындар алабыҙ. Был сараларҙа ҡатнашыуҙа ата-әсәләрҙең дә ярҙамы бик ҙур. Улар костюмдар тегеүҙә, декорациялар әҙерләүҙә ихлас ярҙамлаша. Бына шулай итеп әкиәт илендә сәйәхәт иткәндә балалар тормош тәжрибәһе туплай, социаль күнекмәләр ала.

**Илүзә ХАЖИӘХМӘТОВА,**
**тәрбиәсе.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## "Урыҫ тәбиғәте тураһында"

Кижиҙа булғандар утрау буйлап, гүйә, гигант хайуандың һырты кеүек таштар теҙмәһе һуҙылыуын, моғайын, күргәндер. Ошо һырт эргәһенән юл үтә. Һырт йөҙәр йыллап барлыҡҡа килгән. Крәҫтиәндәр баҫыуҙарҙы таштарҙан - һарыҡташ һәм суйырташтарҙан таҙартҡан, һәм ошонда юл ситенә өйөп барған. Ҙур утрауҙың ҡараулы ғына рельефы барлыҡҡа килгән. Был рельеф быуаттар төпкөлөнән икәнлеген тояһың. Сәсәндәр ғаиләһе Рябининдар юҡҡа ғына бында быуындар буйы йәшәмәгәндер, уларҙан бик күп былиналар яҙып алынған.

Рәсәй пейзажы уның баһадир киңлегендә типкән кеүек, йә йомшара һәм тәбиғирәккә әйләнә, йә ҡуйыра һәм ауылдарҙа, ҡәберлектәрҙә, ҡалаларҙа кешесәрәккә әүерелә.

Ауылда һәм ҡалала ла һөрөлгән ерҙәге һыҙаттар ритмы дауам итә. Бураҙна бураҙнаға, бүрәнә бүрәнәгә, урам урамға. Ҙур ритмик бүленеүҙәр ваҡтары менән аралаша, бүленә. Береһе икенсеһенә талғын ғына үрелә.

Боронғо урыҫ ҡалаһы тәбиғәткә ҡаршы тормай. Ул ҡала яны аша тәбиғәткә тартыла. "Ҡала яны" (пригород) - был һүҙ ҡала һәм тәбиғәт тураһындағы күҙаллауҙарҙы тоташтырыу өсөн юрамал уйлап табылған һүҙ кеүек. Ҡала яны - ҡала эргәһендә, әммә ул тәбиғәт янында ла. Ҡала яны - ул ағаслы, ағас йортло ярым ауылса өйҙәрҙән торған ауыл. Йөҙәр йыл элек ул баҡса һәм ыҙмалары менән ҡала диуарҙарына, урға һәм соҡорға һыйынған, ул тирә-яҡтағы баҫыуҡырҙарға һәм урманға ла һыйынған һәм уларҙан бер аҙ ағасын, баҡсаһын, һыуын үҙенең быуаларына һәм ҡоҙоҡтарына тартып алған. Һәм былар барыһы ла йәшертен һәм асыҡ күренеп торған ритмдарҙа - түтәлдәр, урамдар, йорттар, бүрәнәләр, таш юл түмәрҙәрендә һәм күперҙәрҙә.

Урыҫтар өсөн тәбиғәт һәр ваҡыт азатлыҡ, иркенлек, сәхрә булған. Телде иғтибар итеп тыңлап ҡарағыҙ: иркендә йөрөү, иркенгә сығыу. Ирек - ул иртәнге көн тураһында хәстәрҙәр юҡлығы, ғәмһеҙлек, бөгөнгө менән йәшәү.

Киңлек һәр ваҡыт урыҫтарҙың йөрәк түрендә булған. Ул башҡа телдәрҙә булмаған төшөнсәләр һәм күҙаллауҙар булып үтеп ингән. Мәҫәлән, ирек азатлыҡтан нимәһе менән айырыла? Иркен ирек (воля вольная) - ул киңлек менән тоташҡан ireклек, бер нәмә менән дә сикләнмәгән. Ә бына һағыш төшөнсәһе, киреһенсә, ҡыҫынҡылыҡ, кешене киңлектән мәхрүм итеү төшөнсәһенә бәйле. Кешене ҡыҫырыҡлау - тура һәм күсмә мәғәнәһендә лә уны киңлектән мәхрүм итеү.

Иркен ирек! Был иректе хатта элмәк тағып, ат урынына егелеп, ҡайсаҡ аттар менән бергә арҡан буйлап барған бурлактар ҙа тойған. Арҡан буйлап, яр буйындағы тар һуҡмаҡтан барғандар, ә тирә-яҡта улар өсөн ireклек булған. Хеҙмәт ireкһеҙләй, ә тирә-йүндәге тәбиғәт иrekле. Һәм кешегә ҙур, асыҡ, донъяға киң ҡараш асырлыҡ тәбиғәт кәрәк булған. Шуға ла халыҡ йырҙарындағы ялан-ҡырҙарҙы яратам. Ирек - ул ҙур киңлектәр, улар буйлап барырға ла барырға, ҙур йылғалар ағымы ыңғайына әллә ҡайҙарға ағырға, иркен асыҡ урындар һауаһын һуларға, күкрәкте тултырғанса тының менән елде тартып алырға, баш осондағы күкте тойорға, теләһә ҡайһы яҡҡа ҡарай хәрәкәт итергә була.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ-АРА КЕШЕ КОСМОСҠА ОСҠАН КӨН



**12 апрель көнөн барыһы ла яҡшы белә - был көндә кеше беренсе тапҡыр йыһанға осҡан һәм ул - Советтар Союзы гражданы.**

Был айҡанлы тәүҙә 1962 йылдың 9 апрелендә СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән Космонавтика көнө иғлан ителә. Ә 1968 йылда ул халыҡ-ара кимәлдә билдәләнә башлай. Ә инде 2011 йылдан алып тағы ла Халыҡ-ара кеше космосҡа осҡан көн тигән атамаһы ла бар - Рәсәй башланғысы менән Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль Ассамблеяһында шундай ҡарар ҡабул ителә. Юрий Гагарин 1961 йылда "Восток-1" йыһан карабында Ер шары тирәләй беренсе тапҡыр осош яһай. Осош ни бары 108 минутлыҡ була, әммә йыһанды үҙләштереүгә көслө этәргес бирә. Бөгөн инде кеше йыһанды өйрәнеүен дауам итә, ниҙәр генә уйлап табылмаған. Шулай ҙа ғаләм сере тулыһынса асылып етмәгән әле.




*Йыһанға осҡан беренсе ҡатын-ҡыҙ*

*Йыһанға осоп ҡайтҡан эт*

*Ракета ҡуҙғалғанда әйтелгән һүҙ*

*"Союз-19" менән тоташҡан*

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**13-сө һандағы кроссворд яуаптары.**

1. Һағыҙаҡ. 2. Маймыл. 3. Ҡалас. 4. Мәҙин. 5. Ирәүән. 6. Эскәмйә. 7. Балапан. 8. Мәҙрәсә. 9. Әсбап. 10. Ҡамыт. 11. Баҡса. 12. Тарих. 13. Ислам. 14. Батша. 15. Сәллә. 16. Манса. 17. Балауыҙ. 18. Мәрйә. 19. Сарафан. 20. Мәхәллә. 21. Тамаҡ. 22.Өшә. 23. Хәйлә. 24. Өмә. 25. Күҙ. 26. Һалма. 27. Бүләк. 28. Солоҡ. 29. Фалиж. 30. Тырма. 31. Томан. 32. Мал. 33. Алтын. 34. Ҡомалаҡ. 35. Афған. 36. Муйын. 37. Сәнәғәт. 38. Ҡором. 39. Әфлисун. 40. Имгәк. 41. Һарыҡ. 42. Матәм. 43. Байрам. 44. Һарай. 45. Сыуаҡ. 46. Мәрмәр. 47. Тарамыш. 48. Сәйәхәт.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**11 апрель "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова, А. Абушахманов), мелодр.16+
**12 апрель "Ул бит кисә ине"** (А.Әхмәтғәлиева, А. Абушахманов). 12+
**13 апрель "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова, А.Абушахманов, А. Ишбулдина). 16+
**15 апрель "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З.Бураҡаева, Х. Үтәшев). 12+
**16 апрель "Ах, был мөхәббәт!.."** (А. Чехов, А. Абушахманов, А. Әмиров). 12+
**17 апрель "Килен"** (З. Мусина, Ф. Ғарипов, инсц. З. Бураҡаева), драма. 16+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**11 апрель "Мөхәббәт хаҡы"** (В. Афонин, Р. Хәкимов). 16+
**12 апрель "Отец"** (М. Горький, Д. Хөснийәров), ғаилә драмаһы. 12+
**13 апрель "Я - кулак. Я А-Н-Н-А"** (М. Райцес, О. Мусина). 12+
**15 апрель "Аҡмулла"** (З. Буракаева, Р. Хәкимов). 6+
**16 апрель "Поджигатель"** (Г. Горин, М. Күлбаев), трагикомедия. 16+
**17 апрель "Гарнир по-французски"** (М. Камолетти, А. Шрайнер). 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**11-13 апрель Татар дәүләт ҡурсаҡ театры гастроле.** 10:00 һәм 12:00. 3+
**17 апрель "Почему весна красна?"** (В.Щербакова). 18:00. 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**11 апрель Айгөл Һағынбаеваның** концерты. 12+
**12 апрель "55"** Т. Сәйфуллина исемендәге хор капеллаһының концерты. 12+
**15 апрель** Башҡортостандың халыҡ артисы **Ғәли Хәмзиндең** хәтер кисәһе.16+
**16 апрель "Пасха концерты"**, Владислав Муртазин (орган). 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**11 апрель "Метранпаж мажаралары"** (А.Вампилов), трагикомедия. 12+
С. Латыповтың **"Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** комедияһы менән (12+) гастролдәр:
**14 апрель** - Белорет ҡалаһы. Ҡала мәҙәниәт һарайы
**15 апрель** - Белорет районы Инйәр ауылы
**16 апрель** - Учалы ҡалаһы. Филармония залы
**17 апрель** - Белорет районы Сәрмән ауылы

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**11 апрель "Әсәй, бына һиңә килен...дәр"** (И.Зөйниев, А.Зарипов). 12+
**13 апрель "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 12+
**15 апрель "И жизнь, и слезы, и любовь..."** А.Пушкиндың повесы буйынса. 12+
**16 апрель "Женитьба"** (Н.Гоголь), комедия. 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**11 апрель "Вариҫ"** (В.Жеребцов, Д. Нурғәлин), драма. 12+
**15 апрель "Һинән - фатир, минән - ир"** (Н. Ғәйетбаев, Д. Нурғәлин). 16+
**17 апрель "Беҙҙең байлыҡ"** (А. Сәсәнбаев), комедия. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**11 апрель "Алға барам"**, Раил Өмөтбаевтың концерты. 12+
**13 апрель "Дуҫтарҙы иҫкә алыу кисәһе"**, концерт. 12+
**15 апрель "Мәңгелек классика - музыка балҡышы"**, концерт. 12+
**16 апрель "Алло, йәнем..."**, театрлаштырылған концерт. 12+
**17 апрель Илгиз Абдрахмановтың** концерты. 12+

### БР Милли музейы

**11 апрель** Ротангтан кашпо үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 11:00. 12+
**12 апрель "Совет плакатында космос"** сараһы. 10:00 - 18:00. 6+
**16 апрель "Музей шаршамбыһы"** акцияһы сиктәрендә курс. 14:00. 6+

✓ **"Һомай" йыры Рәсәйҙә, Нидерландта, Финляндияла, Белоруссияла һәм Ҡаҙағстанда алдынғы позицияны биләй. Сингапурҙа, Чехияла, Данияла һәм Үзбәкстанда - икенсе, ә Хорватияла һәм Әзербайжанда дүртенсе урында тора.**



*БАЛАЛАРЫБЫҘ*

# БУЛАСАҠ ҺӨНӘРЕЛЕР ӘЛЕ

**Матурлыҡ тыуҙырыу һәр кемдең ҡулынан киләме? Ә бына был көләкәс ҡыҙыҡайҙың төрлө ижад емештәре, һис шикһеҙ, тирә-яҡты йәмләй. Таныш булығыҙ: Әбйәлил районы Асҡар ауылындағы Таһир Кусимов исемендәге гимназияның 6-сы синыфы уҡыусыһы Нәзилә Хәмитова.**



Әлеге матур, күҙ яуын алырлыҡ тәрилкәләрҙе эшләү серҙәрен Асҡар ауылының Йәш техниктар станцияһындағы түңәрәктә өйрәнә ул. 3-сө синыфта ябай һүрәт төшөрөүҙән башлаған шөғөлөн артабан үҫтереп, бөгөнгө көндә матур итеп таҡтаға яндырып һүрәт, 3Д ручка менән күләмле һүрәт эшләй, быялаға һәм тәрилкәләргә һүрәт төшөрә. Ижади эш унын күңеленә шул тиклем яҡын, түңәрәк булмаған көндәрҙә өйҙә үҙе эпоксид ыҫмала ярҙамында төрлө биҙәүестәр яһай.

Бар күңелен һалып эшләгән шөғөлө уға төрлө конкурстарҙа еңеүҙәр килтерә. Шулай, Балалар һәм үҫмерҙәр ижады республика конкурсында I дәрәжә лауерат исеменә, Өҫтәмә белем биреү учреждениелары араһында биҙәү-ҡулланма ижад буйынса XV зона фәнни-ғәмәли конференцияһында 1-се урынға лайыҡ була ул.

- Минә ҡул эштәре, ижад менән булыу нык оҡшай. Шулай уҡ үҙемдең эштәремде төрлө конкурс һәм ярыштарҙа күрһәтеү, уларҙы баһалауҙары, тәүге урындар яулау минә ышаныс бирә. Бындай еңеүҙәрҙән һуң тағы ла күберәк матур әйберҙәр эшләргә теләгем арта. Үҙең тирәләй матурлыҡ булдырыу яҡшы ла инде. Үҙемдең эштәремде һатыуға ла сығарғым килә. Түңәрәк етәксеһе Зәйтүнә Әкрәм ҡыҙына минә ошондай матур әйберҙәр эшләргә өйрәткәне өсөн рәхмәт. Шулай уҡ минең төрлө ҡалаларға конкурстарға алып йөрөргә һәр саҡ мөмкинлек тапҡан әсәйемә рәхмәт. Апайҙарым минең эштәремде маҡтап, һәр саҡ һоҡланыуҙарын белдереп тора. Уларға ла рәхмәт. Артабан да түңәрәктә шөғөлләнеүҙе һәм матур-матур әйберҙәр эшләүҙе дауам итәсәкмен, - ти Нәзилә.

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# ДОНЪЯ ИҢЛӘЙ...



**Ay Yola төркөмө үҙенең яңы альбомынан "Һомай" йырына клип төшөрә. Донъя чарттарында юғары баҫҡыстарға күтәрелгән йыр ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Клипты апрель уртаһында төшөрә башлау күҙаллана, тип хәбәр итте "Башинформ"ға музыкант Ринат Рамазанов.**

- Беҙ клипты апрель урталарында төшөрә башларға уйлайбыҙ, - тип һөйләне Ринат Рамазанов. - Үҙебеҙҙең клипта Башҡортостандың гүзәллеген, башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосы мотивтарын күрһәтергә теләйбеҙ. Тотош илдән йыйылма команда туплайбыҙ. Был турала ентекләберәк һуңынан һөйләрбеҙ.

Өфөнән Ay Yola башҡорт төркөмө яңы йырын сығарҙы. "Батыр" тигән трек төркөмдөң рәсми телеграм-каналына һалынған. Роликтың рус, башҡорт, ҡаҙаҡ һәм инглиз телдәрендә субтитрҙары бар. Ay Yola хәбәр итеүенсә, "Һомай" йыры Shazam донъя чартында 4-се урынға күтәрелгән. Был трек Рәсәйҙә, Нидерландта, Финляндияла, Белоруссияла һәм Ҡаҙағстанда алдынғы позицияны биләй. Сингапурҙа, Чехияла, Данияла һәм Үзбәкстанда - икенсе, ә Хорватияла һәм Әзербайжанда дүртенсе урында тора. Норвегияла һәм Төркиәлә ул - иң яҡшы унау, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә, Швецияла, Австрияла һәм Бөйөк Британияла иһә Топ 30 иҫәбендә.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, бар донъяла миллионлаған тапҡыр ҡаралған "Һомай" йырын башҡорт мәҙәниәте символы тип атайҙар. Йырҙы Өфөнөң билдәле музыканттары башҡара: Ринат Рамазанов, Адель Шәйхетдинова - солист, Руслан Шәйхетдинов (DJ Руслан Север) - проекттың музыкаль продюсеры. Башҡортса текстың авторы - Диана Килдина. Ay Yola төркөмөнөң "Һомай" йырын рус телендә лә йырлайҙар. Бынан алдараҡ "Урал батыр" эпосына нигеҙләнгән "Һомай" йырының тәүге тапҡыр федераль радио ротацияһына элэгеүе хаҡында ла хәбәр ителгәйне.

# "ҺИН, МИН ҺӘМ БАР ДОНЪЯ"

**Башҡортостан Кинематографистар союзы башҡорт телен өйрәнеү буйынса "Һин, мин һәм бар донъя" тип аталған веб-сериал өҫтөндә эште тамамлап, уны VK социаль селтәренә һәм Рутубҡа һалды. Сериалды ҡараусылар көндән-көн күбәйә, хәҙер улар 4 меңдән ашыу.**

"Веб-сериал 5-7 минутлыҡ 20 сериянан тора. Аудитория башҡорт телен белмәгән һәм махсус шөғөлләнергә мөмкинлеге булмаған, әммә телде еңел һәм аңлайышлы формала үҙләштерергә теләгән 14-35 йәшлек йәштәр өсөн тәғәйенләнгән. Сериал геройҙары Ләйсән (Айсулпан Фәйзуллина) һәм Радмир (Сыңғыҙ Ғиләжев) еңел генә итеп башҡорт теленең үҙенсәлектәре тураһында һөйләй, шулай уҡ йәштәрҙең: "Ни өсөн глобалләштереү, һанлаштырыу быуатында туған телендә өйрәнергә кәрәк?" тигән төп һорауына яуап бирә. Сериал ярҙамында 300-ләгән һүҙҙе үҙләштереп кенә ҡалмаҫһығыҙ, ә һәр берегеҙҙең тормошонда туған телдең роле тураһында һорауҙарығыҙға яуап алырһығыҙ", - тиелә тасуирламала.

"Үҙ ваҡытында Майя Ҡорбанова менән БСТ телеканалында "Башҡорт телен өйрәнәм" тапшырыуҙар циклын төшөрҙөк, уның йыры бик популяр булып китте. "Өфө" журналында "Башҡорт телен өйрәнәм" рубрикаһын алып барҙым, өлкәндәрҙе башҡорт теленә өйрәттем. Шулай уҡ беҙ Башҡортостан Башлығы грантына "Башҡорт теле: яңы ҡараш" тигән 10 ролик өҫтөндә эшләнек, - ти проект авторы Зөһрә Бураҡаева. - Һеңлем Таңсулпан Бураҡаеваның да үҙенең уҡытыу методикаһы бар. Хәҙер төп бурыс - йәштәрҙең иғтибарын туған телде өйрәнеүгә йәлеп итеү, телде ауыр ҡағиҙәләрһеҙ үҙләштереү өсөн алымдар табыу. Минеңсә, шәп килеп сыҡты". 12+

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# ҺӘЛӘТСЕЛ ҠИӘФӘТТӘЛӘР

**"Һ" хәрефенә башланған һүҙҙәр араһында телмәребеҙгә һирәк ҡунаҡ кеүек килеп ингәндәре лә байтаҡ. Бына бер нисә миҫал.**

**Һәл.** Диалекттарҙа "саҡ", "әле генә" тигән мәғәнәгә тура килгән һүҙ, руссаһы "только что". *Һәл ҡайтып торам. Ҡар һәл яуа башланы.*

**Һәләтсел.** "Эшлекле" тигәнде белдерә. *Һәләтсел йәштәр бик күп. Һәләтсел ҡиәфәттә йөрөү.*

**Һәмгелсәк.** Хәҙер һирәк осраған был әйберҙең "сәңгелдәк" тигән атамаһы һәммәбеҙгә яҡшы таныш. "Һәмгелсәк" - шул уҡ "сәңгелдәк", "бишек". *Сабый һәмгелсәктә иҙерәп йоҡлай. Балалар баҡсала һәмгелсәк өйә.*

**Һәңгәр, йәшел һәңгәр.** Химия дәресендә өйрәнелгән баҡыр купоросы беҙҙеңсә йәшел һәңгәр була. "Һәңгәр" мотлаҡ иптәшлеккә "йәшел" һүҙен талап итә. *Тәжрибә юлы менән йәшел һәңгәр алыу. Ағас-ҡыуаҡтар бәшмәкләмәһен өсөн, йәшел һәңгәр менән эшкәртелә.*

**Һәрҡәш.** "Һөҙгәк" һүҙенең синонимы. *Һәрҡәш мал. Һәрҡәш һыйыр һөттө күп бирә.*

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИҪӘРҘЕ ЯҠЛАМА...

## ялҡауҙы маҡтама

Әгәр ҙә һин тормошонда яуызлыҡтың дуҫы йә иһә өнһөҙ шаһиты булғанһың икән, ундай тормоштоң булғанынан булмағаны артыҡ.

**(Луи Сент-Жюст).**

Ғүмер ахырында оят һәм һағыш ул ҡәҙәре оҙаҡҡа һуҙылмай.

**(Сэмюэл Джонсон).**

Күп тапҡырҙар бәхетһеҙ булыуға ҡарағанда... бер мәлдә бәхетле булыу яҡшыраҡ.

**(Луис Борхес).**

Мөхәббәт иркен киңлектәрҙә тыуған һәм йәш инә арыҫлан һөтө менән туҡландырылған...

**(Уильям Голдинг).**

Һәр дингә йола үтәүгә һәм ғәҙәткә әйләнеү ҡурҡынысы янай. Хәйер, йолаларһыҙ һәм ғәҙәттәрһеҙ дин дә булмай инде.

**(Томас Элиот).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ карт аҡһаҡал ҡоштар баҙары урынлашҡан паркҡа килеп инә. Бик күп ҡоштар бикләнгән оло ситлек янына килеп туҡтай һәм ҡоштарҙы ла, әйләнә-тирәләге кешеләрҙе лә күҙәтә башлай. Был ситлектәге ҡоштарҙың йонсоу, хәлһеҙ булыуына, етмәһә, уларҙан һаҫы еҫ килеүенә иғтибар итә аҡһаҡал. Бының сәбәбен шунда уҡ аңлап ала ул: ситлек янына серек, күгәреп бөткән бойҙай тултырылған ҙур тәпән ултыртып ҡуйылған. Унда, ситлек янына килгән кешеләр ҡоштарҙы ошо бойҙай менән һыйлай ала, тигән яҙыу ҙа эленгән. Һәр кеше, бер ни уйлап тормаҫтан, ошо бойҙайҙы усына һоҫоп ала ла, ситлектәге ҡоштарға һибеп ебәрә. Ҡоштар һибелгән емгә ябырылмай ҙа, тайшанмай ҙа, өркмәй ҙә, ултырған урындарында ултыра бирә һәм иғтибар менән кешеләрҙең артабанғы хәрәкәтен күҙәтә бирә...**

**Ҡарт аҡһаҡал был ҡоштарҙы бер аҙ йәлләп күҙәтеп тора ла, кеҫәһендәге икмәкте ваҡлап, ҡоштарға һибә. Ҡоштар тәмле ризыҡ еҫен һиҙеп, бер-береһен суҡый-суҡый икмәк валсыҡтарын сүпләй башлай. Ҡоштарҙың сыр-сыу тауышына был ситлекте ҡараусы йүгереп килә. Эштең ниҙә икәнен күргәс, ҡараусы аҡһаҡалды әрләй башлай, киләсәктә был паркта аяғыңдың эҙе лә булмаясаҡ, тип янай. Быға ҡаршы карт аҡһаҡал шулай тип яуап бирә: "Ҡалыплашып ҡатып ҡалған ҡағиҙәләрҙең тере йәндәрҙе нисек итеп һәләкәткә килтергәнен үҙ ғүмеремдә күп күргәнем булды... Башҡаларға эйәреп, был бәхетһеҙ ҡошсоҡтарҙы сереп бөткән ризыҡ менән һыйлағансы, бындай хәлдә бөтөнләй күрмәгәнең яҡшы..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25014

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.



«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2857
Заказ - 690